✓ *Яҡшылыҡ - ул үтескә бирелә торған әйбер түгел. Ул - Тәңре хаҡы. Кире ҡайтыр изгелеге лә Тәңренән.*

*(М. Бураҡаева).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16 - 22 ИЮЛЬ (МАЙАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№29 (447)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Таш менән атҡанға...**

аш менән яуап ҡайтар



3

**Башҡорт бейҙәре һәм әмирҙәре**



6

**Себер китә егеттәр...**



аҡса артынан

7

**Дөйә урлаусылар майҙа йөҙә,**

Энә урлаусылар - төрмәлә...



8-9

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ниндәй төр аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк бирәһегеҙ: сит илдекенәме, әллә үҙебеҙҙә етештерелгәненәме?

***Мәхмүзә ҒӘЙНУЛЛИНА, медицина фәндәре докторы, Роспотребнадзорҙың Хеҙмәт медицинаһы һәм кеше экологияһы буйынса Өфө ғилми тикшеренеү институты профессоры, БР Йәмәғәт палатаһы ағзаһы:*** Әлбиттә, үҙебеҙҙекен һатып алам! Әйткәндәй, был һорау бик урынлы ҡуйыла бөгөн. Аҙыҡ-түлек базарына сығып, бер генә күҙ һалығыҙ әле: ҡайҙан ғына ни генә килтермәйҙәр! Бер яҡтан, хаҡтары үтә ҡыйбат. Икенсе яҡтан, ситтән килтерелгән аҙыҡ-түлеккә һағырак ҡарарға кәрәктер, тием, сөнки улар ниндәй шарттарҙа етештерелә, унан оҙон-оҙаҡ юлдар үтеп, беҙгә килеп еткәнсе, ҡайҙа һәм нисек һаҡлана - берәү ҙә белмәй. Шуға күрә, мөмкин булғанда тауар төрөлгән ярлыҡтарҙы уҡып, бик ныҡ ҡарап алырға кәңәш итәм. Мин үҙем хатта тоҙҙо ла әллә ҡайҙан ситтән килтерелгәнде алмайым. Ә инде һәр төрлө консерваланған ит, балыҡ, диңгеҙ ризыҡтарын, йогурттарҙы бөтөнләй алмаҫҡа тырышам. Үҙебеҙҙең, мәҫәлән, Дәүләкәндә, Миәкәлә лә быңа тигән файҙалы йогурттар етештерелә бит! Һаҡланыу ваҡытына ҡарап та уның зыянһыҙ икәнен белергә була. Ситтән килтерелгән йогурттар яртышар йыл буйы һаҡланһа, беҙҙекеләрҙең срогы - ун көн. Йәшелсә-емешкә килгәндә, шулай уҡ Башҡортостаныбыҙҙа үҫтерелгәндәрен һайлайым. Туймазы, Алексеевканың помидор, ҡыярҙары күпкә үтемлерәк. Тик ҡыярҙы әрсеп, уның бер осондағы ҡара-йәшел өлөшөн (нитрат шунда туплана) ҡырҡып ташлап файҙаланырға кәрәк. Американың тауыҡ боттарын элек тә урап үтә инем, хәҙер ҙә үҙебеҙҙең Турбаслынан килтерелгән һәм "һыуытылған" тауыҡтарға өҫтөнлөк бирәм, сөнки туңдырылған тауыҡ итендә туҡлыҡлы мәтдәләр күпкә кәмей. Шуныһы ҡыуандыра: һуңғы ваҡытта республикабыҙҙа ҡулланыу баҙары тотороҡлана бара, урында етештерелгән аҙыҡ-түлеккә хаҡтар арзанырак, шуға күрә беҙ, һатып алыусы һәм ҡулланыусылар, был ыңғай күренешкә үҙ өлөшөбөҙҙө индерәйек, үҙебеҙҙә етештерелгән тауарҙарға, аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк бирәйек.

***Сәғит ҒӘББӘСОВ, эшсе:*** Үткән йәкшәмбе ҡатын ҡайнатмаға шәкәр кәрәк тигәс, баҙарға сығып, ҡарап йөрөнөм һәм шундай һығымтаға килдем: республикала етештерелгән аҙыҡ-түлектең ҡайһы бер төрҙәренә хаҡтар төшә башлаған. Мәҫәлән, кәбеҫтәнең килограмына хаҡ 10 һумға төшкән, хәҙер уның килоһын 24 һум 66 тингә алырға була. Ҡыярҙың хаҡы 70 һумдан 40 һумға тиклем, йомортҡаның тиҫтәһе 3 һумға кәмегән. Әйткәндәй, шәкәр күпкә булмаһа ла, бер ай эсендә килоһы 1 һумға төшкән икән, үҙебеҙҙең Шишмәнекен бер тоҡ һатып алдым. "Йәмәғәтселек электрон гәзите" сайтын даими күҙәтеп барам. Ошо көндәрҙә генә әле унда мин республикабыҙ президенты Р. Хәмитовтың төбәк халҡы менән онлайн-аралашыуына тап булдым. Президент әйтеүенсә, тиҙҙән республика аҙыҡ-түлек етештереүселәре мәнфәғәтендә махсус программа эшләнәсәк икән. Президенттың: "Бөгөн халыҡты иң ҡыҙыҡһындырған мөһим проблема - ул аҙыҡ-түлек мәсьәләһе. Кешеләргә үҙебеҙҙең республика тауар етештереүселәре һатыуға сығарған аҙыҡ-түлек төрҙәренең өҫтөнлөклө булыуын аңлатырға кәрәк", - тигән һүҙҙәре лә яҙып ҡуйылған был сайтта.

Ошо уҡ сайтта ауылдарҙан килеп, үҙе етештергән аҙыҡ-түлек менән сауҙа итеүсе кешеләргә шарттар тыуҙырыу тураһында ла мәсьәлә күтәрелә. "Бәләкәй баҙарҙар булдырырға кәрәк, - ти Р. Хәмитов. - Бының өсөн әллә күпме сығым кәрәкмәй, бары тик ауыл хужалығы етештереүсеһе өсөн өҫтәл ҡуйыу ҙа етә". Быныһы, әлбиттә, урындағы власть органдары эше. Ғөмүмән, ауыл етештереүселәре ҡала баҙарҙарына үтеп инеү, сауҙа итеү мөмкинлеге алыу мәлен күптән көтә.

***Әлфирә СОЛТАНОВА, Иглин ҡасабаһында йәшәүсе йорт хужабикәһе:*** Иркен йорт-ҡаралтыһы булған үҙ өйөбөҙҙә йәшәйбеҙ, мал, ҡош-ҡорт тотабыҙ. Ике һыйырҙың һөтөн эш итеп, Өфөнөң Сипайлово биҫтәһендәге Гагарин баҙарына һатырға алып киләм, сөнки үҙендән артып ҡалғанды башҡаса ҡайҙа итәһең? Ҡыҙҙарымдың үҙ хужалыҡтары, үҙҙәренеке үҙҙәренә етеп тора. Ә Өфөлә минең алып килгән эремсек, май, ҡаймаҡ, ҡорот, ҡатыҡ кеүек ризыҡтарҙы көтөп һатып алыусы даими таныштарым бар. Баҙар янына ирем иртүк килтереп ҡалдыра. Бер проблема ла юҡ, тиер инем, шуныһы кәйефте ҡыра: алып килгән ризыҡтарҙы ергә теҙеп һалырға тура килә, шунда берәй өҫтәл кеүек ҡулайлама эшләп булмай микән ни шул? Баҙарҙың эсенә инеү өсөн түләргә, әллә ниндәй справкалар юллап килтерергә кәрәк. Мин бит унда көнө буйы тормайым, тиҙ генә һатам да ҡайтып та китәм. Элегерәк милиция ҡыуып йонсота ине, әйтерһең дә, мин нимәлер урлап һатам. Үҙең етештергән ауыл ризығына етә буламы! Алыусыһы бар, тик ана шул берәй законлаштырылған урыны булһын ине.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.**



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЭШҺЕҘ ҠАЛҒЫҺЫ КИЛМӘҺӘ...

## чиновниктарға ауырымаҫҡа тура килә

**Яңы законға ярашлы, дәүләт хеҙмәткәре дүрт айҙан ашыу ауырығанлыҡ ҡағыҙы буйынса эш урынында булмаһа, уның менән хеҙмәт контрактын өҙөргә мөмкин.**

Шул уҡ ваҡытта, хеҙмәткәрҙе эшенән бушатырға ҡарар ителһә, законға ярашлы, уға дүрт айлыҡ эш хаҡы күләмендә матди компенсация түләү мөһим. Компенсацияға хеҙмәт хаҡына ҡушып, төрлө айлыҡ өҫтәмәләр ҙә индерелергә тейеш. Бында күп йылдар эшләгән һәм дәүләт серен тәшкил итеүсе мәғлүмәттәр менән эш иткән өсөн, шулай уҡ айлыҡ аҡсалата, айырыуса ауыр эштәрҙе атҡарғандарға, дәртләндереү һәм отпуск өсөн түләүҙәр инә. Шулай уҡ хеҙмәткәргә эшенән бушатыу сәбәпле түләүҙәрҙе иҫәпләгәндә, контрактты өҙөү датаһына тиклем 12 ай буйы түләнгән өҫтәмә түләүҙәрҙең ун икенән бер өлөшө лә иҫәпкә алынасаҡ.

Әгәр ҙә хеҙмәткәр йәрәхәтте, имгәнеүҙе, зәғифләнеүҙе үҙенең эш вазифаһын үтәгән ваҡытта алһа, ул тулыһынса йүнәлгәнсе йәки ғәриплек алғансы эш урыны һаҡлана. Шулай уҡ законда ниндәй ауырыуҙар булғанда хеҙмәткәр менән килешеүҙе бер яҡлы өҙөргә ярамағанлығы ла асыҡлана. Элекке кеүек үк, етәксе чиновникты отпуск йәки декрет ялы ваҡытында эшенән бушата алмай.

Законда шулай уҡ ҡайһы бер граждандар категорияһына ҡаралған гарантиялар хаҡында ла әйтелә. Улар араһында Чернобыль АЭС-ы аварияһы һөҙөмтәләрен бөтөрөүселәр, Алыҫ Төньяҡта һәм уға яҡын ерҙә эшләүселәр бар.

Хеҙмәткәрҙе эштән бушатыу өсөн һаулыҡ торошонан тыш, уның квалификацияһының биләгән эш урынына ярашлы булмауы ла (аттестация һөҙөмтәләре менән раҫланған булырға тейеш) нигеҙ булып тора ала. Шулай уҡ хеҙмәткәр тарафынан үҙ вазифаһын бер тапҡыр тупаҫ боҙоу булһа, эшкә сыҡмаһа, эш урынына алкоголь, наркотик йәки токсин матдәләр тәьҫире аҫтында килһә, дисциплинар яза ҡаралған.

**Әйткәндәй...**

2011 йылдың 1 июленән ауырығанлыҡ ҡағыҙының яңы төрө ҡулланылышҡа инде. Рәсәй Социаль страховка фонды һәм Росздравнадзор ауырығанлыҡ ҡағыҙҙары биреүҙе, шулай уҡ ауырығанлыҡ ҡағыҙына ярашлы пособие түләгәндә социаль страховка фонды аҡсаһын рациональ тотоноуҙы контролдә тотоуҙы күҙаллаған хеҙмәттәшлек хаҡында ике яҡлы килешеүгә ҡул ҡуйған.

Күптән түгел булып үткән кәңәшмәлә Өфө ҡалаһы һәм бөтә республика медицина ойошмаларының 300 тирәһе вәкиле ҡатнашып, ауырығанлыҡ ҡағыҙын тултырыу буйынса яңы ҡағиҙәләр менән танышты, документтың өлгөһөн ҡараны һәм иҫке өлгөләге документтарҙы Фондҡа кире тапшырыу буйынса аңлатмалар алды. Шулай уҡ кәңәшмәлә ауырығанлыҡ ҡағыҙын этаплы рәүештә электрон формаға күсереү хаҡында ла һүҙ барҙы.

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ТОРМОШОБОҘ КӨҘГӨҺӨ

**Мин хаҡлы ялдағы уҡытыусымын. Ҡырҡ биш йыл балаларға әхлаҡи тәрбиә һәм белем бирҙем. Уҡыусыларым араһында атҡаҙанған табип, атҡаҙанған уҡытыусы, фән кандидаты һәм башҡа күренекле кешеләрҙең булыуы мине шатландыра.**

Уҡытыусымын тигән уҡытыусы белемле, киң ҡарашлы булырға тейеш. Ә быға уның ҡыҙыҡһыныусанлығы, китаптар, гәзит-журналдар менән дуҫ булыуы булышлыҡ итә. Дәреслектәрҙә бирелгән материалдарҙан тыш, республикала сыҡҡан матбуғат баҫмалары материалдарын ҡулланыу, һис шикһеҙ, минең өлгәшкән уңыштарым нигеҙен тәшкил итә, тип уйлайым. Бына, мәҫәлән, "Киске Өфө" гәзите бөгөнгө күп уҡытыусыларҙың өҫтәл баҫмаһына әүерелеп бара. Күптәр уны дәрес үткәргәндә, ата-әсәләр һәм балалар менән тәрбиә эштәре атҡарғанда ҡуллана икәнен беләм. Ҡыҙғаныс, мин мәктәптә эшләгән йылдарҙа бындай әҙер тәрбиә әсбабы итеп ҡулланырҙай баҫма булманы.

Мин "Киске Өфө"гә йыл да яҙылам, бар материалдарын да уҡып сығам, һығымталар яһайым, көндәлек тормошта ла гәзиттә бирелгән өгөт-нәсихәттәрҙе ҡулланам. Гәзит үҙенең уҡыусыларына матур йәшәү өлгөһөн, теләһә ниндәй ауырлыҡтарҙан сығыу юлдарын, ата-бабаларыбыҙҙың тормош тәжрибәһен аңғарта - ошоноң менән оло баһаға лайыҡ ул. Ул үҙенең һәр һанында йәш быуынды ысын кеше итеп тәрбиәләү алымдарын, йәштәрҙе иман юлына өндәүҙәрҙе үҙ эсенә алған мәҡәләләр урынлаштырыуы менән дә көнкүреш кәрәк... 

**Миңнулла ӘЛИМҒОЛОВ.**
**Күгәрсен районы**
**Төпсән ауылы.**



*КЕМ АЛЫҠ!*

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм йәмәғәт! Әйҙәгеҙ, фекер йөрөтәйек әле: мәғлүмәт сығанағын ниндәй маҡсат менән файҙалана кеше?**

● Мәғлүмәт сығанаҡтары, беренсенән, бөгөнгө ябай булмаған заманда баҙап ҡалған кешеләрҙең "Артабан ни эшләргә?" тигән һорауына, ғөмүмән, донъяла үҙ урынын, үҙ эшен, үҙ ашын, үҙ маҡсатын, үҙ шөғөлөн табырға ярҙам итер мең төрлө башҡа һорауҙарына яуап бирергә тейеш.

Икенсенән, теге йәки был һорауына яуап алһын, ул яуапты эшкә екһен өсөн кешенең иң тәүҙә донъяға үҙ ҡарашы, аңлауы булырға тейеш. Тимәк, мәғлүмәт сығанағының бурысы - уның аңын уятыу, аңлатыу, маҡсат ҡуйырға, уйландырырға өйрәтеү.



"Киске Өфө" аҙналыҡ баҫмаһы тап ошо бурысты йөкмәгән иңенә. Әйҙәгеҙ, уны уҡып, бергәләп уйланайыҡ, донъяуи һорауҙарға бергәләп яуап эҙләйек, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, аҡыл тирәйек, кәңәш-төңәш итәйек. Рухланайыҡ, сәмләнәйек.

● Әйткәндәй, кемдәр быйылғы йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгән, улар 17 июлгә тиклем яҙыла ала һәм гәзитте августан алдыра башлаясаҡ. Шулай уҡ 1 июлдән 31 августа тиклем 2012 йылдың беренсе ярты йыллығы өсөн быйылғы хаҡтар менән (**50665** индекслыһына **340 һум 92 тин**, **50673** индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тин**) ваҡытынан алда матбуғат баҫмаларына яҙылыу башлана, тигән иғланыбыҙҙы ла иҫкә алып ҡуйығыҙ. Июлдә гәзитебеҙгә яҙылып, шулай уҡ 2012 йыл өсөн дә яҙылып ҡуйып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәргә бүләккә 5 **"Ҡөрьән-Кәрим"** һәм 20 **"Дини календарь"** (2012 йыл өсөн) әҙерләп ҡуйғанбыҙ.



● Кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● "Киске Өфө" бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың указы менән Мәхмүтов Әнүәр Әнәс улы - БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, Балабанов Владимир Александрович - БР Президенты Хакимиәте етәксеһе, Маврин Евгений Викторович Башҡортостан Республикаһының иҡтисади үҫеш министры итеп тәғәйенләнде.

✓БР Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың эре эшҡыуарҙары һәм сәнәғәт предприятиелары етәкселәре менән осрашты. Һөйләшеүҙә шулай уҡ БР Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов, Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫарҙары ҡатнашты. Рөстәм Зәки улы әйтеүенсә, Башҡортостан сәнәғәт етештереүе буйынса илдә алдынғылар иҫәбендә. Ярты йыллыҡ эш һөҙөмтәләре буйынса сәнәғәт етештереүе күләме 110 процент тәшкил иткән, был уртаса Рәсәй күрһәткестәренән юғарыраҡ.

✓Башҡортостанда пландан тыш транспортта пассажирҙар ташыу хәүефһеҙлеге торошон тикшереү дауам итә. Тикшереүселәр иғтибарынан муниципаль транспорт та ситтә ҡалмаясаҡ. 11 июлдә Ҡаҙанда "Болғар" теплоходы менән булған фажиғәнән һуң БР Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов ҡарары менән һыу транспортында пассажирҙар ташыу хәүефһеҙлеге тикшерелә башлағайны. БР Хөкүмәте ҡарары менән, белгестәр транспорттың техник торошон, ҡотҡарыу сараларының булыуын һәм уларҙың төҙөклөгөн, норматив документтарҙы, көтөлмәгән хәл осрағында хәүефһеҙлекте ойоштороу мөмкинлеген тикшерәсәк.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов республика тауар етештереүселәре һәм сауҙа селтәрҙәре менән хеҙмәттәшлектә яңы ҡараш булдырыу кәрәклеген белдерҙе. Марттан алып ҡулланыусылар баҙарында хәл тороҡланыуға ҡарамаҫтан, ҡулланыу хаҡтары индексы инфляция кимәленән юғарыраҡ ҡала бирә. Былтырғы ҡоролоҡ һәм уңыштың түбән булыуы һөҙөмтәһендә быйылғы йылдың тәүге кварталына тиклем аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың артыуы күҙәтелһә, әле ҡайһы бер аҙыҡ-түлек төрҙәренә хаҡтың түбәнәйеүе билдәләнә. Хаҡтарҙың үҫешен тотҡарлау юлдарының береһе - дефицитһыҙ эске баҙар ойоштороу, шуға ла бөгөн ауыл хужалығы баҙарҙары, логистик үҙәктәр һәм сауҙа селтәрҙәре менән үҙ-ара эш итеү схемаһын төҙөү бурысы тора, тип билдәләнде оператив кәңәшмәлә.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

**Хәҙерге заман күҙлегенән ҡарағанда, һиңә таш атыусыға аш менән яуап ҡайтарыу нисектер мәхлүк хәлендәге кешенең хәләте һымаҡ тойола. Әммә әйтемдең төпкәрәк һалынған мәғәнәһен юллаһаң, уның кешелекте һәләкәттән һаҡлап ҡалыр милли идеяға торошло мәғәнәһен дә тоймалайһың. Улай ғына ла түгел, кешелекте һәм милләтте, асылда, тап ошо ҡағиҙә йәшәтә кеүек.**



# ТАШ МЕНӘН АТҠАНҒА...

## аш менән яуап ҡайтар

Был әйтемдең "Эт менән эт булма", "Алйот еңдем, аҡыллы ҡуйҙым тиер" тигән варианттары ла бар. Уларҙың араһында "Таш менән атҡанға аш менән яуап ҡайтар" тигәне һәлмәгерәк барыбер. Ни өсөн тигәндә, был әйтемгә бер-берәһенә ҡапма-ҡаршы позицияла тороусы ике кешене, ике яҡты, ике дәүләтте, ике илде яраштырыу, мөнәсәбәттәрен көйләү механизмы һалынған. Һәр бер таш атыуға яуап итеп таштар яуҙырыла башлаһа, кешелек һәләкәткә осрау ғына түгел, күптән инде еребеҙ күсәренән ысҡынып киткән булыр ине.

Ә бит илебеҙ, милләтебеҙ өсөн тап ошондай һәләкәттең сигенә килеп еткән, ҡыл осонда торған мәлдәребеҙ күп булды. Тарихыбыҙға күҙ йүгертһәк, беҙ бындай мәлдәргә Алтын Урҙа, һуңынан Рус батшалығы менән килешеүле мөнәсәбәт ҡороуыбыҙҙы индерәбеҙ. Беҙгә уларҙың таш күтәреп килгән саҡтары ла күп булған һәм хәҙерге көндә милләтебеҙ үҙ республикаһында йәшәп ята икән, бында, әлбиттә, "таш-аш" нисбәте дөрөҫ билдәләнгәндер тип уйлағы килә. Беҙҙең еребеҙгә килеп төпләнеп, ерләшеп китеүселәр араһында беҙҙең башҡа тәғәйенләнгән ташты ҡуйындарында йөрөтөүселәр әле лә юҡ түгел. Улар таштарын Интернет селтәре, башҡа мәғлүмәт саралары аша һаман да ырғыта. Хәтерегеҙҙә булһа, Өфөлә уҙғарылған Дәүләт советы ултырышында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов ундайҙарҙың эшмәкәрлеген еңәйткә тиңләрлек законлар сығарыу зарурлығы хаҡында белдергәйне. Республика башлығының был тәҡдимен иҫәпкә алыусы булмаһы шикелле. Һәр хәлдә, ниндәйҙер рәсми органдың был мәсьәләгә иғтибар иткәнен ишеткәнем булманы. Беҙ иһә, беҙгә таш атыусыларға һаман да аш атабыҙ...

Миңә бала сағымдан ҡартәсәйемдең тәрбиә йоғонтоһо ғәжәйеп ҙур тәьҫирле булды. Уның миңә: "Улым, яҡшы бул. Яҡшы кешене яман кеше лә ярата", - тип әйткәне хәтеремә ныҡ уйылып ҡалған. Әллә совет осороноң һуғышсан атеизм йоғонтоһо көслө булдымы, әллә тәрбиәнең күберәк "ярамай"ға ҡоролоуы һөҙөмтәһеме, ололарҙың тап ошолай тип әйткән һүҙҙәре, бер ҡолағыбыҙҙан инеп, икенсеһенән сығып китмәгән хәлдә лә, тормош беҙҙе икенсе төрлөрәк ҡаршы алып, башҡасараҡ уйҙар менән йәшәргә мәжбүр итте кеүек. Ул сағында һәр ҡайһыбыҙ ҡысҡырып әйтмәгән хәлдә лә, эстән генә ошондай хәҡиҡәтте танины буғай:

-Нисек инде, һиңә таш менән һуғыусы кешене аш менән һыйлап тораһың, инде шул ғына етмәгәйне...

-Мин лутсы ташын алып үҙенең башын яра һуғам, тотһон была йоҙроғомдо...

-Сәләм ниндәй булһа, яуабы ла шулай, һ.б.

Мин үҙем дә, мәҫәлән, совет осоронда был мәсьәләгә түбәндә үҙем яҙған "Аңшайттым" шиғырындағыса ҡараштa инем:

*Ул миңә таш атты,*
*Мин уға аш аттым.*
*Ташы башымды ватты,*
*Ә мин уны*
*Ашаттым.*
*Ул тағы ауыҙын*
*Салшайтты.*
*Тағы таш атты.*
*Ташы*
*Тағы башымды ватты.*
*Ә мин тағы аш аттым,*
*Тағы ашаттым.*
*Арыным...*
*Ул йәнә ауыҙын салшайтты,*
*Йәнә таш атты.*
*Ташы йәнә башымды ватты.*
*Оҙа-а-а-а-аҡ баш ваттым...*
*Ташын ашаттым,*
*Тешен ҡаҡшаттым,*
*Аңшайттым,*
*Ҡайттым...*

Яйлап донъяның һәм тормоштоң асылына төшөнә килә, күп нәмәгә ҡараштар үҙгәрә икән. Был йәһәттән атаҡлы урыҫ яҙыусыһы Лев Толстойҙың "Яуызлыҡҡа көс менән ҡаршы тормау" идеяһы хәҙерге ҡараштарыма тура килә. Йәшәйештең иң юғары серҙәренә үтеп инеүсе аҡыл эйәһе хатта христиан дине ҡанундарына ҡаршы килеп булһа ла, "Таш менән атҡанға аш менән яуап ҡайтар" фекерен яҡлап сыға. "Урал батыр" эпосының төп фекерҙәренең береһе лә быға ауаздаш. Үҙ халҡына, үҙенә ҡаршы ниндәй генә этлек эшләмәһен, Урал батыр Шүлгәндә аяй, уның үгмерен һаҡлап ҡала. Сөнки ул бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлай: кеше йөнөн ҡыйыусы кеше - шул уҡ яуызлыҡ юлына баҫыусы ла...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# СИТТӘР КӘМӘҺЕНӘ...

## ултырып ҡуйма!

**"Киске Өфө"нө уҡып барыусы бер әхирәтем: "Был гәзиттең исемен үҙгәртергә, уны ҡыҫҡа ғына итеп, йөкмәткеһенә тап килтереп, "Аҡыл" тип атарға кәрәк. Күпме фәһем, аҡыл бирә был баҫма. Ундағы әхлаҡ, тәрбиә, дин, әүлиәләр тураһындағы мәҡәләләрҙе уҡыһаң, үҙеңдең был өлкәлә ни тиклем наҙан икәнеңде, камил түгеллегеңде аңлайһың..." - тигән фекере менән ураҡлашҡайны.**

Ысынлап та, күп йәһәттән, шулай уҡ үҙебеҙҙең халыҡсан тәрбиә мәсьәләләрендә лә, дин мәсьәләләрендә лә бик наҙанбыҙ шул. Элегерәк "Киске Өфө"лә "Динһеҙ менән әңгәмә" рубрикаһы була торғайны, бәлки, уны ҡабатларға йә дауам итергәләр? Һәр кем хәҙер дингә аңларға теләй, әммә аңлатыусылар бик аҙ. Мәсеттәргә барып, дин әһелдәренең вәғәзен тыңлау ғына етмәй, миненсә, радиотелевидениенан да, гәзиттәрҙән дә аңлатыу, өйрәтеү булырға тейеш. Юҡһа, ишетеүемсә, иман көсәгән йәштәребеҙ яңылыш юлдан китеп, йә берәй сектаға, йә бөтөнләй башҡа дингә инеп китә, тиҙәр.

Коммунистар идеологияһы ҡолап, күптәр дини белемгә ынтылған йылдарҙа минең менән булған бер хәлде яҙып үтәйем әле. Бер көндө төш мәлендә фатирымдың ишеген ҡаҡтылар. Минең: "Кем унда?" - тиеүемә: "Беҙ һеҙгә һәйбәт хәбәр алып килдек!" - тип яуап бирҙеләр. Кемдең генә һәйбәт хәбәр ишеткеһе килмәһен инде - ишегемде астым. Ишек төбөндә утыҙ йәштәр самаһындағы һәм сал сәсле ике ир баҫып тора. "Һәйбәт хәбәребеҙ шул: тиҙҙән Ер йөҙөндәге бөтә илдәр менән Аллаһ үҙе идара итер. Ғәжәллек тантана иткән тыныс тормош башланыр", - тине ирҙәрҙең сал сәслеһе. "Беҙ "Свидетели Иегово" тип аталған ойошма вәкилдәре", - тине йәшерәге һәм ҡулыма "Библия" китабы тотторҙо. Ошо китапты уҡып сығырға көнөш биреп, ойошманың йыйылышына килергә саҡырып киттеләр. Шулай итеп, һәр шәмбе һайын ошо ойошма вәкилдәре йыйылған урынға барып, "Библия" буйынса фекер алышыуҙарҙа ҡатнаша башланым. "Библия"ла яҙылған күп фекерҙәрҙе ҡабул итә алмайым, шул сәбәпле йыйылыусыларға ҡатмарлы һорауҙар яуҙырам, тик һорауҙарыма яуап ала алмайым. Бер йылға яҡын өйрәндем мин ул "Библия"ны һәм берҙән-бер көндө баяғы мине был ойошмаға килергә күндергән Илдар тигән егеткә: "Мин һеҙҙең дингә ҡабул итә алмам, хәҙер мин "Ҡөрьән-Кәрим"де ныҡлап өйрәнеүгә күсәм. Минең ата-бабаларым да, аҫҡалар ҙа, киҫҡәләр ҙә, сит дингә ҡабул итмәгән..." - тинем. Шунан алып был ойошмаға ҡарата ҡыҙыҡһыныуым бөттө. Ә бит унда аҙашып йөрөп барып эләккән беҙҙең йәштәребеҙ ҙә байтаҡ ҡына.

Бер хикәйәт ишеткәйнем. Берәү Аллаға, уның барлығына ышанмай йәшәгән дә, был яҡты донъяны үтеп, Аллаһ ҡаршыһына яуап бирергә барып баҫҡан. "Эй, Аллаһ, һинең барлығыңа ышанмай йәшәнем. Мине яҡты донъяға ҡабат ҡайтар. Һине күрҙем, һин бар", - тип инәлгән, ти. "Минең барлығыма ышанмағандар һинең ҡабат ҡайтыуыңа ла ышанмаҫ бит", - тип яуап биргән Аллаһ. Әлбиттә, тәбиғәттең камиллығына һоҡланғанда, был мөғжизәне ижад итеүсе барҙыр, тигән ышаныс тыуа. Ә усаллыҡ, яуызлыҡ менән осрашҡанда, шағир әйткәнсә, "Юҡтырның да Аллаһ, әгәр булһаң..." тигән шиғри юлдар иҫкә килә. Шуға ла динебеҙ тураһында ла бик күп яҙырға, һөйләргә кәрәк, тимәксемен. Тормошта аҙашып йөрөмәҫ, ситтәр кәмәһенә ултырмаҫ, гөмүмән, ышаныс-инаныстар менән йәшәр өсөн дин өлкәһендә лә мәғлүмәтле булыу кәрәк.

**Айгөл АХУНОВА.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Йыл башынан Башҡортостандың урман хужалығы биләмәләрендә 59 янғын осрағы теркәлгән, 384 гектар урман янған. Кеше ғәйебе менән - 28, йәшен атыу һөҙөмтәһендә дүрт янғын сыҡҡан. Һуңғы арала урман янғыны теркәлмәһә лә, министрлыҡ һәм урмансылыҡ хеҙмәткәрҙәре урмандар торошон етди күҙәтеү аҫтында тота.

✓"Салауат Юлаев" хоккей командаһы 2012 йылдың 5-8 ғинуарында Санкт-Петербургта Европа чемпиондары кубогы өсөн көрәшәсәк. Турнирҙың рәсми атамаһы - Президент Кубогы. Турнирҙа "Фэрьестад" (Швеция), ХИФК (Финляндия), "Тршинец" (Чехия), "Давос" (Швейцария), "Айсбэрен" (Германия) командалары уйнаясаҡ.

✓Башҡортостанда милли йылҡысылыҡ паркы булдырырға йыйыналар. Уны Өфө йылҡысылыҡ заводы базаһында ойоштормаҡсылар. Парк биләмәһендә иппотерапия үҙәге, һыбай йөрөү мәктәбе, ҡымыҙ менән дауаланыу, ғаилә менән ял итеү урындары, музей булдырыу күҙаллана. Бындай проекттың Рәсәйҙә тиңе юҡ.

✓Росстат мәғлүмәттәре буйынса, илдә ярлылыҡ сигендә йәшәүселәрҙең һаны йыл һайын 2,3 миллионға арта. Белгестәр белдереүенсә, эш биреүселәрҙең 50 процентынан ашыуының әлеге ваҡытта хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын күтәреү мөмкинлеге юҡ. Эш биреүселәрҙең 26 проценты хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыу һәм көмәтеү яғына индексациялау һәләтенә эйә, 22 проценты бөгөндән үк эш хаҡын арттырырға әҙер. Рәсәйлеләрҙең 16 проценты йәшәү минимумынан түбән килемгә көн итә.

✓Өфө Эшҡыуарҙар союзының йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәһе 13 һәм 20 июлдә урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр өсөн бушлай консультация үткәрәсәк. Көндөҙгө сәғәт 4-тән 6-ға тиклем Өфө ҡалаһының СССР-ҙың 50 йыллығы исемендәге урамындағы 48/1 йортта ҡабул итәләр.

✓Икенсе тулҡын менән БДИ тапшырыусылар өсөн һынауҙар дауам итә. Математика, география, инглиз һәм немец телдәре буйынса берҙәм дәүләт имтихандарын Башҡортостанда 830 кеше тапшырған. БР төбәк мәғлүмәт эшкәртеү үҙәге хәбәр итеүенсә, 750 кеше - математиканан имтихан тапшырһа, немец теленән имтиханға 6 кеше килгән. Инглиз теленән тесты 42 кеше үткән, географиянан - 32.

**✓ *БДИ тапшырыу буйынса Башҡортостан иң юғары күрһәткестәргә өлгәшә. Әммә белгестәр иҫәпләүенсә, имтихандарҙы уңышлы тапшырыу проценты был процестың бик үк ғәҙел үтмәүе менән бәйле.***



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕРҘӘМ ДӘҮЛӘТ ИМТИХАНЫ...

## һаман һорауҙар тыуҙыра

**Быйыл Башҡортостанда 209 сығарылыш уҡыусыһы өлгөргәнлек аттестаты алманы. БР Мәғариф министрлығының мәғариф сифатын һәм БДИ-ны баһалау бүлеге етәксеһе Зәки Мырҙағәлин белдереүенсә, был уҡыусылар рус теле йәки математиканан, йәки уларҙың икеһенән дә Берҙәм дәүләт имтиханы тапшыра алмаған.**

Былтырғы уҡыу йылында 225 бала аттестат алмаған, әммә ун беренсе синыфты тамамлаусылар һаны ла 500-гә күберәк булған. Быйылғы сығарылыш уҡыусылары араһында БДИ тапшырыу өсөн тәғәйенләнгән төп көндә түгел, ә резерв көндәрҙә тағы бер тапҡыр БДИ тапшырғас ҡына кәрәкле балл йыя алғандар күп. Мәҫәлән, 30 майҙа рус теленән имтихан тапшырған 27 448 кешенең 660-ы минималь балл йыйыуға өлгәшмәгән. Математика буйынса БДИ-ны 6 июндә 27 076 уҡыусы тапшырған, уларҙың 668-енең эше минималь балға тулмаған. Уларҙың араһынан резерв көндәрҙә лә рус теленән - 20, математиканан 46 бала кәрәкле балдарҙы йыя алмаған.

Былтырғы уҡыу йылы менән сағыштырғанда, БДИ буйынса уртаса балл быйыл бер аҙға юғарыраҡ. Рәсәй буйынса уртаса балдар әлегә билдәле түгел. БДИ-ның мотлаҡ фәндәрен тапшырыу буйынса үҫеште ҡараһаҡ, республикала йыл һайын рус теле һәм математиканы тапшыра алмаусылар һаны кәмей бара. Әгәр ҙә 2008 йылда рус телен 5417 сығарылыш уҡыусыһы тапшыра алмаһа, 2009 йылда был һан байтаҡҡа кәмегән - 1706, былтыр - 973, быйыл - 660. Математика буйынса БДИ-ла шундай уҡ хәл: 2008 йылда - 7604, 2009 йылда - 1254, 2010 йылда - 967, быйыл 668 уҡыусы.

Быны түбәндәгесә аңлаталар. 2008 йылда БДИ штат режимына индерелмәгән була һәм уны уҡыусылар тәжрибә рәүешендә генә тапшыра, шуға артыҡ тырышмай ҙа. 2009 йылда БДИ барыһы өсөн дә мотлаҡ була. Уҡыусылар БДИ һөҙөмтәләренең киләсәк тормошона йоғонтоһон аңлап, имтихандарҙы яҡшы һөҙөмтәләргә тапшыра. Етмәһә, уҡытыусылар уҡыусыларын маҡсатлы рәүештә БДИ-ға әҙерләй башлай. Шулай ҙа рус теленән - 660, математиканан 668 "икеле" республика өсөн бик күп иҫәпләнә.

**Әйткәндәй, Башҡортостанда мәктәптәрҙә сығарылыш имтихандары объектив баһаланһын өсөн БДИ үткәреүҙе тағы ла ҡатыраҡ контролгә алмаҡсылар. Был проблема Фән һәм белем биреүҙе тикшереү федераль идаралығы етәксеһе Любовь Глебованың Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашыуында тикшерелде. Любовь Глебова билдәләүенсә, БДИ тапшырыу буйынса Башҡортостан иң юғары күрһәткестәргә өлгәшә. Рәсәйҙең башҡа төбәктәре менән сағыштырғанда, 81-ҙән алып 96-ға тиклем балл йыйыусылар һаны ла республикала күберәк. Әммә белгестәр иҫәпләүенсә, имтихандарҙы уңышлы тапшырыу проценты был процестың бик үк ғәҙел үтмәүе менән бәйле. Ҡайһы бер сығарылыш уҡыусыһына уҡытыусыһы ярҙамға килә, кемгәлер - интернет. Шуға ла хәҙер республикала объектив баһалар өсөн көрәшергә кәрәк. Рөстәм Хәмитов БДИ буйынса юғары балдарҙың кадрҙарҙың ситкә китеүенә лә булышлыҡ итеүен билдәләне. Юғары балдар менән Мәскәү, Санкт-Петербург вуздарына уҡырға киткән абитуриенттар унан кире әйләнеп ҡайтмай. Республикаға яҡшы белгестәр кәрәклеген иҫәпкә алғанда, был Башҡортостан файҙаһына түгел.**

**"Башинформ" материалдарынан.**

АФАРИН!

**Күптән түгел Төркиәнең Истанбул ҡалаһының тарихи үҙәгендә, боронғо ҡаланың иң матур урындарының береһендә - бар донъяға билдәле Изге Софья ҡорамы менән Зәңгәр мәсет янындағы Мехмет Акиф Эрсой исемендәге паркта башҡорт һабантуйы булып үтте. Быйыл алтынсы тапҡыр уҙғарылған һабантуйҙа БР мәҙәниәт министрының беренсе урынбаҫары Камилә Дәүләтова етәкселегендәге делегация ҡатнашты. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов Төркиәлә уҙғарылған башҡорт һабантуйы тураһындағы тәьҫораттары менән уртаҡлашты:**

# БАШҠОРТ ҺАБАНТУЙЫ...

## Төркиәлә лә көтөп алынған байрам

-Төркиә ерендә уҙасаҡ башҡорт һабантуйына барыр алдынан бик тулҡынландыҡ, иңебеҙҙә сит илдә бөтөн республикабыҙҙы, милләтебеҙҙе лайыҡлы күрһәтергә тигән оло бурыс ятҡанын тоя инек. Иң тәүҙә "Топкапы" паркында төрки телле халыҡтарҙың музей комплексында булдыҡ һәм ундағы Башҡорт халҡының тарихы һәм этнографияһы йортонда республикабыҙға арналған күргәҙмәне яңыртыу тантанаһында ҡатнаштыҡ.

Төркиә халҡы Башҡортостан тураһында бик яҡшы белә. Башҡорт һабантуйы ла хәҙер улар өсөн көтөп алынған байрамдарҙың береһенә әйләнгән. Оло байрамда йыл һайын төрлө халыҡ-ара фольклор фестивалдәрендә ҡатнашып, сит илдәрҙә лә киң танылыу алған "Мираҫ" фольклор ансамбленең сығыш яһауы улар өсөн айырыуса ҡыуаныслы булды. Һабантуй юғары кимәлдә уҙҙы. Халҡыбыҙҙың милли уйындары, йолалары атҡарылған башҡорт һабантуйына 200 меңдән артыҡ тамашасы йыйылғайны. Төркиә халҡы шул тиклем дәртле, ҡыҙыҡһыныусан һәм ҡунаҡсыл. Уларҙың һәр береһе беҙҙең менән яҡындан танышырға тырыша, иҫтәлеккә фотоға төшөргә тәҡдим итә, үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы бирә. Уйындар уҙғарғанда ла бер кемде лә көсләп саҡырып торорға тура килмәне, майҙанға йә сәхнәгә үҙҙәре теләп сыға, рәхәтләнеп уйнай, күңел аса. Бер ҙә аптырап тормайынса, дәртле бейеү көйҙәренә "башҡортса" тыпырлатып, бейергә төшөп тә китәләр. Ҡурай моңона төрөктәр айырыуса ғашиҡ. "Башҡорт һабантуйы беҙгә бик оҡшай, бигерәк тә милли уйындарығыҙ күңелле һәм ҡыҙыҡ. Шулай уҡ йырҙарығыҙ, бейеүҙәрегеҙ ҙә үҙебеҙҙеке кеүек күңелгә яҡын", - тине улар байрам тураһында фекерҙәрен белдереп. Төркиәлә йәшәүсе яҡташтарыбыҙ был осрашыуға айырыуса шатланды һәм бөтә Башҡортостан халҡына сәләм күндерҙе...

Сынтимер Биктимер улы билдәләүенсә, һабантуйҙан һуң Башҡортостандың рәсми делегацияһы юлын артабан дауам иткән. 2 июлдән алып 10 июлгә тиклем "Мираҫ" фольклор ансамбле Анкара ҡалаһында уҙғарылған IV Халыҡ-ара фольклор фестивалендә ҡатнашҡан. Бөтәһе 16 илдән иң көслө фольклор ансамблдәре ҡатнашҡан был фестивалдә "Мираҫ" ансамбле төп майҙандарҙа сығыш яһаған, көнөнә ике тапҡыр концерт биргән. Ә һуңғы көндә ансамбль бөтә төрөк йондоҙҙары сығыш яһаған ҙур сәхнәгә сыҡҡан. Фестивалдә ҡатнашҡан бөтә ансамблдәр араһынан ошондай мөмкинлек беҙҙең артистарға ғына бирелгән. Әйткәндәй, былтыр ҙа "Мираҫ" ансамбле был сарала ҡатнашҡайны һәм Төркиәнең бер нисә ҡалаһында сығыш яһап, бар халыҡты таң ҡалдырғайны.

Фестиваль сиктәрендә Башҡортостан Республикаһы рәсми делегацияһы Анкара ҡалаһы мэры Мелих Гекчек һәм Кечиорен районы хакимиәте башлығы Мостафа Ак менән осрашыуҙар уҙғарған. Эшлекле һөйләшеү ваҡытында Өфө ҡала округының Совет районы хакимиәте менән Төркиә Республикаһы Анкара ҡалаһының Кечиорен районы хакимиәте араһында үҙ-ара хеҙмәттәшлек буйынса килешеүгә ҡул ҡуйылған.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**



## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Өфө территорияһында урынлашҡан ял итеү урындарының санитар-эпидемиологик хәүефһеҙлеге тураһында мәғлүмәт тыңланды. БР-ҙың Роспотребнадзор идаралығы белгестәре белдереүенсә, баш ҡала пляждары микробиологик күрһәткестәр буйынса нормаға тап килә, әммә ҡайһы бер урындарҙа сүп-сар сығарыу ваҡытында ойошторолмай. Ҡала һәм ауыл һыҙаттарында урынлашҡан йылға һәм күлдәр кешегә биологик, химик һәм физик зыян килтерергә тейеш түгел, шуға ла был объект етәкселәренә тирә-яҡты һаҡлауға, күмәк ял итеү урындарын яҡшыртыуға, һыуҙа кешеләрҙең хәүефһеҙлеген булдырыуға күберәк иғтибар бүлергә кәңәш ителде.

✓Баш ҡала территорияһында уйын бизнесына ҡаршы көрәшеү өсөн төрлө оператив-профилактик саралар үткәрелеп тора. 2011 йылдың 1 ғинуарына ҡалала ҡомарлы уйындар ойоштороу менән шөғөлләнеүсе 127 объект теркәлгән. Был объекттарҙың эшмәкәрлеген туҡтатыу буйынса саралар сиктәрендә Өфөнөң Эске эштәр идаралығы хеҙмәткәрҙәре 226 тикшереү үткәргән. Һөҙөмтәлә, 104 уйын клубы эшмәкәрлеген туҡтатҡан, 3 264 уйын ҡорамалы тартып алынған, 24 протокол төҙөлгән.

✓Өфөлә "Мәктәпкә йыйынырға ярҙам ит!" республика хәйриә акцияһы башланды. Сара ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға 2011-2012 уҡыу йылына әҙерләнергә ярҙам итеү маҡсаты менән уҙғарыла. Балалар өсөн канцелярия тауарҙары, яҙыу кәрәк-яраҡтары, дәфтәр-китаптар, мәктәп формаһы, портфелдәр ҡабул ителә. Ярҙам күрһәтергә теләүселәр 31 августа тиклем Ғафури урамы, 103, тел. 250-77-00, Судноларемонтлау урамы, 27, тел. 217-14-50 адрестары буйынса мөрәжәғәт итә ала.

✓Өфө ҡала округы хакимәтенең транспорт бүлегенән хәбәр итеүҙәренсә, 16 июлдән 18 июлгә тиклем Пушкин урамынан Зәки Вәлиди урамына тиклем һәм Зәки Вәлиди урамынан Туҡай урамына тиклемге юл участогы ябыласаҡ. Капиталь ремонт үткәрелеү сәбәпле, юлдың был өлөшөндә автотранспорт хәрәкәте 18 июлдең 6.00 сәғәтенә тиклем бөтөнләйгә туҡтатыласаҡ.

ҠУЛДАН КИЛӘ!

# БАШҠОРТОСТАНДЫҠЫМЫ?

## Тимәк, иң яҡшыһы!

**Үткән аҙна һуңында Хөкүмәт йортонда уҙған йылҡысылыҡ мәсьәләләре буйынса кәңәшмәлә республика Президенты Рөстәм Хәмитов, беҙгә әлләә нимәләр уйлап сығарырға түгел, ата-олатайҙарыбыҙ бына тигән әҙер милли бренд - йылҡысылыҡ һәм ҡымыҙ ҡалдырған, беҙгә бары тик уны артабан үҫтерергә генә кәрәк, тип белдерҙе. "Башҡортостандың бренды икән, тимәк, ул иң яҡшыһы булырға тейеш! Һәм был хәҡикәтте бөтөн донъя белә. Ҡайҙалыр күп сығымдар түгеп үҙҙәренә бренд булдырһалар, беҙгә артыҡ сығым да кәрәкмәй, беҙҙең борон-борондан килгән үҙ брендтарыбыҙ бар, улар беҙҙең дәғүәселек өҫтөнлөгөбөҙ булып тора һәм уларҙы юғалтырға ярамай", - тине ул.**

Кәңәшмәлә килтерелгән дәлилдәр буйынса, бөгөн Башҡортостан йылҡы һаны буйынса Рәсәйҙә Саха-Яҡут Республикаһынан ҡала икенсе урында торһа, йылҡы ите һәм ҡымыҙ етештереү буйынса беренселекте биләй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, магазин кәштәләрендә яңы ғына эшләнгән сифатлы ҡымыҙ ҙа, ат ите лә, ҡаҙылыҡ та даими ятмай, махсуслашҡан магазиндар тураһында һүҙ ҙә юҡ. Икенсе яҡтан, башҡорт аты сыҙам, әрһеҙ, продуктлы, йыл әйләнәһенә тибендә йөрөй - был да дәғүәселек майҙанында ыңғай баһалана. Ләкин бөгөн был тоҡом төрлө яҡтан килтерелгән аттар менән ҡатышып, үҙенсәлеген юғалта бара. Шуға ла тап тоҡомло башҡорт атын һаҡлап ҡалыу мөһим мәсьәләләрҙең береһе булып көн үҙәгендә тора. Бының өсөн тармаҡты үҫтереүгә системалы ҡараш һәм республикала йылҡысылыҡты үҫтереүҙең стратегияһын булдырырға кәрәк.

Әлеге ваҡытта республикала йылҡысылыҡ дүрт: ит һәм ҡымыҙ етештереү, спорт, ат туризмы һәм иппотерапия йүнәлеше буйынса үҫешә. Әгәр ҡымыҙ етештереү Урал аръяғы, Урал алды, төньяҡ төбәктә яйға һалынып, йылына 2,4 тонна ҡымыҙ бешелһә, бөтә төр хужалыҡтарҙа барлығы 33 мең баш ат иткә оҙатыла.

Ат туризмы буйынса эштәр аҡһай: ул ни бары Көньяҡ Уралдың таулы урындарында ғына киң таралған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, йыл һайын республиканан ғына түгел, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән туристар ағымы туҡтамай. Сөнки һыбай йөрөү ололарға ғына түгел, балаларға ла файҙалы. Бигерәк тә ул балалар церебраль фалижы диагнозы ҡуйылған балаларға, инсульт әҙемтәләрен үтеүселәргә, психоэмоциональ өлкәлә көсөргәнеш кисереүсе кешеләргә файҙалы. Әммә иппотерапия әлегә баш ҡалала һәм Мәләүеҙҙә генә ойошторолған.

Бынан тыш, спорт йылҡысылығы тәү ҡарашҡа үҫешкән һымаҡ күренһә лә, Рөстәм Хәмитов әйтеүенсә, ғәҙәти көндәрҙә "Акбуҙат" ипподромында ярыштар буш трибуналар алдында үтә - уларҙы ҡараусы ла, ҡыҙыҡһыныусы ла юҡ. Бынан тыш, халыкты һыбай йөрөргә өйрәтеү эше лә яйға һалынмаған.

Тоҡомсолоҡ эшенә килгәндә, был йәһәттән Урал аръяғы, Учалы, Ауырғазы һәм Өфө райондары ғына данды кәметмәй тотоп тора, әммә уларҙың эшен дә маҡтанырлыҡ тип булмай. Ғөмүмән, әҙер брендтарҙы һаҡлайбыҙ, артабан данын, ҡеүәтен күтәрәбеҙ, тиһәк, ең һыҙғанып эшләргә лә кәрәк әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Илшат Ситдиҡовтың уйынлы-ысынлы әйтеүенсә, "Башҡорт тоҡомло аттарҙы үрсетеү иҡтисади яҡтан отошло: уларҙы ашатмайбыҙ - улар ҡолонлай, ашарға бирмәйбеҙ - һөт бирәләр, ашатмайбыҙ - ит бирәләр". Ә ашатҡан, уларға етди иғтибар бүлгән саҡта нимә булыр ине икән?**

Зәйтүнә ХӘБИРОВА.



ҺОРАУ-ЯУАП

### ӘХЛӘҠИ ЗЫЯН ӨСӨН

**Әхләҡи зыян күргәнем өсөн түләтеү тураһында суд ҡарары бар. Уны алыу өсөн ҡайҙа һәм кемгә мөрәжәғәт итергә кәрәк?**

- Суд ҡарары закон көсөнә ингәндән һуң хөкөм бойороғо йәки башҡарыу ҡағыҙы яҙылып, бурыслынан түләтеү өсөн ул йәшәгән урындағы суд приставтары хеҙмәтенә ебәрелә. Тимәк, һеҙгә түләргә тейешле бурыслы кешенең йәшәгән урыны буйынса суд приставтарына мөрәжәғәт итегеҙ, үҙегеҙ менән паспорт һәм суд ҡарарын алырға онотмағыҙ.

### АВТОРЛЫҠ ХОҠУҒЫ

**Совет Армияны сафында хеҙмәт итеүем хаҡында 300 битлек ҡулъяҙма иҫтәлегем бар. Уны баҫмаға тәҡдим итер алдынан минең ризалыҡтан тыш уны файҙаланмаһындар өсөн миңә үҙемдең авторлыҡ хоҡуҡтарымды яҡлай белергә кәрәк, сөнки яҙмаларҙа минең шәхси тормошом хаҡында бәйән ителә.**

- Был мәсьәлә буйынса һеҙ Өфө ҡалаһының Киров һәм Ленин урамдары киҫешкән урындағы "Баштехинформ"дың Патент үҙәгенә мөрәжәғәт итә алаһығыҙ.

### УЛЫБЫҘ ӨСӨН ТҮЛӘРГӘМЕ?

**Улыбыҙ кредитка телефон алған, түләп бөтөрмәгән. Хәҙер коллектор бурысты беҙҙән түләтергә итә. Улыбыҙ беҙҙең фатирҙа теркәлһә лә, айырым йәшәй, әле СИЗО-ла ултыра. Беҙ уның өсөн түләргә тейешме?**

- Улығыҙ түләп бөтөрмәгән кредитты һеҙ түләргә бурыслы түгел, был бәхәсһеҙ. Уға кредит бирелгән икән, тимәк, ул бәлиғ йәшендә булған һәм түләп бөтөү-бөтмәү өсөн яуаплылыҡ та фәҡәт уның елкәһендә. Ләкин, әгәр ҙә банк улығыҙҙы судҡа биреп, кредиттың ҡалған өлөшөн түләүҙе талап итһә, суд приставтарының өйөгөҙгә килеүенә әҙер булығыҙ: улар улығыҙҙың шәхси милкен эҙләйәсәк (уны һатып, бурыс түләтеләсәк). Приставтар өсөн йортоғоҙҙағы бөтә милек үҙегеҙҙеке икәнлеген иҫбатлаусы документтарҙы алдан әҙерләп ҡуйыуығыҙ хәйерле булыр. Йәғни, һатып алынған әйберҙәр һеҙҙең аҡсаға алынғанлыҡты иҫбатларға кәрәк - бәлки, чек ҡағыҙҙары, башҡа документтар һаҡланғандыр. Улығыҙҙың һеҙҙең менән йәшәмәүен әйтергә онотмағыҙ. Шуны ла белеп ҡуйығыҙ: улығыҙҙың үҙ аҡсаһына һатып алынған милке йә булмаһа уға бүләк итеп бирелгән һәм фәҡәт уның милке итеп яҙылған мөлкәт кенә тартып алыныра мөмкин, башҡа әйберҙәргә тейергә бер кемдең дә хоҡуғы юҡ. Бынан тыш, суд приставтарынан тыш, банк хеҙмәткәрҙәренең кеше милкен барлап, тикшереп йөрөргә шулай уҡ хоҡуғы юҡ.

### ХЕҘМӘТЛӘНДЕРГӘН ӨСӨН

**Минең фатирҙа домофон ҡуйылмаған, шулай булһа ла мин подъезд ишеге өсөн тәүҙә айына 15, ә хәҙер 25 һум аҡса түләйем. Домофон булмағас, мин түләргә тейешме һуң?**

- Домофон бәйләнеше булған подъезд ишеге өсөн һеҙ ҙә түләргә тейешһегеҙ, был фатирҙа домофон булыу-булмауға бәйле түгел, ә подъезд ишегенә ҡуйылған кодлы йоҙаҡты хеҙмәтләндереү өсөн түләнә. Абонент түләүҙәр, иҫәп-хисап һәм түләнгән аҡсаның нисек тотонолоуы хаҡындағы мәғлүмәттәр менән ошо түләүҙәрҙе ҡабул итеүсе ойошмала танышырға мөмкин.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

### Шыршы



Шыршы энәләре шлактан яҡшы таҙарта. Дауа өсөн Яңы йыл байрамына ҡуйған шыршығыҙҙы киптереп алырға ғәҙәтләнергә кәрәк. 2-3 ҡалаҡ ваҡланған ылыҫты ярты литр ҡайнар һыуға һалып, 10 минут бешерегеҙ, 12 сәғәт йылы урында төнәтегеҙ. Һөҙөп, термосҡа ҡойоғоҙ һәм көнө буйы сәй урынына эсегеҙ. Был төнәтмә организмды, бигерәк тә эсәктәрҙе шлактан таҙарта. Кесе яраy үтә күренмәле булғансы, дауаны дауам итегеҙ.

### Һары һыу киҙеүе

Был сир табанға һыу үтеүҙән була. Быны булдырмау өсөн: ❖ лимонлы сәйҙе ҡурай еләге ҡайнатмаһы менән йышыраҡ эсергә; ❖ ваҡ ҡырғыстан үткәрелгән һарымһаҡҡа бал ҡушып, ятыр алдынан 1-2 балғалаҡ ҡабып, йылы һыу эсергә; ❖ ваҡлап туралған һарымһаҡты тоҡсайға һалып, карауат башына элеп ҡуйһың.

### Алма япрағы

Атеросклероз һәм остеопороздан тигеҙ күләмдә алынған сейә, һырғанаҡ, гөлйемеш, алмағас япраҡтарын сәй кеүек бешереп эсәһең; ❖ алманың япрағы һәм сәскәһе таждарынан сәй яһап эсһәң, йүтәлдә йомшарта; Тамаҡ ауыртыуынан 1 ҡалаҡ киптерелгән алма япрағын 0,5 литр ҡайнар һыуҙа төнәтеп эсергә.

### Тамырҙарҙы таҙартыу

❖ 200 гр миләш ҡайырыһын 500 мл ҡайнар һыуҙа 2 сәғәт һүрән генә ҡайнатырға, һөҙөргә. Ашар алдынан 25-әр тамсы эсергә.

❖ Атеросклероздан ҡотолоу өсөн 1 ҡалаҡ гөлйемеште 2 стакан ҡайнар һыуға һалып, эмаль һауытта 10 минут ҡайнатырға, 12 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә, бер аҙ шәкәр ҡушырға һәм көнөнә 3 мәртәбә ашар алдынан яртышар стакан эсергә.

### Йәрәхәтте дауалау

Тәндең бәрелгән һәм тәҙәлмәҫ йәрәхәттәренә яңы һуйылған һарыҡ тиреһен ябыу бик файҙалы.

### Йөкөһөҙлөк

Кагорға (0,5 мл) 50 гр укроп орлоғон һалып, һүрән утта 2-3 минут ҡайнатып алаһың. Йоҡлар алдынан 50-60 мл эсәһең.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ ***Урыҫ хөкүмәте Тәтегәскә мырҙалыҡ исемен рәсми нығытҡан. Билдәле булыуынса, Тәтегәскә төрлө исем-дәрәжәләр тәтей: башҡорттар өсөн ул бей икән, нуғайҙар өсөн ул мырҙа, урыҫтар өсөн тархан да.***

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*



# БАШҠОРТ БЕЙҘӘРЕ ҺӘМ ӘМИРҘӘРЕ

Башҡорт халҡының хаким заттар иерархияһы, йәғни ил-йорт башлыҡтары баҫҡыстары, шуларға бәйле исем-шәрифтәре шаҡтай бай һәм төрлө-төрлө. Бына шуның боронғо, урта һәм яңы быуаттар тарихында киң билдәлеләре: хан, бей, бәк, әмир, кенәз, мырҙа, тархан, батыр, солтан, кантон, абыҙ, старшина һ. б. Боронғо ил-дәүләт башлыҡтары башҡорт хандарынан ҡала башҡорт бейҙәре һәм әмирҙәре хаҡында бер аҙ мәғлүмәт биреп үтәйек.

Бей йәки бәк - төрки халыҡтары тарихында хандан ҡала ил-йорт хакимы йәки биләмәләре башлығы титулы исеме, ҙур түрә дәрәжәһе. Боронғо төрки сығанаҡтар бей-бәкте ил башлығы, олуғ түрә тип аңлата. Хәҙерге "Башҡорт теленең һүҙлеге" бейгә "баш кеше, башлыҡ, түрә, ырыуҙың затлы кешеһе" мәғәнәләрен бирә. Йәғни был исем-шәрифтең мәғәнәһе хәҙер күпкә тарая төшкән.

Башҡорт шәжәрәләрендә ил-йортҡа баш олуғбейҙәр йыш ҡына телгә алына. Мәҫәлән, юрматы шәжәрәһендә Ғәли шәйех Дәрүиш, Сәсле Дәрүиш олуғ бейҙәр. Меңләләр шәжәрәһендә Мең Һаҙаҡлы Ураҙас бей, Ҡара-ҡыпсаҡ шәжәрәһендәге Лас бей һ.б. Бындай олуғ бейҙәр хан дәрәжәһендәге исем һәм вазифаға эйә булған. Мең Һаҙаҡлы Ураҙас бейҙе Һанаҡлы хан тип атау үҙе үк шуны раҫлай. Ҡыпсаҡ хан нәҫел-тоҡомонан килгән Лас бейҙе шәжәрә "үҙ илендә бадишаһлыҡ ҡылып торҙо", тип яҙа. Болғар осорондағы башҡорт бейҙәрен халыҡ хан урынына күргән.

Башҡорт тарихи яҙмаларында бей исем-титулы XIII быуаттарҙан йыш күренә. Башҡортостанда бейлек дәүере, күрәһең, татар-монгол яулап алыуҙарынан һуң Дәште-Ҡыпсаҡ, Болғар, Башҡорт иле, Рәсәй кенәзлектәре ҡыйратылып, аҙаҡ Алтын Урҙа дәүләте нығынғас, бойондороҡло илдәрҙә олуғ ханға бойһонған, бейҙәр, бәктәр, әмирҙәр хакимиәте булдырылған замандарҙа яңы рәсми төҫ һәм дәрәжә билдәһен алған буғай. Урыҫ кенәзлектәре, ҡыпсаҡ, болғар, төмән, башҡорт бейҙәре тарихы шул хаҡта һөйләй.

"Сыңғыҙнамә" тәуарих дастанында яҙылғанса, башҡорт ырыу башлыҡтары Уйшын Майҡы бей, Ҡалдар бей, Тамъян бей, Мөйтән бей, Ҡатай бей, Юрматы бей һ. б. Сыңғыҙҙы хан итеп күтәрәләр, хан уларға тамға, ағас, ҡош, оран, һауыт билдәләрен, ер-һыу биләмәләрен, бейлек дәрәжәләрен рәсми рәүештә беркетә. Ә был традиция, йәғни дәрәжәләр, исемдәр, ил-йорт атрибуттарын йәки тәғәйенләү башҡорттарҙа һәм бүтән төрки халыҡтарында бик борондан, легендар Уғыҙ хан замандарынан уҡ килгән була.

Табын ырыуы шәжәрәләрендә Майҡы бей исеме һәм эштәре йыш телгә алына. Майҡы бей - тарихи шәхес. XIII быуаттың баштарында йәшәгән, Сыңғыҙ хандың замандашы һәм яуҙашы булған зат. XIII-XIV быуаттар араһында ғүмер һөргән фарсы тарихсыһы Рәшитетдиндең "Жәмиғ әт-тәуарих" ("Тарихтар йыйынтығы") китабында Майҡы бей уйшын ырыуынан сыҡҡан, Сыңғыҙ хандың Жуси олосонда хан ғәскәренең уң ҡанатында әмир (ғәскәр башлығы) булған, тип яҙыла. Тимәк, уның Уйшын тигән ҡушма исеме ырыу этнонимынан килә.

"Ҡара-Табын аймағы Майҡы бейҙән таралмыштыр. Майҡы бей Сыңғыҙ хан дәүерендә Урал тауының Миәдәк тигән урынында булып, Миәс йылғаһы буйында мәҡәм иткән; ул Сыңғыҙ ханға бүләк алып барып, уның менән юлдаш булып, Сыңғыҙ хан менән арбаға ултырып йөрөгән, аты Уйшын Майҡы бей тигәндәр". ("Башкирские шежере". Уфа, 1960).

"Кесе Табын халҡының нәсәбнамәһе"ндә шулай яҙылған: "...Майҡы Сыңғыҙ хандың ҙур бейҙәренең береһе була. Сыңғыҙ хандан ҡағиҙә өсөн тамға, ағас, ҡош, оран һәм һауыт алмыш. Тамғабыҙ - ҡабырға, һепертке миҫалы, ағасыбыҙ - ҡарағас, ҡошобоҙ - ҡарағош, оранnetwork - салауат, һауытыбыҙ - сәйгәр. Был Майҡы Сыңғыҙҙы ханлыҡҡа күтәрергә сәбәпсе булған. Ҡағиҙәле бей- Майҡы бей тиҙәр".

Үҫәргән ырыуы шәжәрәһендә ырыу башлығы Мөйтән бейҙең исеме шиғри юлдарға һалынып данлана:

*Хаҡ Тәғәлә ҡөҙрәте,*
*Мәҙкүр итәйем аны,*
*Илебеҙҙә булған эш -*
*Сыңғыҙ хандың заманы,*
*Башҡорттарҙың бабаһы,*
*Бай Туҡ-саба балаһы,*
*Мөйтән тибеҙ беҙ аны...*
*Арғымаҡтан ат алды,*
*Бар дөйәгә йөк артып,*
*Хан Сыңғыҙға ул барҙы.*
*Ханға бүләк һыйланы,*
*Хандың күңелен ауланы.*
*Маҡтау күрҙе ханынан,*
*Урын алды янынан.*
*Түрәләрҙән, бейҙәрҙән -*
*Мәҙех алды барынан.*

Хәҙер архивтарҙа һаҡланған яҙмалар, айырым фрагменттар буйынса, борондан Мөйтән бей хаҡында эпик ҡобайырҙар булғанлығы асыҡланды, һәм шул яҙмалар нигеҙендә ошо юлдар авторы "Мөйтән бей" ҡобайырының фәнни принципта йыйылма тексын төҙөнө. Бейҙәргә заманында махсус йырҙар, ҡобайырҙар бағышланған икән, тимәк, улар үҙ осоронда олуғ заттар, ил-йортто тотор ил азаматтары булған.

Юғарылағы шиғри шәжәрәлә бейлек, ер-һыу, оло биләмәләр ҡорап алған Мөйтән бейҙе "алп йөрәкле", "халыҡ эсендә ғиззәтле" аҫыл зат итеп маҡтай шиғри шәжәрә. Үҙ ил-йортонда хан дәрәжәһен тотҡан башҡорт бейҙәре династияһы Болғар, Алтын Урҙа дәүерҙәренән XVI быуат уртаһына тиклем 500 - 600 йылдар буйы йәшәп килә. Мәҫәлән, Табын ырыуы шәжәрәһендә Майҡы бейҙән һуң килгән утыҙ быуын бейҙәр династияһы исемләп бирелә: "Ҡара-Табындың олуғ бабаһы - Майҡы бей, Майҡы бейҙең әүүәл олуғ уғлы Сура бей, уның уғл Сөмбай бей, уның уғлы Йоламбай бей, уның уғлы Утарсы бей, уның уғлы Аҡтере бей, уның уғлы Аҡбүре бей, уның уғлы Сура бей, уның уғлы Туғыҙбай бей, уның уғлы Ҡушымбал бей, уның уғлы Сәйед бей, уның уғлы Ҡыҙылғөҙрәт бей, уның уғлы Дәрүиш бей, уның уғлы Биктимер бей, уның уғлы Сарат бей, уның уғлы Тәҡәй бей, уның уғлы Аҙнағол бей, уның уғлы Татлыбай бей, уның уғлы Дәрүиш бей, унан Баязит бей, уның уғлы Һаҡғол бей, уның уғлы Мәмәт бей, уның уғлы Һарбай бей, уның уғлы Иҫәнбәт бей, уның уғлы Тәнәкәй бей, уның уғлы Аҡынсаҡ тархан..."

"Тәуарихи башҡорт" тарихи яҙмаһында Үҫәргән ырыуының урта быуаттарға ҡараған бейҙәр быуындарынан ҡайныларының ҡайһы заманда йәшәгәнлеге һәм бейлек иткәнлеге аңлатмалары менән теркәлгән: "Бүҙкә бин Шаҡмаҡлы, Түкән хан заманында бей булып хөкүмәт ҡылалыр ине - Йәрүкә. Туғрыл хан заманында бәк булып хөкүмәт итер ине - Манғыт. Үзбәк хан заманында бей ине һәм тәғрифендә булып, халыҡтарға хөкүмәт итер ине - Урал бин Манғот. Урал тотҡан Урал бей Йәнбәк хан заманында бей булып, хөкүмәт итер ине - Инсан бей бин Урал. Нар муйында Бирҙебәк заманында бей булып хөкүмәт ҡылыр ине - Бүйәт бей. Түлкә Хужа хан заманында бей ине - Әрбан бей. Әрбан Туҡтамыш хан заманында бей булып хөкүмәт ҡылды һәм ғәҙел булынып, ерендә олуғ сурабан бей булды тимештәр - Тумбай бей. Бураҡ заманында бей ине - Тимер Ҡарабуға. Хан Күсем заманында бей ине - Һарыш бей. Ҡасим хан заманында бей ине. Унан Тура хан заманында бей булып хөкүмәт ҡылды - Һарыбаш мырҙа - Сурабан бей. Был Сурабан башҡорт халҡы Иван Василичкә барып баш һалғанда инабат өсөн мәҙкүр ханға аманат биреләдегенән ҡәҙин Ҡазан шәһәрендә хан хозурында бер нисә йыл торғандан ҡәҙин вафат итмеш. Һәм Сурабан терек заманда шәһәри Ҡаҙандан татар халҡынан ҡатын алмыштыр. Күгәрсен тигән ыруғтан Каю Сурабандың нишаны Күгәрсен тип мәшҡүрҙер. Һарыш бейҙән килгән икенсе тармағы Аҡмасуҡ - Туҡмасуҡ быуындары аша атаҡлы Тәтегәс бейгә килеп тоташа".

Әлеге тарихи ҡомартҡыла Ябынсы (йәки Япансы) яһауылдан таралған бейлек тармағы бар йәнә. Күсем хан заманында яһауыл булып хеҙмәт иткән Ябынсы бейҙән таралған быуындар иғтибарҙы нығыраҡ биләй. Ҡаҙаҡсал бәк хаҡында "башҡорт халҡының бәге булып тора. Хан уғлы Бирҙебәккә сәрдәр солтанат тәслим итеп халә ҡылмыштыр" тип яҙылған. Йәғни Ҡаҙаҡсал бәк Бирҙебәк солтанды, булаһы ханды үлемдән һаҡлап ҡала.

Ябынсы яһауылдың икенсе улы Үҫәргәндән үҫәргән ырыуының бер тармағы китә. Уның ул-ейәндәренән улы Байғужа, уның улы Ҡаҙаҡбай, уның улы Ҡараяу бейҙәр нәҫел-нәсәп бейлек хоҡуғына эйә.

Башҡорт бейҙәре тарихының бер династияһы манғыт бейҙәре менән тығыҙ берлектә. Мәҫәлән, "манғыттарҙан Нуретдин бей (Нурадин), атаһы Манғыт Әбүкә бей (ул Туҡтамыш хандың нәҫеле) менән Илек йылғаһында булған ҙур һуғышта еңелгәндән һуң, диуан башлығы Ҡатай Ғәли бей менән бергә Башҡортостанға килә, ошонда йәшәп вафат була. Диуан бейе бөйөк вәзир тигән дәрәжәлә. Нуретдиндең бөйөк диуан бейе Ҡатай ырыуы әширәтенән. Был ҡәбилә Башҡортостандың хәҙерге Тамъян-Ҡатай кантонында ла, Арғаяш кантонында ла мөһим әширәт иҫәбендә". (Ә. Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы.)

Тарихтан билдәле булыуынса, Нуретдин бей - башҡорттарҙа ул Мораҙым исеме менән йөрөтөлә - Иҙеүкәй әмирҙең улы. Башҡорттар был аҫыл заттарҙы үҙ улдары, үҙ батырҙары итеп таный. "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосы уларға бағышланған бөйөк ҡомартҡы.

Иҙеүкәй Туҡтамыш хандың әмире, ғәскәр башлығы тип иҫәпләнһә лә, аҙаҡ Туҡтамыш хан Тимерлан тарафынан ҡыйратылғас, Алтын Урҙаның асылда олуғ ханы дәрәжәһендә йөрөй.

Манғыт-нуғай бейҙәрен ғәҙәттә мырҙалар тип йөрөтәләр. Башҡортостан ерендә хакимлыҡ иткән Муса, Шихмамай, Исмәғил, Йософ, Урус мырҙалар шундайҙар.

Нуғайҙар дәүерендә башҡорттарҙың күренекле ҡайһы бер бейҙәрен мырҙалар тип атау ғәҙәте лә булған. Мырҙалар кенәздәргә лә тиңләнгән. Мәҫәлән, Тәтегәс бей нуғайҙар заманында Тәтегәс мырҙа исемендә йөрөгән. Урыҫ хөкүмәте Тәтегәскә мырҙалыҡ исемен рәсми нығытҡан. Билдәле булыуынса, Тәтегәскә төрлө исем-дәрәжәләр тәтей: башҡорттар өсөн ул бей икән, нуғайҙар өсөн ул мырҙа, урыҫтар өсөн тархан да.

Алтын Урҙа һәм нуғайҙар дәүерендә, башҡорт шәжәрәләренән күренеүенсә, табын, ҡыпсаҡ, юрматы, бөрйән, мең, үҫәргән һ. б. эре ырыу бейҙәре иң юғары дәрәжәләргә һәм хоҡуҡтарға эйә. Улар, Ә. Вәлиди Туған билдәләгәнсә, халыҡ хакимдары һәм олос башлыҡтары. Хандар кеүек, бейҙәр хакимлығы ла нәҫелдән нәҫелгә күсә барған. Тимәк, улар аҡһөйәктәр әширәтенә инә.

Үҙ заманында Урал бей, Майҡы бей, Мөйтән бей, Тамъян бей кеүек шәхестәр бик шөһрәтле һәм ҡеүәтле ил азаматтары булған булһа кәрәк, сәсәндәр улар хаҡында данлап ҡобайырҙар, йырҙар сығарған, ҙур эпик әҫәрҙәр ижад иткән. Бәғзе бер яҙма сығанаҡтар, фольклор әҫәрҙәре шул хаҡта һөйләй. Быларҙан "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Күҫәк бей", "Мөйтән бей", "Тамъян бей" риүәйәттәре, ҡобайырҙары, "Үҫәргән шиғри шәжәрәһе" беҙҙең көндәргәсә килеп етә алған.

Әлбиттә, башҡорт бейҙәренең дә төрлөһө булғандыр. Күптәнге быуаттарҙа, ҡобайыр әйткәнсә, "ил тигәндең кеме юҡ, кеме юҡ та ние юҡ; ханы ла бар был илдең, даны ла бар был илдең, "бир"ҙән бүтәнде белмәгән бейе лә бар был илдең".

*✓ Аҙаҡ билдәле булды: төҙөлөшкә эләккәндәре өсөн шатланып, күп өмөттәр бағлап, көстәрен йәлләмәйенсә ең һыҙғанып эшләгән егеттәребеҙ аҙаҡ бер тин аҡса ла ала алманы, алдандылар булып сыҡты.*

Бығаса бигүк иғтибар ителмәгән йәки кире яҡтан ғына нарыҡлап киленгән башҡорт йәмғиәтендәге бейлек институтын, уның тарихын һәм атаҡлы шәхестәрен яңы күҙлектән ентекле өйрәнеү һәм баһа биреү бурысы тора әле ғалимдарыбыҙ алдында.

Хан һәм бейҙәр замандарында башҡорттар араһынан байтаҡ ҡына әмирҙәр һәм батырҙар тарих майҙанына сыға. Яу яландарында тиңһеҙ ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, ил күләмендә дан алған атаҡлы батырҙар хаҡында шулай уҡ ҡобайырҙар, йырҙар сығарыла.

Ҙур ғәскәр башлығы йәки хөкүмәттә оло түрә булып шөһрәт ҡаҙанған башҡорт әмирҙәренең атаҡлылары төрки һәм шәреҡ донъяһында киң билдәле була.

XV быуатта Шәйбәни хандар замանында Жығыз һәм Жал баһадир исемле башҡорт әмирҙәре олуғ бейҙәр дәрәжәһендә йөрөй. Иранда XIII быуатта илһаниҙар аҡһөйәктәре ҡатарында башҡорт әмирҙәре дан яулағаны тарихта киң мәғлүм. Шуларҙан береһе Башҡорт баһадир Ғазан хан дәүерендә бөйөк әмир титулын йөрөткән. Олжайту хан заманында Сыраҡан Башҡорт исемле башҡорт сарҙары олуғ заттарҙан һаналған. (Ә. Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы.)

Яҙмыш елдәре ташлап алыҫ мәмләкәттәргә, сит-ят ерҙәргә барып сығырға мәжбүр булған башҡорттар араһынан ситтә атаҡлы әмир йә дәүләт эшмәкәре, ғалим йә шағир булып шөһрәт тапҡандары бар. Шундайҙарҙан XIII-XIV быуаттарҙа Мысырҙа (Египетта) һәм Сирияла мәмлүктәр сифатында бөйөк әмир йә күренекле ғилем һәм әҙәбиәт әһеле булып танылған Насретдин әл-Насыри әл-Башҡорди, Сәнжәр әл-Руҡи әл-Башҡорди, Ғәләүетдин Башҡорт әл-Насыри, Ғилметдин әл-Башҡорди Беркөн, Сарын әл-дин әл-Башҡорди кеүек аҫыл заттар мосолман тарихында урын "алған". "Башҡорт Насретдин әл-Насыри, - тип яҙа тарихсы Морат Рәмзи "Тәл-фик әл-әхбар..." китабында, - үҙенең сығышы яғынан ан-Наср ибне әл-Ғәзиз мәмлүктәренән. Хеҙмәте буйынса юғары үрләп власҡа ирешкән, аҡыллы һәм юғары дәрәжәле әмирҙәрҙән булған. Ул үҙе хаҡында: "Ғәрәп телен камил рәүештә белеү өсөн мин егерме йыл буйы төркисә һөйләшмәнем", - тип әйткән имеш, тиҙәр. Үҙ заманында ғәрәп тарихсылары һәм әҙәбиәтселәре Насретдин әл-Насыриҙың ғилми һәм әҙәби эшмәкәрлегенә юғары баһа биргәндәр. Мысырҙағы ҡыпсаҡтарҙан йәнә бер ғәрәп ғалимы Ғәләйетдин ибне Ғатауллаһы (1343 йылды вафат). "Ул - төрки шағирҙарының иң бөйөктәренән береһе. Ҡыпсаҡ ҡәбиләһендәге ирҙәрҙән ялҡынлы шиғырҙар ижад итеүҙә уның менән сағыштырырлыҡ бүтән кешене белмәйем", - тигән.

Урта быуаттарҙа сит илдәргә китеп йәшәргә мәжбүр булған, ситтә бөйөк әмир йәки атаҡлы ғалим, шағир булып танылған башҡорт тоҡомдаштарының эшмәкәрлеген асырға, ғәрәп телендә яҙылған ғилми хеҙмәттәрен һәм шиғырҙарын табып туған телебеҙгә әйләндереп баҫтырырға, рухи мираҫыбыҙға ҡайтарырға бурыслыбыҙ.

Боронғо һәм урта быуаттарҙағы атаҡлы башҡорт бейҙәре һәм әмирҙәре тормошон һәм эшмәкәрлеген өйрәнеү беҙгә тарихҡа ҡарашыбыҙҙы киңәйтергә һәм данлыҡлы шәхестәребеҙҙе тейешенсә баһаларға ярҙам итер ине.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,**
**филология фәндәре докторы, профессор.**

**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*



# СЕБЕР КИТӘ ЕГЕТТӘР...

## аҡса артынан

Нововоронеж ҡалаһының ситендә атом электр станцияһы төҙөлөшөндә эшләй Азат. Ере ҡыҙыл балсыҡ, ҡом, бер туҡтауһыҙ һалҡын ел иҫә. Ҡайҙа ҡарама - емереклелек, янған урмандар. Ундай күренеш сит өлкәләргә килеп ингәс тә башланды. "Үҙебеҙҙең Башҡортостаныбыҙ гөл баҡсаһы икән", тип уйлағайны Азат юлда килгәндә автобус тәҙрәһенән шундай күренештәрҙе күҙәтә-күҙәтә. Әле бына арып-талып эштән ҡайтып бара. Иртәнге 8-ҙән киске 9-ға тиклем эшләп, еп өҙөрлөк тә хәл ҡалмай. Эш ауыр, ялға ла туҡтатмайҙар. Саҡ ҡына ял итәйем тиһәң, килеп, фотоға төшөрөп китәләр, сәғәт һайын һанайҙар, фамилия менән тикшереп торалар. Бындай саралар эш хаҡын кәметеү, эш сәғәттәрен киҫеү өсөн сәбәп эҙләп үткәрелә. Эш хаҡын кешенекенән кәм булмаһын тиһәң, түҙәһең инде. Күңелде йылытҡан бер генә әйбер бар: ул да булһа, күберәк аҡса эшләп, тиҙерәк тыуған яҡҡа ҡайтыу. Уның пландары күп: айына 40 меңдән түләһәләр ҙә ике айға 80 мең аҡса аласаҡ. Иҫке булһа ла машина алып ебәрер, бурыстарын түләр, әсәһенә ярҙам итер... Ошоларҙы уйлаһа, кеше түҙә алмаҫлыҡ эш шарттарына күнергә тура килә.

Илгизде лә бында нужа килтерҙе. Ауылдарында өй һала башлағайны, бурысҡа инергә тура килде. Төрлө эштә эшләп ҡараны, алған кредиттарын түләрлек аҡса эшләй алманы. АЭС төҙөргә эшселәр йыялар, тигәс, хөкүмәт алдамаҫ, аҡсаһын бирер, тип, бәләкәй балалары менән ҡатынын ҡалдырып, ситкә китергә мәжбүр булды. Эйе, мәжбүр булды. Сөнки банктан алған кредит, ямғырҙан һуң үҫкән бәшмәктәрҙән дә шәберәк үҫкәнен күптәребеҙ үҙ елкәһендә татығаны бар. Кредитҡа -процент, процентҡа процент өҫтәлә тора. Төп бурыс һис кәмемәй. Шулай барһа, төҙөгән өйөндә һатып та бурыстан сыға алмаясаҡһың. Ҡайҙа ҡарама - тупик. Тиҙерәк эшләп, ҡулға аҡса алһаң, был этләнеүҙәр онотолор ине инде. Ни хәл итәһең, кешесә йәшәрлек, балаларҙы ҡарарлыҡ аҡсаны башҡаса ҡайҙа эшләйһең? Бына шундай өмөттәр алып килде инде уны сит яҡтарға.

Марселдең дә ғаиләһе бар. Йәш ғаиләгә йәшәргә урын кәрәк. Аталы балаларға донъя көтөүе еңелерәк тә ул, ә уға үҙенә көсәнергә тура килә. Бында эләгеп китеүенә бик шат. Эш эҙләгән кеше күп, документтарҙы ҡат-ҡат тикшереп, белешмәләр йыйып күп йөрөттөләр. Алла бирһә, аҡса эшләп ҡайтһа, йәшәргә торлаҡ тураһында ҡайғырта башлар. Ғүмер буйы бәләкәй генә фатирҙа әсәләре менән йәшәмәҫтәр бит. Бәлки, машина ла алып ебәрер. Пландар күп, уларҙы тормошҡа ашырыр өсөн аҡса кәрәк. Шуға күрә бындағы шарттарға түҙергә тырыша инде. Улар барыһы 52 эшсе килде Башҡортостандан. Өйөн, яҡындарын ҡалдырып ситкә килгән һәр береһенең үҙ планы, киләсәккә өмөтө бар.

Әммә был төҙөлөштә шарттар үтә насар булып сыҡты. Машиналар иҫке, ватыла, кирбестәрҙе ҡул менән күтәреп өҫкә ташыйҙар. Күрше төҙөлөштә машиналар ярҙамында башҡарылған эштәрҙе улар ҡул көсө менән башҡара. Унда техникаһы ла күпкә яңы, заманса. Тик ул төҙөлөшкә эшкә күсергә бер кемгә лә рөхсәт итмәйҙәр. Бында ике ай эшләмәйенсә, документтарҙы бирмәйҙәр, килешеү шундай. Килеү менән әллә нисә килешеүгә ҡултамға ҡуйҙы, тик ундағы шарттар эшселәр файҙаһына түгел. "Ҡултамға ҡуймаһағыҙ - ана бара юлығыҙ! Һеҙҙән башҡа ла килеүселәр етерлек", - тиҙәр. Яңыраҡ ҡына Украинанан килгән бер эшсе төҙөлөштән осоп төшөп һәләк булды. Шундай ваҡиға, барыһына ла ауыр булды, тик эште туҡтаттырманылар, "Тиҙ ярҙам" менән милициялар килгәнсе ятты шунда. Кешенең ҡәҙере юҡ шул. Уның биленә бәйләгән ҡайышы иҫке булған, өҙөлгән. "Ҡайышын ныҡлап бәйләмәгән, һаҡланыу техникаһын үҙе боҙған", - тинеләр ҙә ҡуйҙылар һуңынан.

Егеттәр насарҙы уйламаҫҡа тырыша. Бөтөн уйҙары - күп кенә аҡса эшләп, тыуған яҡтарға ҡайтып, ҡорған пландарын тормошҡа ашырыу тураһында ғына. Ошо уйҙар уларға көс бирә.

Бына ике ай ваҡыт үтеп китте, ҡайтырға ваҡыт етте. Егеттәргә аҡсаны ҡайтҡас, идаралыҡ аша алырһығыҙ, тип вәғәҙә иткәйнеләр баштан уҡ. Ярай, йыйылып ятыр, тигән булдылар. Тәүге айҙа 6-7 мең аванс бирҙеләр. Икенсе айына аҡса һорап барғайнылар, почта аша һалабыҙ, тинеләр. Аҙаҡ билдәле булды: төҙөлөшкә эләккәндәре өсөн шатланып, күп өмөттәр бағлап, көстәрен йәлләмәйенсә ең һыҙғанып эшләгән егеттәребеҙ аҙаҡ бер тин аҡса ла ала алманы, алдандылар булып сыҡты.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай ваҡиғалар бер генә түгел шул. Күпме егеттәр эш эҙләп Себер яҡтарына юллана. Эш тапҡандары ла аҡсаларын тулыһынса ала алмай. Алғандары шунда юғалып та ҡуя. Беҙҙең ауылдан берәүҙәр Себергә сығып китеп юғалған улдарын үлгән, күмеп ҡуйылған ерҙән барып таптылар. Яңыраҡ ҡына мин белгән бер егетте Себерҙән эштән ҡайтып килгәндә тимер юлы буйында үле килеш таптылар. Уны кемдәрҙер поездан ташлаған. Уның ағаһын да Себерҙә үлтереп, күмеп ҡуйған булғандар. Һанай китһәң: иҫ китерлек.

Һәр кешене кешесә йәшәү өмөтө йөрөтә. Тыуған ерҙәрендә эш таба алмағанлыҡтан, аптырап ситкә китергә мәжбүр була егеттәр. Егеттәр генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа Мәскәүгә, Себергә, Санкт-Петербургҡа, хатта сит илдәргә китергә мәжбүр булалар. Күпселек ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ Италияға китә эш артынан. Уларҙы бурыстарын түләрлек аҡса эшләү, кредиттарын ябыу теләге йәшәгән ерҙәренән, яҡындарынан, балаларынан, ата-әсәләренән, хатта ирҙәренән айыра. Бер танышымдың ҡыҙы үҙенең әхирәте менән дүртенсе йыл инде пенсионер әбейҙәрҙе ҡарап, ата-әсәһенә кредиттарын ябырға ярҙам итә. Тыуған яғын һағынмай тиһеңме ни улар! Тик тыуған яҡ үгәй әсәй кеүек: эш юҡ, аҡса юҡ. Бөтә кеше эшҡыуар булып бөтә алмай ҙа инде. Заводтарҙа сменалы эштә лә ундай аҡса эшләп булмай, түләүҙәрҙе түләһәң, алған аҡсаның яртыһы бөтә. Заводтарҙа эшләп, ҡулға 8-9 мең аҡса алып, балалар ҡарап буламы? Кешесә йәшәп буламы? Ҡыҙыҡ: Италияла пенсионер әбейҙәр күпме пенсия ала икән? Ялсы тотоп, ялсылары улар биргән аҡсаға ата-әсәһенә, балаларына ярҙам итә алғас. Баш етмәй.

**Рәйлә НАЗАРҒОЛОВА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡыҙҙарыбыҙ, улдарыбыҙҙың Себер, Италия тарафтарына эш эҙләп юлланыуы ғәҙәти хәлгә әүерелде. Илдең бер бәләһе итеп тә ҡабул ителә инде был хәл. Ә шулай ҙа Себергә, Италияға китмәйенсә лә эшһеҙлек мәсьәләһен хәл итә алмайбыҙмы икән? Юҡ, тиһегеҙме? Ә ниңә башҡалар, сит тарафтарҙан килгәндәр беҙҙең төбәккә килеп, ошо уҡ мәсьәләне хәл итә һуң? Умырып-умырып аҡса ла эшләйҙәр хатта. Бында сәбәп беҙҙең үҙебеҙҙә лә түгелме? Уйланайыҡ әле, йәмәғәт.**

✓ *"Хәйерселек булған ерҙә иман булмай" тиҙәр. Ни өсөн тигәндә, йәшәү өсөн иң кәрәклеһе булған икмәк менән дә тәьмин ителмәгән кешенән әхлаҡи ҡанундарҙың үтәлешен талап итеү үҙе үк әхлаҡһыҙлыҡ.*



**Һуңғы ваҡытта үҙәк телеканалдар аша барған тапшырыуҙарҙа йыш ҡына балаларға ҡарата ауыр енәйәт эше ҡылыусы педофилдар, уларға ҡарата ҡулланылған хөкөм яҙалары тураһында ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәр булып тора. Шул тапшырыуҙарҙа поптан башҡа барлыҡ ҡатнашыусылар ҙа бындай енәйәтселәргә ҡарата үлем яҙаһы ҡулланыуҙы иң дөрөҫ юл тип күрә. Улар хаҡлы, ысынлап та, балаларҙы көсләүселәргә, үлтереүселәргә ҡарата башҡа төрлө яҙаның булыуы ла мөмкин түгелдер. Шул уҡ ваҡытта үлем мәсьәләһенә философик күҙлектән ҡараһаҡ, уны тормош ауырлыҡтарынан, ғүмер михнәттәренән кешене ҡотҡарыусы сара ғына икәнлеге лә аңлашыла. Был осраҡта үлем енәйәтсегә закон тарафынан бирелгән "бүләк" тә. Һәр хәлдә, ғүмерлеккә иркенән мәхрүм ителеүселәрҙең закон сығарыусыларҙан үлем яҙаһын ҡануниәткә ҡайтарыуҙы талап итеүе күп нәмә хаҡында уйланырға мәжбүр итә.**
**Башҡортостан Республикаһы Адвокаттар коллегияһының Өфө махсуслаштырылған филиалы адвокаты Нәҙим Нәжип улы ХӘМИТОВ менән әңгәмәбеҙ нәҡ ошо үлем яҙаһы проблемаһы тураһында һөйләшеүҙән башланды.**

## Үлем яҙаһы

Дини күҙлектән ҡарағанда, ғүмерҙе кешегә Аллаһы Тәғәлә бирә һәм тик ул ғына кире алыу хоҡуғына эйә. Юрист булараҡ, мин үлем яҙаһы яуыз енәйәт ҡылыусыға берҙән-бер дөрөҫ яза була алалыр, тип уйламайым. Ысынлап та, үлем яҙаһына дусар ителеүсе донъякәметә тигән ҡарар сығарһа һәм ошо юл менән тағы ла бик күптәрҙең ғүмере һаҡланып ҡалһа, был осраҡта ысул маҡсатты аҡлай, тип уйлайым.

Ысынлап та, хәҙерге ваҡытта үлем яҙаһын законға ҡайтарыуҙы иң беренсе нәүбәттә ғүмерлеккә иркенән мәхрүм ителеүселәр үтенеп һорай. Улар закондан үҙҙәренә үлем хәле кешене ошо юлға барырға мәжбүр итә. Кемдер берәүҙең һарығын, атын урлай, кемдер берәүҙең баҡсына төшөп, вареньеһын сәлдереп эләгә һ.б. Уларҙың урлағаны күренә, ә ил халҡының тиҫтә йылдар буйына үҙ хеҙмәте менән туплаған байлығын олигархтарҙың ҡулына төшөүе, ниңәлер, хосусилаштырыунан ойошторола, әммә балаларҙың ҙур өлөшө һаман да урамда.

Мин бәләкәй саҡта ауылыбыҙ өйҙәре тыштан бикләнмәй торғайны. Беҙ ул саҡта урлашыуҙың ни икәнен дә белмәнек. Хәҙер иһә, ауылдарға ла урлашыуға бәйле енәйәт инә башланы.

## "Ғәйепле кеше"комплексы

Бигерәк тә совет осоронда формалашҡан кешеләрҙә бар был комплекс. Әйтәйек, һеҙ машинала руль артында китеп бараһығыҙ ҙа, юл хәрәкәте инспекторы туҡтатты икән ти. Шул саҡта машина йөрөтөүсе юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙмаһа ла, нимә өсөндөр үҙен ғәйепле тойоп, аҡлана, өтәләнә башлай. "Ғәйепле кеше" комплексы миндә лә бар. Беҙ, ысынлап та, бер ниндәй ғәйебебеҙ булмаһа ла, үҙебеҙҙе ны. Йәғни ил граждаы ул саҡта үҙен закон тарафынан яҡлаулы һәм һаҡлаулы тоя ине. Хәҙер иһә закондар, уларҙың нормативтары бер туҡтауһыҙ үҙгәрә, хатта ул үҙгәрештәрҙе өйрәнеп тә өлгөрмәйһең. Был, бер яҡтан, яҡшы, сөнки ошо юл менән закондар яйлап камиллаша бара, икенсе яҡтан, насар: кеше көндән-көн закондың үҙен яҡлай һәм һаҡлай алыуына ышанысын юғалта бара. Европала, Америкала закон алдында барыһы ла бер тигеҙ. Уларҙа тәртип боҙған министрҙарға ла бығау кейҙереп, бүлексәгә алып китәләр. Беҙҙә иһә, тәртип һаҡлау органдары ла, граждандар ҙа үҙҙәренең хоҡуҡтарын белеп бөтмәй һәм шул арҡала күп кенә закон боҙоуҙарға юл ҡуйыла. Беҙҙә ҡануниәтте һаҡлау йәһәтенән алға китеш бар, әммә үҙгәреш тиҙ генә көтөлмәйәсәк. Бының өсөн кеше психологияһянан үҙ үлеме мөҙҙәтенән күпкә алдараҡ китә һәм был юл менән үҙенең енәйәте өсөн яҙаһын еңел генә алған, ҡотолған һымаҡ. Был осраҡта иң ҙур ауырлыҡ енәйәттән һәләк булған кешенең туғандарына төшә һәм улар был ауырлыҡты ғүмер буйына күтәреүгә дусар, йәғни иң ҙур яза уларҙың иңенә төшкән һымаҡ. Ә бит мөнәсәбәт тап киреһенсә булырға тейеш.

# ДӨЙӘ УРЛАУСЫЛАР

Әммә бында мәсьәләнең тағы ла һис бер көтөлмәгән яғы бар. Кеше үлтергән өсөн ғүмерлеккә төрмәгә хөкөм ителгән кешене аҫырау ҙа шул уҡ ил граждандарының һәм енәйәттән зыян күргән кешеләрҙең елкәһенә төшә. Тап уларҙың түләгән һалым иҫәбенә көн күрә ғүмерлеккә төрмәгә ябылыусы енәйәтсе. Тағы ла ғәҙеллек принцибы һаҡланмаған кеүек килеп сыға бында. Нисек инде, ҡыҙын көсләп үлтергән енәйәтсене атай-әсәй үҙ иҫәбенә аҫырарға тейеш һуң? Был хаҡта иҫкә алыу ҙа ҡыйын хатта. Беҙҙең закон тап шулай ҡуша. Минеңсә, бындай осраҡта төрмәгә ғүмерлеккә эләгеүсенең зыян күреүселәргә һалым льготаһы мәсьәләһе ҡаралырға тейештер. Ул сағында бер аҙ ғәҙел булыр ине.

Ә инде үлем яҙаһын ҡулланыуҙы законға индереү мәсьәләһенә килгәндә, уны барлыҡ граждандар, шул иҫәптән дин әһелдәре ҡарары нигеҙендә индереү кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта илдең ниндәйҙер халыҡ-ара ойошмаға, донъя баҙары мөхитенә эләгеү маҡсаты ғына үлем яҙаһын законға индереү-индермәү мәсьәләһенә йоғонто яһарға тейеш түгелдер. Әгәр ҙә йәмғиәт үлем яҙаһын законға индереү кешелеккә ҡарата енәйәтселектекөсәй, йәғни төрмә ғазаптарынан ошо юл менән ҡотолорға итә. Тимәк, үлем яҙаһын закондан алыу барыбер ҙә дөрөҫ булған. Үкенес, уларҙың рәшәткә артындағы тормошона, ғүмер ахырында үҙҙәрен нисек тотоуына беҙ бер нисек тә шаһит була алмайбыҙ. Минеңсә, уларҙың тәрән үкенесле тәүбә һүҙҙәрен ваҡытлы матбуғат, радио һәм телевидение аша кешеләргә даими рәүештә еткереп барырға кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта бер аяғы менән енәйәт юлында торған ауыр холоҡло үҫмерҙәрҙе тәрбиә колониялары буйлап экскурсияға йөрөткәндә лә тәьҫирле булыр ине. Тәрбиәнең ғибрәт формаһы бик һөҙөмтәле.

тип атала. Ике осраҡта ла урылыҡ күҙәтелә.

"Хәйерселек булған ерҙә иман булмай" тиҙәр. Ни өсөн тигәндә, йәшәү өсөн иң кәрәклеһе булған икмәк менән дә тәьмин ителмәгән кешенән әхлаҡи ҡанундарҙың үтәлешен талап итеү үҙе үк әхлаҡһыҙлыҡ. Шуға күрә беҙгә закондарҙы ҡәтғиләштереү алдынан, бәлки, иң тәүҙә граждандарҙың социаль яҡланғанлығы мәсьәләһен күтәрергә кәрәктер. Адвокат булараҡ, енәйәт эштәрен ҡарағанда яуаплылыҡ алдына баҫыусыларҙың барыһы ла тиерлек бер ерҙә лә эшләмәгән булып сыға. Әлбиттә, енәйәтте булдырмауҙа тәрбиә лә мөһим роль уйнай.

## Энә урлаусылар -

ғәйепле тоя башлайбыҙ. Ниммәләр. Ниңәлер. Был тойғо беҙгә совет осоронда һуғылған мөһөр. Үткән быуаттың 90-сы йылдарынан һуң тыуған йәштәрҙә был тойғо бөтөнләй юҡ. Улар, беҙҙән айырмалы рәүештә, төрлө яҡлы күп мәғлүмәткә эйә һәм һәр ваҡыт үҙҙәренең мәнфәғәтен яҡлай белә. Уларға ниндәйҙер дәғүә белдереп, һүҙ әйтергә лә өлгөрмәйһең, үҙҙәренең яуабын дөпдөрөҫ итеп ҡайтарып, артабан ауыҙыңды асмаҫлыҡ итәләр. Минең эш практикамдан сығып ҡарағанда ла, беҙгә ярҙам һорап хәҙерге йәштәр түгел, совет осоронoң "ғәйепле кеше" комплексы булған ҡырҡ йәштән олораҡтар килә. Минеңсә, был комплекс совет осоронда граждандарҙы асылда тыйыуға, ҡурҡытыуға бәйле режим емешелер. Әгәр ҙә кеше үҙенең мәнфәғәтен яҡлай белһә, чиновниктар, хоҡуҡ һаҡлау органдары кешенең юридик наҙанлығынан файҙаланмаҫ ине.

Совет осоронда закондар үҙ дәүеренә күрә камиллашҡайын үҙгәртергә кәрәк. Баяғы "ғәйепле кеше" комплексы булмаған йәштәр үҫеп етеп, ике-өс быуын алмашынғас ҡына мөмкиндер ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр.

## Ришүәт

Беҙҙең илдә ришүәт кешене тыуғандан алып үлгәнгәсә оҙатып бара. Улай ғына ла түгел, кешенең яҡшы шарттарҙа донъяға килеүе лә (ғәжәп, донъяға тыуыр өсөн дә түләргә кәрәк икән!), ғүмер ахырында элиталы зыяратҡа күмелеүе лә ришүәт ярҙамында тормошҡа ашырыла. Балалар баҡсаһына, элиталы мәктәпкә, юғары уҡыу йортона, юғары хеҙмәт хаҡлы эшкә урынлашыу өсөн дә ришүәт кәрәк. Былар барыһы ла кешенең күҙ алдында башҡарыла һәм яйлап-яйлап ришүәт алыу һәм биреү йәшәү нормаһына әүерелә бара. Ришүәттең тамыры тәрбиәгә лә, закондарҙың камил булмауына ла берҙәй үк барып тоташа, әммә уның төп сәбәбе барыбер ҙә иҡтисадҡа бәйле. Табибтарҙың, тәрбиәселәрҙең, уҡытыусыларҙың һәм башҡа һөнәр кешеләренең үҙҙәрен тәьмин итерлек эш хаҡы булһа, ришүәт кәмер ине. Ришүәткә кешене күп осраҡта мохтажлыҡ этәрә. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, дәүләт түләп еткермәгәнде кеше үҙе сараһын табып ала. Ала, сөнки уға ла йәшәргә, балаларын кеше итергә кәрәк. Бында осона сығып етмәҫлек ҡулса барлыҡҡа килә. Сит илдәрҙә лә ришүәт биреү бар, әммә һирәк. Унда кеше үҙенең эш урынын юғалтыуҙан ҡурҡа. Әгәр ҙә хеҙмәткәр ришүәт алып йә биреп

***Беҙҙең илдә ришүәт кешене тыуғандан алып үлгәнгәсә оҙатып бара. Улай ғына ла түгел, кешенең яҡшы шарттарҙа донъяға килеүе лә (ғәжәп, донъяға тыуыр өсөн дә түләргә кәрәк икән!), ғүмер ахырында элиталы зыяратҡа күмелеүе лә ришүәт ярҙамында тормошҡа ашырыла. Балалар баҡсаһына, элиталы мәктәпкә, юғары уҡыу йортона, юғары хеҙмәт хаҡлы эшкә урынлашыу өсөн дә ришүәт кәрәк. Былар барыһы ла кешенең күҙ алдында башҡарыла һәм яйлап-яйлап ришүәт алыу һәм биреү йәшәү нормаһына әүерелә бара. Ришүәттең тамыры тәрбиәгә лә, закондарҙың камил булмауына ла берҙәй үк барып тоташа, әммә уның төп сәбәбе барыбер ҙә иҡтисадҡа бәйле. Табибтарҙың, тәрбиәселәрҙең, уҡытыусыларҙың һәм башҡа һөнәр кешеләренең үҙҙәрен тәьмин итерлек эш хаҡы булһа, ришүәт кәмер ине.***

## Хәйерселек булған ерҙә...

Элегерәк енәйәтселектең ҙур бер сәбәбе итеп тәрбиә мәсьәләһен килтерәләр ине. Ысынлап та, совет осоронoң тәрбиә мәктәбе күп йәһәттән кешене енәйәтселек донъяһынан аралай, һаҡлай ине. Хәҙерге ваҡытта иһә енәйәтселектең характеры үҙгәрҙе: күп кеше эш, аҡса юҡлыҡтан енәйәт юлына баҫа, икенсе төрлө әйткәндә, илебеҙҙең иҡтисади

най. Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, хәҙер беҙҙең илдә урам ҡыҙырыусы ҡараусыһыҙ ҡалған балалар һаны 1917 йылдағынан да күберәк. Беҙ бөгөн хоҡуҡи дәүләт төҙөйбөҙ, тигән булабыҙ, әммә социаль етем балаларҙың үтә лә күп булыуы хафаға һала. Ул балалар урамда йөрөп үҫеп еткәс, илебеҙ менән нимә буласаҡ? Бына шул турала уйланырға кәрәк беҙгә тәүҙә. Әлбиттә, һуңғы йылдарҙа балаларҙы ғаиләгә тәрбиәгә алыу дәүләт тарафы-

***✓ Беҙҙең милләт араһында енәйәт күбеһенсә көнкүреш ерлегендә, уйламай эш итеүгә, ҡыҙып китеп эш боҙоуға йә эскелеккә бәйле яһала. Алдан ҡоролған мәкергә, яһиллыҡҡа бәйле енәйәт эштәре бик һирәк осрай.***

тотолһа, уға ҙур күләмдәге штраф һалына, ул ғүмеренең аҙағынаса әлеге һөнәре буйынса эшләүҙән мәхрүм ителә.

Ришүәтте закондарҙы ҡәтғиләштереү юлы менән генә еңеп булмаясаҡ, иң тәүҙә иҡтисадты күтәреп, тәүгеләрҙән булып уҡытыусылар менән табибтарҙың эш хаҡын арттырыу зарур. Илебеҙҙә иң аҙ эш хаҡы менән иң күп эш хаҡы араһында һандарға күҙ һалғанда, аптырауҙан ҡолап китерлек айырма күҙәтелә. 1 миллион һум менән 15 меңде сағыштырырлыҡ та түгел. Шул уҡ ваҡытта 15 мең айлыҡ эш хаҡы алып эшләүсе кеше илебеҙ өсөн күберәк файҙа килтерә. Мәсьәләнең асылы бына ҡайҙа ята.

### Адвокат яҡлаусы ғына түгел

Закон буйынса енәйәттән зыян күреүсе кеше лә, енәйәтсенең аҡсаһына адвокат яллай ҙа, аҙаҡ енәйәт ҡылыусынан ул аҡсаны алырға хоҡуҡлы. Әгәр ҙә енәйәтсенең бер нәмәһе лә булмаһа, ул аҡсаны ҡайтарып бирә алмай. Бында беренсе сиратта енәйәттән зыян күреүсе үҙе йә уның туғаны тән йәрәхәте ала, икенсе сиратта адвокат өсөн түләргә мәжбүр. Ошо күҙлектән ҡарағанда, нисектер, енәйәтсенең хоҡуҡтары закон тарафынан нығыраҡ яҡланған һымаҡ килеп сыға. Әммә шул уҡ ваҡытта дәүләт енәйәтсегә адвокат өсөн түләп, уға законлы рәүештә ғәҙел хөкөм язаһы сығарыуға өлгәшә һәм бынан, әлбиттә, иң беренсе нәүбәттә енәйәттән зыян күреүсе мәнфәғәте күҙәтелә.

Ҡайһы саҡ тәфтишселәр төрлө ысулдар ҡулланып, кешегә ҡылмаған енәйәтте танытырға мәжбүр итә. Бер районда ике банка варенье урлаусыны йыл ярымға төрмәгә ултыртып ҡуйғандар. Шул уҡ ваҡытта миллионлап дәүләт йә шәхси милекте урлаусыларға яза шартлы ғына бирелә. Миңә ҡатынын балта менән сабып үлтергән ирҙең эшен алып барырға тура килде. Дәлилдәр йыйып, шул хаҡта белдем: ҡатын һуңғы ваҡытта ныҡ эсеп, уңлы-һуллы йөрөй башлаған булған. Пенсияға сыҡҡас, ҡатын ире колхоздан алып ҡайтҡан ондарҙы, башҡа төрлө аҙыҡ-түлекте һатып эсергә керешкән. Бер әйткән ире уға, ике әйткән, ҡатыны туҡтамаған. Шунан ҡыҙған ваҡытта балта алып ҡатынын үлтергән. Ҡатындың туғандары барыһы ла ирҙе яҡланы. Мин психологик экспертиза үткәреүҙе һораным. Экспертиза енәйәттең аффект хәлендә ҡылынғанын раҫланы. Бының менән нимә әйтергә теләйем: закон һағында тороусылар кеше яҙмышына бөтөн яҡлап ҡарарға бурыслы. Суд, прокуратура, адвокатура кешегә яза биреү өсөн генә барлыҡҡа килмәгән.

Енәйәттән зыян күреүселәрҙең кисерештәренән дә азат була алмай адвокат. Ҡайһы ваҡыт граждандыҡ эштәре буйынса йөрөгәндә бер яҡтың вәкиле булып судтарҙа йыш ҡатнашырға, ғаиләләр тарҡалған осраҡта ышаныс ҡағыҙы буйынса ир йә ҡатын урынына айырылышыусы кеше булып йөрөргә тура килә. Мөлкәт бүлешәһең, аңлашылмаусанлыҡ килеп сыҡһа, бәхәскә инергә лә тура килә. Ғаиләләр тарҡалһа, бер яҡта тороп ҡалған балалар өсөн көйөнәһең, ул балалар үҙ балаларыңдай яҡын булып китә. Һуңғы ваҡытта граждандыҡ эштәре араһында атайлыҡты билдәләү процедураһы йыш осрай башланы. Ғаиләлә бала тыуа, ниндәйҙер һүҙ сығып, атай кеше икеләнә башлай ҙа, экспертиза үткәрергә судҡа мөрәжәғәт итә. Был күренеште лә иҡтисадҡа, эшһеҙлеккә бәйләп аңлатырға булалыр. Сөнки айырылған саҡта күберәк балалар әсә яғында ҡала. Атай кешегә алимент түләргә кәрәк, ә ул бер ерҙә лә эшләмәгәс, алимент түләй алмай һәм ошо юлға бара.

### Милли һыҙат

Енәйәттең милләте булмай, әммә уның милли һыҙаты була. Мин башҡорт кешеһе булғас, тәҡдимдәр буйынса бөтөн республиканан күберәк башҡорттар юридик ярҙам һорап килә. Беҙҙең милләт араһында енәйәт күбеһенсә көнкүреш ерлегендә, уйламай эш итеүгә, ҡыҙып китеп эш боҙоуға йә эскелеккә бәйле яһала. Алдан ҡоролған мәкергә, яһиллыҡҡа бәйле енәйәт эштәре бик һирәк осрай. Иғтибарға лайыҡ булмаҫлыҡ әһәмиәткә эйә булған эштәрҙе туҡтатыу тураһында статьяға ярашлы, ҡайһы бер ундай эштәрҙе туҡтатырға ла тура килә. Әйтәйек, берәү эсеп алып күршеһенең һарығын урлап тотола. Иртәгеһенә урлаусы кеше бер һарыҡ урынына үҙенең биш һарығын ҡайтарып бирергә, ғәфү үтенергә лә әҙер, әммә урлау факты барыбер теркәлә.

Беҙҙең милләттәге енәйәттең иң күбе эскелеккә бәйле. Ғөмүмән, эскелек беҙҙең милләтте енәйәткә яҡынайтыусы төп фактор. Минең күҙәтеүҙәрем буйынса, беҙҙең милләт кешеләре яһаған енәйәт эштәренең 90 проценты спиртлы эсемлектәр ҡулланыуға бәйле. Башҡорт халҡы эскелеккә үткән быуаттың икенсе яртыһында ғына ылыға башланы, әммә, Аллаға шөкөр, эскелек беҙҙең йолаға әүерелмәне һәм һуңғы ваҡытта күптәр был зыянлы ғәҙәттән ҡотола, йәштәребеҙ араһында бөтөнләй эсмәүселәр ҙә күп. Хәҙер айыҡ туйҙар үтә, тотош ауылдар эскелектән баш тарта.

Миңә ике дәүләт телендә үткән судтарҙа ла ҡатнашырға тура килә. Закон буйынса, әгәр ҙә кеше үҙенең фекерҙәрен башҡа телдә дөрөҫ итеп аңлата алмай икән, был осраҡта ул судтың икенсе дәүләт телендә алып барылыуын талап итә ала. Бындай осраҡтарҙа суд эшенә тәржемәселәр йәлеп ителә.

# МАЙҘА ЙӨҘӘ,

## төрмәлә...



се лә адвокат яҡлауына мохтаж. Беҙҙең ойошма законға ярашлы коммерциялы булмаған ойошма тип атала. Беҙ дәүләт органы ла, шәхси предприятие ла түгел. Әгәр ҙә беҙ дәүләт органы йә шәхси ойошма булһаҡ, беҙҙең өҫтә бер кеше торорға тейеш булып сыға. Ул сағында ул кешенең шәхси мәнфәғәте законды боҙоуға юл ҡуйыуы ла бар. Беҙгә өҫтән бер кем дә күрһәтмә бирә алмай. Беҙ, асылда, граждандарға юридик ярҙам күрһәтеү менән шөғөлләнәбеҙ. Беҙгә килеүселәр араһында ришүәт биреү юлы менән үҙ мәсьәләһен хәл итергә теләүселәр ҙә юҡ түгел. Беҙ уларҙы иң тәүҙә иғтибар менән тыңлайбыҙ һәм уларға был юлдың законлы түгел икәнен аңлатып, мәсьәләне хәл итеүҙең законлы юлын өйрәтәбеҙ. Беҙҙә барған асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәр һәр ваҡыт үҙебеҙҙә ҡала һәм суд кимәлендә дәлил була алмай. Христиандар сиркәүгә тәүбә итеүгә килгән һымаҡ килә беҙгә клиенттар.

Енәйәт ҡылған кешегә адвокат яҡлауы ни өсөн кәрәк һуң? Уға закон буйынса дөрөҫ һәм тейешле яза бирелергә тейеш. Юғиһә, ҡайһы саҡ енәйәтсенең законды белмәүе арҡаһында хатта энә урлаған кешене лә дөйә урлауҙа ғәйепләүҙәре бар.

Ҡайһы бер парадокс булырлыҡ күренештәр ҙә бар адвокатура эшендә. Енәйәт-процессуаль кодексының 51-се статьяһы буйынса матди яҡтан мохтаж булған енәйәтсегә дәүләт адвокат тәғәйенләй һәм адвокатҡа эше өсөн түләй. Ә инде енәйәттән зыян күреүсе

***Беҙҙең милләттәге енәйәттең иң күбе эскелеккә бәйле. Ғөмүмән, эскелек беҙҙең милләтте енәйәткә яҡынайтыусы төп фактор. Минең күҙәтеүҙәрем буйынса, беҙҙең милләт кешеләре яһаған енәйәт эштәренең 90 проценты спиртлы эсемлектәр ҡулланыуға бәйле. Башҡорт халҡы эскелеккә үткән быуаттың икенсе яртыһында ғына ылыға башланы, әммә, Аллаға шөкөр, эскелек беҙҙең йолаға әүерелмәне һәм һуңғы ваҡытта күптәр был зыянлы ғәҙәттән ҡотола, йәштәребеҙ араһында бөтөнләй эсмәүселәр ҙә күп. Хәҙер айыҡ туйҙар үтә, тотош ауылдар эскелектән баш тарта.***

### Суицид, милиция, полиция...

Суицид иң беренсе нәүбәттә Аллаһы Тәғәлә алдында оло енәйәткә, гонаһҡа тиң. Икенсенән, ул туғандарың, яҡындарың, милләтең алдындағы хыянат. Әгәр ҙә кеше аңлы рәүештә туғандарын, яҡындарын, милләттәштәрен үҙенән мәхрүм итә икән, был күренеште башҡа төрлө итеп атау мөмкин дә түгелдер. Бер районда бер егетте әйбер урлауҙа ғәйепләп, милиция хеҙмәткәрҙәре ныҡ ҡына итеп туҡмаған. Ул урамға сығырға ла, хатта хәжәтен үтәргә лә яңғыҙ барыуҙан ҡурҡыу хәленә ҡалған. Рухын һындырғандар уның. Егет шулай йөрөп-йөрөп, аҫылынып үлеп ҡуйған. Суд булды, ғәйеплеләр үҙ язаһын алды, әммә егетте ҡайтарыу мөмкин түгел.

Үкенескә ҡаршы, милицияға ла осраҡлы кешеләр күп барып эләгә. Бер малайҙы һәр ваҡыт әсәһе етәкләп йөрөгән, ул буйға үҫеп еткәс тә был хәл дауам иткән. Шунан был егет ҡайҙа эшкә урынлашҡан тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, милицияға. Ни өсөн тигәндә, егет ғүмере буйы әсәһе менән етәкләшеп йөрөй алмай бит инде. Шул әсәһенең етәкләгән ҡулы урынына милиция формаһын кейгән ул. Ни тиһәң дә, форма һаҡлай бит инде уны һәм был егет үҙенең ҡурҡаҡлығын ошо форма артына ышыҡлап йөрөйәсәк. Уның милицяға эшкә барыуы ла тап ошо маҡсатта булғас, ниндәй тәртип һаҡсыһы сығыуын үҙегеҙ самалап ҡарағыҙ инде. Бер лаҡап: милицияға эшкә урынлашыусы егеттән: "Милициянан эштән ҡыуһалар, ҡайҙа бараһың?" - тип һорайҙар икән. "Охранаға барам", - тип әйтә икән теге. "Ә охрананан эштән ҡыуһалар, ҡайҙа бараһың?" тип тағы ла һорайҙар икән, теге: "Ҡайҙа барһам да, барыбер эшләмәйәсәкмен",- тип яуап биргән. Әле милицияны полицияға үҙгәртәләр. Әлбиттә, полицияға эшкә урынлашыу анһат булмаясаҡ. Шулай ҙа яңы система ҡапыл ғына эшләп киткәнсе, йәғни психология үҙгәргәнсе, тағы ла ваҡыт кәрәк буласаҡ. Полицияны граждандар хөрмәт итергә лә, унан ҡурҡырға ла тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ауылдаштар "көтөүсе шағир" тип атап йөрөткән һүҙ оҫтаһы Шәфҡәт Әбйәлиловтың шундай шиғыр юлдары бар:**

*Замананың был хәленә баҡһам,*
*Ғәрлегемдән башым әйләнә:*
*Дөйә урлаусылар майҙа йөҙә,*
*Энә урлаусылар - төрмәлә...*

**Бик тапҡыр әйткән Шәфҡәт, сәптең тап унлығына тейҙергән. Ысынлап та, ниндәй генә аҡыллы закондар ҡабул ителмәһен, уларҙың алдында, вазифаһына, байлығына ҡарамайса, һәр кем тигеҙ яуаплылыҡ тойһа, бындай хәлдәр булмаҫ ине. Адвокат Нәҙим Нәжип улының юғарыла килтергән һәр бер дәлиле ошо хәҡиҡәтте раҫлай.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

✓ *Ҡабул ителеренә шик юҡ өс доғаның: Атаһының балаһына доға ҡылғанын, Мосафирҙың алыҫ юлда доға ҡылғанын, Рәнйетелгән кешеләрҙең доға ҡылғанын.*



КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

**256**

Ҡыҙ һайлаһаң, әсәһен күр,
Ҡүҙең төшһә насар ҡыҙға,
Әсәһе бик яҡшы икән,
Өйлән ҡыҙға, оҙаҡ һуҙма.

Күҙең төшһә яҡшы ҡыҙға,
Тик әсәһе булһа насар,
Алма ҡыҙҙы, ул барыбер
Әсәһенең юлына баҫыр.

**257**

Әгәр берәү һүҙ һөйләүҙе
Итә икән үҙ ғәмәле,
Ебәрмәҫ ул һүҙ ҡәҙерен,
Һөйләр белеп урынын, мәлен.

**258**

Эш башына ул ҡуйылды,
Эш хаҡтары бик мул булды.
Ә ул өҫтәп ниҙер ала,
Үҙенә үҙе быҒау һала.

**259**

Йортондағы изге Ҡөрьән
Күңелеңдә лә нурлаһын.
Мәсетең күркәм булғанда
Рухың емерек булмаһын.

**260**

Саҙаҡалыр һәр изгелек,
Ил тип йәшә һин иң элек.
Яман эш эшләүҙән һаҡлан,
Үҙ-үҙеңә шул саҙаҡаң.

**261**

Намыҫ ҡушҡан бар эштәрҙе эшләр өсөн
Етерлектер Аллаһ һиңә биргән көсөң.
Аллаһ үҙе мөһөрләгән бар сифатты,
Хуп күрмәгән тик ялған һәм хыянатты.

**262**

Кешеләрҙе арбап алһын малың түгел,
Көләс йөҙөң, күркәм холҡоң, ихлас күңелең.

**263**

Йомартлыҡ ул ожмах ағасылыр,
Ботаҡтары ергә һалынып тора.
Ошо ботаҡтарға кем тотона,
Шуны илтә йәннәткә туп-тура.

Һаранлыҡ ул тамуҡ ағасылыр,
Ботаҡтары ергә һалынып тора.
Ошо ботаҡтарға кем тотона,
Шуны илтә йәһәннәмгә тура.

**264**

Һәр халыҡты өс бәләгә дусар иткән:
Яман уйға, шомланыуға, көнсөләккә.
Сығыр юл бар, ҡулығыҙҙы ҡаушырмағыҙ,
Яман уйҙы һис тормошҡа ашырмағыҙ.
Көнләшһәгеҙ, ҡайнатмағыҙ ҡанығыҙҙы,
Шомланһағыҙ, ҡыуалағыҙ шомоғоҙҙо.

**265**

Ҡабул ителеренә шик юҡ өс доғаның:
Атаһының балаһына доға ҡылғанын,
Мосафирҙың алыҫ юлда доға ҡылғанын,
Рәнйетелгән кешеләрҙең доға ҡылғанын.

**266**

Гонаһы юҡ өс ялғандың:
Дошманды һуғышта алда,
Яу ялғанға ҡоролған да,
Яҙыҡ булмаҫ, ҡатыныңды
Һинән ризамын тип алда.

Ике кешенең араһын
Төҙәткәндә, көйләгәндә,
Һүҙең булыр изгелекле,
Хатта ялған һөйләгәндә.

**(Дауамы бар).**

КОНКУРС

**Гәзит иғлан иткән "Айыҡ туй сценарийы" конкурсында үҙ көсөмдө һынап ҡарарға булдым әле. Минең үҙемдең туйым да бер ниндәй эскеһеҙ үтте. Урал арьяғы райондарында иң тәүге эскеһеҙ туйҙы атайыбыҙ башлап ебәрҙе, тиһәм дә хата булмаҫ, ул һәм атайымдың бер туған ҡустыһы балаларына айыҡ туйҙар ойошторҙо. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар тарафынан да ҡаршылыҡ булманы, бик теләп, ихлас ҡыуанып риза булдылар. Хәҙер, Аллаға шөкөр, күп йәштәребеҙ айыҡ туй үткәрергә тырыша, үҙ өлгөләрендә эскеһеҙ ҙә бынамын тигән итеп күңел асып була икәнен иҫбатлай.**
**Туй күңелле үтһен өсөн шаян, көлкөлө уйындар, ҡыҙыҡлы һораүҙар, ярыштар үткәреү, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡунаҡтар менән таныштырыу, бейеү, йырҙар йырлау, таҡмаҡтар әйтеү, шиғырҙар уҡыу һәм башҡа төрлө саралар ойоштороорға кәрәк.**






# БЕР ҺАРЫҠ САЛЫП БУЛҺА ЛА...

## туй мәжлесе үткәрегеҙ

* * *

Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙы, ҡунаҡтарҙы ҡала (ауыл) осонда (милли кейемдәрҙә мөмкин) ҡурай, гармун уйнап, бейеп-йырлап, ҡымыҙ, буҙа (һут һ.б.) менән ҡаршы алалар.

Кейәүгә кәләш йортона ингәндә төрлө һынауҙар әҙерләгеҙ:

- кәләшенә матур, ягымлы һүҙҙәр әйттереү;

- кейәү һәр аҙым һайын ниндәй эштәр эшләй белеүен әйтеп баҫһын (бесән сабам, утын ярам һ.б.).

- кейәү "иҫтәлекле" даталар яҙылған плакаттағы һандар нимәне аңлатыуын әйтергә тейеш, мәҫәлән, 1991 - кәләшенең тыуған йылы, шулай уҡ телефон һандары, ҡәйнәһенең тыуған йылы һ.б.

Туй башланыр алдынан лотереялар, гәзиттәр һатыла, ә аҡсалар матди ярҙам рәүешендә йәштәрҙең 3 литрлыҡ "банк"ыһына һалына.

Ике яҡтың ҡунаҡтарын аралаштырып ултыртыу бигерәк тә яҡшы буласаҡ, сөнки туй барышында ҡунаҡтар бер-берене менән яҡыныраҡ танышасаҡ һәм был артабан да татыу булып, ҡатнашып йәшәүгә йоғонто яһаясаҡ.

* * *

**Алып барыусы:** Әссәләмәғәләйкүм үә рахмәтуллаһи үә бәрәкәтүһ, хөрмәтле ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡоҙасалар, ҡунаҡтар! Беҙҙең барыбыҙға ла Аллаһҡ Тәғәләнең сәләме, рәхмәте, бәрәкәте булһын!

Бисмилләһир рахмәнир рахим!

Бәйғәмбәребеҙ хәдисендә: "Бер һарыҡ салып булһа ла туй мәжлесе үткәрегеҙ",- тип әйтелгән. Һарыҡтар салынды, ҡунаҡтар, йәштәрҙең бар яҡындары ошо мәжлескә саҡырылды. Азат менән Ләйсәндең ғүмерҙәрендә бер тапҡыр ғына була торған күркәм байрам - туй тантанаһын "Фатиха" сүрәһен уҡып асайыҡ.

***"Фатиха" сүрәһе уҡыла. Доға ҡылына.***

**Алып барыусы:** Ҡәҙерле Азат һәм Ләйсән! Никах - ул Аллаһы Тәғәлә ир менән ҡатынды бәйләгән килешеү. Никах - изге, яҡшы эш булып һанала, сөнки Аллаһы Тәғәлә донъяла бөтә нәмәне ишле итеп яратты. Бәйғәмбәребеҙ йәштәргә мөрәжәғәт итеп: "Әй йәштәр, өйләнә алғаныгыҙ, өйләнһен, был һеҙҙе гонаһтан һаҡлар", - тине.

*Танышыуҙар, ҡауышыуҙар*
*Һеҙҙән генә ҡалмаған.*
*Был ғәҙәт бик боронғонан*
*Килә ата-бабанан.*
*Әҙәм менән Һауа ла бит*
*Ошо йәмле ерҙә*
*Бер-берен табышҡандар*
*Ғүмер итергә бергә.*
*Егет менән ҡыҙ парлашалар*
*Шатлыҡ килтереү өсөн.*
*Нәҫел-ырыу шәжәрәһен*
*Дауам иттереү өсөн.*
*Йәшәгеҙ һеҙ пар ҡанаттар*
*Бер-берегеҙҙе аңлашып,*
*Бер-берегеҙҙе һанлашып,*
*Ғүмер буйы һайрашып.*
*Күңелегеҙҙә һис һүнмәһен*
*Изгелек, иман нуры.*
*Йортоғоҙҙа бәхет гөлө*
*Һулымаһын ғүмер буйы.*

***Йәштәр өсөн йыр яңғырай.***

**Алып барыусы:** Ҡунаҡтар! Азат менән Ләйсән яратышып ҡауышҡас, Аллаға шөкөр, яңы туғандар, ҡоҙа-ҡоҙасалар ҙа артты.

Әйҙәгеҙ, танышыуҙы төп ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙан башлайыҡ. Улар изге ата-әсәләр, ҡәҙер-хөрмәткә лайыҡтар! Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әмер итеп шуны әйтә: "Аллаға ғына ғибәҙәт ҡылырға һәм ата-әсәгә изгелек итергә, уларға "уф" тигән һүҙҙе әйтмәгеҙ, һәр ваҡыт йомшаҡ, матур һүҙҙәр һөйләгеҙ".

Бәйғәмбәребеҙҙән бер кеше килеп, өс тапҡыр бер үк һораүҙы бирҙе: "Мин кемде артығыраҡ хөрмәтләргә тейеш?" Бәйғәмбәр өсөнһөндә лә: "Әсәйеңде",- тине. Инде дүртенсе тапҡыр һорағас, Бәйғәмбәр: "Атайыңды",- тине.Был хәҙистән ата-әсәнең ниндәй хөрмәт һәм яратыуға лайыҡ икәнен күрәбеҙ. Уларға һүҙ бирәйек.

***Ҡыҙҙың һәм кейәүҙең ата-әсәләре һүҙ әйтә.***

***Һуңынан ата-әсә хөрмәтенә йыр яңғырай.***

**Алып барыусы:** Инде ике яҡ туғандар менән танышып китәйек, сөнки бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Туғанлашығыҙ, туғанлыҡ ептәрен өҙмәгеҙ, был ғүмерҙе бәрәкәтле, хәйерле һәм оҙон итә".

***Ике яҡтың туғандары таныша. Һуңынан йыр яңғырай.***

***Музыка яңғырап тора. Йәштәр лотерея уйната (1-10 һандарын). Алдан лотереяға сыға торған һәр бүләккә тапҡыр, шаян һүҙҙәр уйлап ҡуйыла.*** *Мәҫәлән:*

*1. Батырлыҡ өсөн миҙал (булавка).*
*2. Кер йыуыу машинаһы "Самсунг" (һабын).*
*3. Японияла етештерелгән ут тоҡандырғыс (шырпы).*
*4. Автомобиль (уйынсыҡ машина).*
*5. Шампунь "понтин-прови" (бешкән йомортка).*
*6. Бушлай врач-стоматолог (һағыҙ).*
*7. Сәс киптергес-фен (таҫтамал).*
*8. Тегеү машинаһы (энә һәм еп).*
*9. Люстра (лампочка).*
*10. Саң һурҙырғыс (һепертке, ҡанат).*

**Алып барыусы:** Хөрмәтле ҡунаҡтар, бәйғәмбәребеҙ хәҙисендә: "Бер-берегеҙгә бүләктәр биреşегеҙ, мөхәббәтегеҙ артыр", - тип әйтелә. Туйға барғанда ла йәштәргә бүләктәр биреү йолаһы бар, әле лә бер кем дә бүләкһеҙ килмәгән. Ҡотлау өсөн һүҙ кейәү менән кәләште ҡотларға килгән ҡунаҡтарға бирелә.

***Теләктәр, ҡотлауҙар, бүләктәр тапшырыу.***

***Йыр яңғырай.***

**Алып барыусы:** Хөрмәтле ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡоҙасалар, ҡунаҡтар, бүләктәрегеҙ бик матур, йәштәр уларҙан файҙа күрһен, ҡарап ҡыуанһын, донъя көтөү өсөн энәһе лә, ебе лә кәрәк. Ләкин донъя малына ҡыҙығып, араларындағы мөхәббәтте, ихтирамды юғалтмаһындар.

*Тормош итеү - диңгеҙ кисеү, тиҙәр,*
*Ә диңгеҙҙәр тормай тулҡынһыҙ.*
*Тормош тулҡындарын баҫыр өсөн*
*Йәшәп булмай һөйөү-ялҡынһыҙ.*
*Яратышыу еңел саҡта түгел,*
*Ауырлыҡтар менән һынала,*
*Яратышҡан татыу парҙар ғына*
*Ауырлыҡты еңеп сыға ала.*
*Ир урынында ир үҙе булһын,*
*Үрелмәһен ҡатын бүреккә.*
*Ҡатын була алыу - оло бәхет,*
*Уңған ҡатын - ирге бәхеткә.*
*Бәхеттәргә юлдар урау, тиҙәр,*
*Тормош итеү түгел ҡыр кисеү.*
*Урау юлдың башы бына тигән -*
*Һеҙҙә уҙа торған туй кисе.*

Изге теләктәрегеҙҙе Аллаһу Тәғәлә ҡабул итһен, амин.

***Йыр яңғырай.***

Музыка яңғырап тора. Лотереяларҙың ҡалғаны уйнатыла.

11. Шәшке тиреһенән бүрек (чепчик).
12. Яһалма сәс (бумала).
13. Утын бысҡыс "Дружба" (ҡәләм ослағыс).
14. Ырымбур шәле (яулыҡ).
15. Киске күлдәк (эске күлдәк).
16. Һыу өсөн фильтр (иләк).
17. Крем "Нивея" (ҡыяр).
18. Рәсәй һаҡлыҡ банкы, филиал (3 л банка).
19. Музыкаль центр (борсаҡ консерваһы).
20. Автопортрет (көҙгө).

**Алып барыусы:** Ҡунаҡтар бер аҙ ял итеп алһын, ә йәштәребеҙгә һынау үткәрәйек, донъя көтөргә әҙерме икән улар?

***Кейәү һәм кәләш өсөн уйын.***

- Кәләштең кейәүгә һорауы - кейәүҙең кәләшкә яуабы.

- Ҡурсаҡ кейендереү - биләү. Кейәүҙең уң ҡулы менән кәләштең һул ҡулы бергә бәйләнгән.

-Кейәү төймә таға, кәләш сөй ҡаға.

**Алып барыусы:** Һай, афарин! Кейәү менән кәләш бик иш килгәндәр, уңғандар, етеҙҙәр. Береһе ут булһа, икенсеһе һыу булһын. Уларҙы оло тормош юлына әҙер тип һанайбыҙ. Һәм уларға диплом һәм техник паспорттар, устав-кәңәштәр, коляска

йөрөтөү өсөн водитель танытмаһы тапшырып китәйек. Шулай уҡ, матур ғаилә ҡорған йәштәргә төрлө тарафтарҙан килгән телеграммаларҙы ла уҡып ишеттерәйек.

***Йәштәргә дипломдар бирелә.***

**Алып барыусы:**

*Оҙатабыҙ һеҙҙе оҙон юлға,*
*Оло юлға, тормош юлына.*
*Ҡулды - ҡулға, уйҙы - уйға бәйләп,*
*Йөрәк менән бергә булырға.*
*Ҡарамағыҙ дошман һүҙҙәренә,*
*Ғәйбәттәрҙән өҫтөн булығыҙ.*
*"Тел" алырға килгән дуҫтарҙы һеҙ,*
*Өйөгөҙҙән йыраҡ ҡыуығыҙ.*

***Йыр яңғырай.***

**Алып барыусы:** Әйҙәгеҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар! Аҡыллы, батыр ул, уңған, матур ҡыҙ тәрбиәләп үҫтергән ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға дипломдар тапшырайыҡ.

***Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға дипломдар бирелә.***

**Алып барыусы:** Беҙҙең бында кейәү ҡәйнәһенә миҙал һәм бүләк тә бар икән. Әйҙәгеҙ, Мөнирә апайға бүләкте тапшырайыҡ. Мөнирә апай "хәстәрле, ҡайғыртыусан ҡәйнә" миҙалы менән наградлана һәм кейәү бүләге - таба менән бүләкләнә. Мөнирә апай, кейәүең шундай уңған ҡәйнәһе булыуына бик шатлана һәм, ҡунаҡка килгән һайын ҡәйнәм тәмле ҡоймаҡтары менән һыйлар, тип ышана.

***Ҡәйнәгә миҙал һәм бүләк тапшырыла. Ҡәйнәгә һүҙ бирелә.***

**Алып барыусы:** Тағы ла килен ҡәйнәһенә миҙал менән бүләк бар. Әйҙәгеҙ, Таңһылыу апайға ла бүләкте тапшырайыҡ. Таңһылыу апай "Һоҡланғыс, иҫ киткес ҡәйнә" миҙалы менән наградлана һәм килен бүләге - йомғаҡ еп һәм энә менән бүләкләнә. Таңһылыу апай, киленең шундай шәп ҡәйнә насип булыуына бик ҡәнәғәт һәм үҙе лә, һеҙҙең кеүек үк, ейән-ейәнсәрҙәренә күңел йылыһын ҡушып, йөн ойоҡбаштар бәйләп кейҙерермен, тип хыял итә.

***Килен ҡәйнәһенә миҙал һәм бүләк тапшырыла һәм уға һүҙ бирелә.***

**Алып барыусы:** Шундай әсәй-ҡәйнәләр булғанда ауыр тормош та еңел, күңелдәр ҙә күтәренке, йәшәү ҙә күңелле. Йәшәһен әсәйҙәр!

***Йыр яңғырай.***

Музыка яңғырап тора. Лотереяның ҡалғандары уйнатыла (21-30 һанлы билеттар).

21. Кухня комбайны (алъяпҡыс, косынка).
22. Уңайлы татар кроссовкиҙары (галош).
23. Госдума ултырышы (көршәк).
24. "Рәхәтлеккә" илткән оҙон юл (бәҙрәф ҡағыҙы).
25. Камин (утын).
26. Ласина (носки).
27. Элгес (сөй).
28. Шәшке тиреһенән тун (ирҙәр күлдәге).
29. Противогаз (кер ҡыҫтырғыс).
30. Кеҫә туалеты (памперс).

**Алып барыусы:** Ҡунаҡтар, үҙебеҙ генә уйнап-бейеп ултырмайыҡ әле, кейәү менән кәләште лә бейетәйек.

***Кәләш батмус өҫтөндә бейей, ҡунаҡтар батмуска аҡса һала.***

**Алып барыусы:** Хөрмәтле ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡунаҡтар! Изге теләктәр әйтелде, матур бүләктәр тапшырылды, барығыҙға ла рәхмәт. Йәштәребеҙҙең дә һеҙгә әйтер һүҙҙәре бар икән. Уларға һүҙ бирәйек. Рәхим итегеҙ, йәштәр.

***Кейәү менән кәләшкә ата-әсәһенә, ҡунаҡтарға рәхмәт әйтер өсөн һүҙ бирелә.***

**Алып барыусы:** Йәштәребеҙҙең изге теләктәренә беҙ ҙә ҡушылабыҙ һәм шиғырҙа әйтелгәнсә:

*Нисек түләп бөтөрөрбөҙ -*
*Ғүмер биргән өсөн беҙгә,*
*"Балам" тиеп, янып-көйөп*
*Йәшәгәнгә рәхмәт һеҙгә.*
*Күпме генә рәхмәт әйтһәк тә,*
*Бик аҙ булыр кеүек күңелгә.*
*Бәхет, шатлыҡ ҡына юлдаш булһын,*
*Әсәй, атай, һеҙгә ғүмергә.*

***Йыр яңғырай.***

**Алып барыусы:** Хөрмәтле йәштәр, Азат һәм Ләйсән! Тормош тигән оҙон, ауыр юлды бер-берегеҙгә таяныс булып, бер-берегеҙҙе хөрмәт итеп, бер-берегеҙҙе ғәфү итеп, бер-берегеҙгә юл ҡуйып үтәргә Аллаһы Тәғәлә һеҙгә күркәм сабырлыҡтар бирһә ине, амин.

*Татлы булһын телдәрегеҙ,*
*Татлы һүҙ - йән аҙығы.*
*Татыулыҡта, тыныслыҡта*
*Йәшәйештең ҡыҙығы.*
*Тормош - бик үҙгәрек йылға,*
*Ағыр ҙа ағыр ғына.*
*Һеҙҙе һәр көн, сәғәт һайын*
*Һынар ҙа һынар ғына.*
*Ауырлыҡтар килгән саҡта*
*Иңде иңгә ҡуйығыҙ.*
*Ергә хәләл көстәр менән*
*Матур эҙҙәр уйығыҙ.*

***Йыр яңғырай.***

**Бейеү, уйын-көлкө дауам итә. Әгәр ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар, ҡунаҡтар араһында йырлаусылар булһа, бигерәк тә яҡшы.**

**Шулай уҡ ҡунаҡтарға өҫтәл артында ултырғанда күңелле һорауҙар бирергә була. Дөрөҫ яуап биргәндәргә ҡыҙыл ҡағыҙҙан эшләнгән "йөрәктәр" бирергә, һуңынан кем "йөрәктәрҙе" күберәк йыйған, шуға бүләк һәм миҙал бирергә мөмкин: "Иң аҡыллы", "Иң күп һөйләүсе", "Иң әүҙем", "Иң күп ҡысҡырыусы", "Бөтә ергә лә танауын "тығыусы", "Иң шәп бейеүсе", "Иң шәп тел биҫтәһе" һ.б.миҙалдар әҙерләргә мөмкин.**

***Ҡайһы бер һорауҙар:***

*- Аш янында иң кәрәк ер нимә? (Урын).*
*- Аш килтергәс, уға иң башта нимә һалабыҙ? (Күҙ).*
*- Кеше башына нимә ҡуна? (Кәпәс).*
*- Кемдәр беҙҙең өҫтә баштүбән йөрөй? (Себен).*
*- Ер йөҙөндә беренсе булып осоу аппаратын уҙләштергән ҡатын-ҡыҙ исеме? (Мәскәй әбей).*
*- Ашап ултырғанда нимә килә? (Саҡырылмаған ҡунаҡтар.)*
*- Ир кеше өсөн йортта ярҙам итеү нисек аңлатыла? (Ҡатын иҙән һепергәндә, аяҡтарын күтәреп ултырыу).*
*- Сәйҙе ҡайһы ҡул менән болғатыуы уңайлыраҡ? (Сәйҙе ҡалаҡ менән болғатыу уңайлыраҡ).*
*- Йәшел кешене күргәс, ни эшләргә? (юлдың икенсе яғына сығырға, сөнки был светофорҙың йәшел сигналы).*
*- Аш тәмле булһын өсөн нимә кәрәк? (ас ир).*
*- Йорттағы дүрт аяҡлы дуҫ нимә була? (Диван).*
*- Уның биш бармағы бар, ләкин һөйәге лә, ите лә юҡ. Был нимә? (Бирсәткә).*
*- Һыу, ләкин күктән дә, ерҙән дә түгел? (Күҙ йәштәре).*

***Ошондайыраҡ плакаттар яҙып элергә:***

- Йылы мөнәсәбәт көтһәң,
Йылы һүҙеңде йәлләмә.
- Бармаҡҡа - балдаҡ, елкәгә - ҡамыт.
- Ирҙе ир иткән дә, хур иткән дә ҡатын.
- 1+1=3
- Ҡатынды йөҙәк ҡашы иткән дә, мунса ташы иткән дә - ир.

**Әминә НОҒОМАНОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# "БИСМИЛЛӘҺИ" ҺҮҘЕ...

## бар яуызлыҡты еңә



**Булғанмылыр был, юҡтырмы, бер Аллаһы Тәғәлә генә белә. Алыҫ, бик алыҫ илдә бер бик матур бәләкәй Принцесса йәшәгән, ти. Ул шул тиклем матур, йөрәге шундай изге, шәфҡәтле булған, уны бөтәһе лә яратҡан һәм Раузалар Принцессаһы тип атағандар, ти.**

Был илдә яуыз сихырсы ла йәшәгән, ти. Раузалар Принцессаһы тураһында ишеткәс, ул йоҡоһонан яҙған һәм тыныслығын юғалтҡан. Тирә-яҡтағы бар халыҡтың Принцессаның изгелектәре һәм матурлығы тураһында ғына һөйләүенә, сихырсының өҫтөнләгән бөтөнләй күрмәүҙәренә уның көнсөллөгө һәм асыуы килгән. Сихырсы Принцесса менән иҫәпләшергә хыялланған, ти.

Шулай берҙән-бер көндө Аллаһы Тәғәләнең бөтә тере йәндәре: кешеләр, ҡоштар, күбәләктәр, бал ҡорттары яңы көндөң тыуыуын, Хоҙай Тәғәләне маҡтап шатланғанда, яуыз Сихырсы ла үҙ өйөнән сыҡҡан. Был дөйөм ҡыуанышыу, сыркылдашыу һәм гөжләү уның ҡәйефен тағы ла нығыраҡ боҙған, ти.

Сихырсы үҙенең тоғро хеҙмәтсеһен саҡырып алған да уға сихырланған "яуызлыҡ орлоҡтары" һалынған тоҡсайҙы биргән. Убырлы ҡарсыҡ уға Принцессаға баҡсасы булып ялланырға, һарайҙағы баҡсаға ошо орлоҡтарҙы сәсергә, улар сәскә атҡас, был орлоҡтарҙан сәй әҙерләп, ошоноң менән Принцессаны һыйларға ҡушҡан.

Хеҙмәтсе бөтә әйтелгәндәрҙе теүәл үтәгән. Орлоҡтарҙан ерәнгес еҫ килгән, сөнки улар "яуызлыҡ орлоҡтары" булған. Әммә баҡсалағы раузаларҙан аңҡыусы хуш еҫ "яуызлыҡ орлоҡтары"нан шытып сыҡҡан сәйҙең яман еҫен баҫҡан. Раузалар Принцессаһы "Бисмилләһи-ррахмәни-ррахим" тип шыбырлаған да сихырланған сәйҙе эскән, ти.

Был сәйҙе эскән кеше дөйә сәнскәгенә әйләнергә тейеш була. Хеҙмәтсе, ҡулдарын ыуғылап, яуыз сихырсының сихырына һәм Раузалар Принцессаһының сәнскәккә әйләнә башлаясағына көн элгәре ҡыуанған.

Әммә быныӊ урынына Раузалар Принцессаһының муйынына бик матур лилиәләрҙән үрелгән сәскә бәйләме килеп уралған һәм уның сәстәре алтын тулҡын булып елберләгән, күҙҙәре - зәбәрҙжәт япраҡтарына, устары - аҡ лилиәләргә, ә тирәһе - баҡсала сәскә атыусы раузаларҙың нәфис таждарына оҡшап киткән. Принцесса көлгән саҡта уның тирәһендә ҡыҙыл мәктәр, һары күҙле ромашкалар, төрлө төҫтәге маргариткалар сәскә атҡан. Ул һөйләгәндә уның ирендәрендә зәңгәр, күк миләүшәләр күҙҙәрен асҡан.

Ә шул ваҡытта хеҙмәтсе үҙе сәнскәккә әйләнеп ҡарайған һәм кипкән, ти.

Кешеләр, Раузалар Принцессаһын күреп, хайран ҡалып ҡыуанған:

-Уның исеме Раузалар Принцессаһы, хәҙер үҙе лә хас та сәскә кеүек.

Раузалар Принцессаһы һәр ваҡытта ла бер эш эшләр алдынан "Бисмилләһи", тип әйткән, шуға ла уға килгән бөтә бәләләр изгелеккә әйләнгән. Аллаһы Тәғәлә уны яуызлыҡтан һаҡлаған.

Яуыз Сихырсы, үҙенең сихыры нимә менән тамамланғанын белгәс, асыуынан шартлаған. Уның йәшелсә баҡсаһында үҫкән бөтә яуызлыҡ сәнскәктәре бөтәһе бер юлы һулыған.

Бәләкәй Раузалар Принцессаһы "Бисмилләһи" һүҙе уны Сихырсының сихырынан һаҡлағанын аңлаған һәм Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт әйткән. Ул үҫеп еткәс һәм йәш кәләш булғас та, һуңынан әсәй булып ҡартайғас та, Аллаһ Тәғәлә гел уның үтенесен үтәгән.

Быны әкиәт тә бөттө.

**Мөршиҙә УЙСАЛ.**
**"Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# САПҠАН АТТЫ ҮҪТЕРЕРГӘ...

## күлдәй тир түгергә кәрәк

- Бүләк биреүҙән малың, белгәнеңде өйрәтеүҙән аҡылың кәмемәй - күңелең генә биҙәкләнә.
- Дошман ужыуы утыҙ йыл, унан һуң да абай бул.
- Утын бирҙем, ҡуҙ алам тигәндәй үрһәләнмә - һәр эшеңдә, фекереңдә бөтмөрләп, семсерләп, сынъяһау итеп башҡар.
- Тәкәбберҙе төртөнсөк менән төртөндөр: кинәйәле мәҙәгеңде, айҙай балҡыған йөҙөңдө йәлләмә - майҙай ирер.
- Ирмен тигән ир ҡулында ир ҡорамалы булыр, бейек ҡәлғәләр ҡорор.
- Айран эсергә барға ин, бал теләһәң байға йүнәл.
- Тел ҡатмаҫҡа ғәҙел һүҙ, күңел туңмаҫҡа изге теләк ҙур дауа.
- Һәр эштә лә өйрәтеүсе-белемсенең һаны юҡ, эшләүселәр генә иҫәпле.
- Йыл миҙгеле - дүртәү, һанаулы, ғүмер миҙгеленә иҫәп юҡ.
- Гел күктә осма - тигеҙ урында ла абынырһың.
- Байлығы кәмеүҙән ҡурҡҡан кеше - емтек һаҡлаған эткә тиң.
- Теҙелгән мәрйен тигеҙ ҙә ул, ғүмер юлы ғына ҡыйыш-мыйыш.
- Данына шапырынып, танау буйыңа ҡарама - соҡорға осорһоң.
- Һөйөү менән нурланмаған йөрәк - ҡый баҫҡан ташландыҡ баҡса.
- Сыбыртҡынан ҡамсыны айырмаған ир-егеткә шулар менән бер-икене тамыҙыу зыян итмәҫ: тиҙ аңлашырҙар.
- Юҡ-бар һылтау менән донъя арбаһынан төшөп ҡалырға бер милләттең дә хаҡы юҡ.
- Тыуған илде онотмаҫҡа әтәстәрҙән өлгө ал - экватор яҡтарын онотмай төнөн дә кикирикләйҙәр.
- Үткән берәүгә һүҙ ҡатма, мөйөш һайын хәбәр һатма - өрәгәс эткә оҡшарһың.
- Йәне, күңеле керле кеше - ялтыр ҡабыҡлы йыланға тиң.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Клубтан Әминә менән бергә ҡайтырға сыҡтыҡ. Шунда уҡ беҙҙе "Хәлил" ҡыуып етте. "Һине оҙатып барырға мөмкинме?" тип һораны ул. "Ғәлиәбаныу" йырын йырлаһағыҙ, мөмкин", тине әхирәтем миңә күҙен ҡыҫып.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨНДӘЛЕК АЛЫП БАР...

## бәхетлерәк булырһың

■ Психологтар раҫлауынса, үҙен бәхетле тип иҫәпләгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың оҡшаш бер үҙенсәлеге бар: улар көндәлек алып бара. Чикаго университеты ғалимдары фекеренсә, үҙеңдең тойғоларыңды һәм уйҙарыңды ҡағыҙға яҙып барыу тормошто еңелерәк ҡабул итергә ярҙам итә. Мәҫәлән, бындай ҡатын-ҡыҙҙар төрлө проблемаларҙы тиҙерәк хәл итә, күңелһеҙ ситуацияларға иғтибар итмәй, уларҙың кәйефе гел юғары була.

■ Нимә һуң ул бәхет тигән һорауға яуап кешенең ниндәй енескә ҡарауына ла бәйле, имеш. 51 илдә үткәрелгән онлайн-анкета күрһәтеүенсә, ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар өсөн бәхет төшөнсәһе айырыла. Ир-егет бәхетенең төп факторы булып аҡса тора. Ә ҡатын-ҡыҙҙар яндарында туғандары һәм дуҫтары булғанда ғына үҙен бәхетле тоя. Тикшереүселәр тағы шуны ла асыҡларға ярҙам иткән: күп илдәрҙә үҙен бәхетле, тип иҫәпләгән ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда күберәк. Быны белгестәр иктисади көрсөк менән бәйләй, йәнәһе, ирҙәр әлеге мәлдә үҙенең төп бәхет сығанағы булған аҡсаға ҡытлыҡ кисерә.

■ Йоҡлауҙың иң мөһим маҡсаты булып энергияны һаҡлау, ваҡытты һәм көстө дөрөҫ ҡулланыу тора, тип белдерә Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимы Джером Сигель. Бәҡтиһән, йоҡлаған саҡта организмдың иң күп энергия тотоноусы ағзалары һүнеп тора икән. Мәҫәлән, мейе дөйөм кәүҙә массаһының 2 процентын ғына алып тора, әммә 20 процент энергия тотона. Шуға ла организмға көнөнә 6 тапҡыр туҡлыҡлы итеп ашағанса, уны 8-10 сәғәткә һүндереп тороу күпкә файҙалыраҡ. Ә ҡышҡыһын йоҡоға талыусы йәнлектәр һаҡлап ҡалған энергия уларға йылыраҡ яҡтарға барып етергә лә етә икән.

■ Нью-Йоркта ҡыҙыҡлы эксперимент үткәрелгән. Унда ябай граждандар һәм VIP-персоналар: банкирҙар һәм сәйәсмәндәр ҡатнашҡан. Был ике төркөм кешеләренә маңлайҙарына маркер менән "Е" хәрефе яҙырға тәкдим ителгән. Был хәрефте башҡа кешеләргә йә үҙенә уҡырға уңайлы булһын өсөн ике төрлө яҙырға мөмкин. Тәжрибәлә ҡатнашырға ризалыҡ белдергән VIP-персоналарҙың 70 проценты хәрефте үҙҙәренә уҡырға еңелерәк булһын өсөн яҙа. Ябай эшселәрҙең 80 проценты башҡа кешеләрҙе уйлап, уларға еңелерәк булһын өсөн тырыша. Тәжрибә үткәреүселәр фекеренсә, хеҙмәт урынында уңыш ҡаҙанам, тиһән, кем файҙаһына эшләүең тураһында уйла: үҙең өсөнмө, әллә башҡалар өсөнмө.

■ Ғилимдар компьютер клавиатураһы күп вирустар һәм микробтарҙың сығанағы булып тора, тип иҫкәртә. Шуға ла интернет-кафеларға йөрөргә, йәки сит кешенең клавиатураһы менән йыш ҡулланмаҫҡа кәңәш ителәр. Австралия ғалимдары бер университет ятағында төрлө клавиатураларҙың өҫтөндәге микроб һәм вирустарҙың иҫәбен асыҡларға тырышҡан. Иң мөһиме, был компьютерҙар менән күп студенттар ҡулланған. Һуңынан белгестәр был тикшереңеү һөҙөмтәһен бер кеше генә ҡулланған клавиатура һөҙөмтәләре менән сағыштырып ҡараған. Дөйөм ҡулланылышта булған клавиатурала микробтар һаны 5 тапҡырға юғарыраҡ булып сыҡҡан. Шуға ла компьютерҙың клавиатураһын һәм "сыскан"ын таҙа торорға һәм йыш ҡына дезинфекциялап торорға кәңәш итә белгестәр.

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

**"Ғәлиәбаныу" - үлемһеҙ әҫәр, ул нисәмә быуын вәкилдәрен һоҡландырған һәм артабан да һоҡландырасаҡ ысын мәғәнәһендә бөйөк тамаша. Үҙ ғүмеремдә был спектаклдә нисәмә тапҡыр ҡарағанмындыр инде, ләкин ул бер ҡасан да туйҙырманы, ҡараған һайын ҡарағы килеп тик тора әле лә. Студент йылдарында "Юбилей" мәҙәниәт һарайындағы театр түңәрәгенә йөрөп уны үҙебеҙ ҙә сәхнәләштергәйнек бер ара.**

# ҒӘЛИӘБАНЫУ БУЛЫП ҠАЛАМ

Бынан байтаҡ йылдар элек "Ғәлиәбаныу" ҙы әсәйем менән бергә телевизорҙан ҡарарға тура килде. Тамаша тамамланғас, әсәйем дымлана биргән күҙҙәрен һөрткөләп:

-Ошо спектаклдә ҡараһам, Әминә әхирәтем ҡылт итеп иҫкә килә лә төшә. Нурия Ирсаева урынында ул уйнап йөрөгән һымаҡ миңә, - тип ҡуйғайны. Мин хикмәтле хәл - ваҡиға хаҡында ишетеремде һиҙеп, унан әхирәтенең кем булыуы хаҡында төпсөнә лә башланым һәм әсәйем түбәндәгеләрҙе һөйләгәйне.

-Һәр ағаслыҡтың, әрәмәлектең үҙен биҙәп торған, уның күрке булған үҙ ҡошо була. Бына беҙҙең ҡаршылағы таллыҡта иртәле - кисле һандуғас һайраны. Ул сутылдай башлау менән бына шул таллыҡҡа йәм, йән инеп киткәндәй була ине. Баҡса артындағы өйәнкелеккә һәр саҡ байғош хужа булды. Төнөн шуның күңел өшөткөс тауышы ишетелмәһә был өйәнкелеккә ниҙер етешмәгәндәй, ул ҡотһоҙланып ҡалғандай тойола ине.

Ә Әминә әхирәтем тотош ауылдың ҡото, биҙәге, йәме булды заманында. Хоҙай талантты бер кешегә бирһә бирә бит. Ул йырҙа, ул бейеүгә, ул башҡалар булып килештереп һөйләүгә тиңһеҙме - торғаны ысын артист инде. Байрамдарҙа сәхнәнән йырлағанда уның иҫ киткес моңло тауышын тыңлар өсөн хатта ҡарт-ҡороға тиклем клубҡа килә ине. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа халыҡтың уйын - көлкөгә һыуһаған сағы. Клубтар гөр килеп торҙо ул саҡтарҙа. Һинең атайың гармунда, Минеғәли менән Мифтах Минеғәлийе ат ҡылынан үҙҙәре яһап алған скрипкала бейеү көйҙәре һыҙҙыра. Беҙ, ҡыҙҙар ҙа, егеттәр ҙә, шул көйҙәргә таҡмаҡ әйтеп тыпылдыҡ сығарабыҙ. Бына шунда Әминә уртаға төшһә, башҡалар уны ҡарар өсөн генә бейеүҙәренән туҡтап ҡала ине. Шул ҡәҙәре дәрт менән, шул тиклем килештереп баҫа торғайны әхирәтем. Таҡмаҡ сығарырға тиңәҙ дә уны ғына ҡуш, берәйһенең етешмәгән ерен күреп ҡалһа, шунда уҡ төртмә һүҙле таҡмаҡ сығарып, әйтеп тә бирә һала. Шул арҡала уҫалыраҡ егеттәрҙән туҡмала яҙып та ҡуйғыланы. Бер әртис икенсеһенең тауышы менән һөйләй, йә йырлай бит әле. Был да шуға бик оҫта булды. Ҡараңғы төшкәс, беҙҙе эйәртеп ала ла, берәйһенең, бигерәк тә әбей-бабайҙар ғына йәшәгән йорттоң тәҙрәһен шаҡып, күршеләренең йәки башҡа кеше тауышы менән мунсаға йә булмаһа сәйгә саҡыра. Теләр ышанып бара, ә беҙгә ҡыҙыҡ. Кем этлеге икәнен аҙаҡ белһәләр ҙә, бик асыуланмай, үҙҙәренән - үҙҙәре көлөп кенә ҡуйғылай ине алданғандар.

Төҫ - башҡа ла бик сибәр булды әхирәтем. Уға ауылдың күп егеттәре ғашиҡ булһа ла, һүҙ ҡушырға баҙнат итеп артынан йөрөүсе булманы. Әллә төртмә теленән ҡурҡтылар, әллә үҙҙәренең уға тиң була алмаҫын һиҙҙеләр. Шулай ҙа, өләшенә төшкән көмөшөнә юлыҡты әхирәтем.

Бер заман ауылға Ырымбур артистары "Ғәлиәбаныу" спектакле менән килеп төштө. Ул ваҡытта театр килеүе һәммәһе өсөн дә ҙур ваҡиға була торғайны. Халыҡ артистарҙы ныҡ ихтирам итте, исемдәрен теленән төшөрмәне, тамашаға эркелеп килде, хатта залда баҫып торорға ла урын булмай торғайны.

Спектаклдә бик тә килештереп, һоҡланғыс итеп уйнаны ырымбурҙар. Уның барышында халыҡ көлдә лә, иланы ла. Эргәмдә ултырған әхирәтемә бигерәк тә Хәлилдә уйнаған оҙон буйлы, ҡара бөҙрә сәсле артист оҡшаны. Ул күренгән һайын Әминә: "Уф, ниндәй һоҡланғыс егет! Үәт, килештерә!" - тип ҡолағыма шыбырҙаны. Ә Ғәлиәбаныу Хәлилдең үле кәүҙәһен ҡосаҡлап йырлағанда биттәренән сөбөрләп йәш аҡҡан Әминә урынынан уҡ һикереп торҙо. Белгәненән тотоп ҡалмаһам, йүгереп сәхнәгә барып менер ине, буғай.

Ул ваҡытта тамаша бөтөү менән халыҡ өйөнә таралышмай уйынға ҡала торғайны. Эскәмйәләрҙе стена буйына теҙә һалып, өлкән йәштәгеләргә тиклем таҡмаҡ әйтеп, гармун көйөнә бейешеп ҡайта ине. Был уйында әхирәтем ғүмергә булмағандай ҡотороп сыҡты. "Сылбыр", "Каза" уйындарында ла, таҡмаҡ әйткәндә лә матур тауышы айырыуса айырылып, яңғырап торҙо. Ә бейегәндә күбәләктәй "осто". Уйын ҡарарға ҡалған артистар араһынан "Хәлил"де уртаға саҡырып сығарып, уның ушын алғансы бергә бейетте. "Күрәһең, ҡыҙыҡай был егеткә бөтөнләй ғашиҡ булған", тип уйлап ҡуйғайным әхирәтемдең ҡыланышына ҡарап.

Уйын тамамланыр алдынан артистарҙың етәксеһе Әминәне үҙҙәре янына саҡырып алды ла театрға эшкә килергә өндәй башланы. Күпме генә маташһалар ҙа әхирәтемдә бер нисек тә күндерә алманы улар. "Түшәктә ятҡан әсәйемде лә миңә ҡушып алһағыҙ - ризамын", тип көләмһерәп әйткәнә хәтеремдә әхирәтемдең.

Клубтан Әминә менән бергә ҡайтырға сыҡтыҡ. Шунда уҡ беҙҙе "Хәлил" ҡыуып етте. "Һине оҙатып барырға мөмкинме?" тип һораны ул әхирәтемдең белгәненән тотоп. "Ғәлиәбаныу" йырын йырлаһағыҙ, мөмкин", тине әхирәтем миңә күҙен ҡыҫып.

Тирә-яҡ ауылдарҙа тамаша ҡуйып йөрөгән "Хәлил" спектакль тамамланыу менән һәр көн беҙҙең ауылға килде. Һәр төн әхирәтәремдең ҡапҡа төбөндә парлап башҡарылған "Ғәлиәбаныу" йыры яңғыраны. Ҡасып-боҫоп ҡына барып, һәр төн беҙ ҙә тыңланыҡ уларҙың йырын. Гастролдән йөрөп ҡайтҡас, һине әсәйең менән Ырымбурға күсереп алып китәм, тине "Хәлил". Уй, әхирәт, шул ҡәҙәре "Хәлилем" менән бергә Ғәлиәбаныуҙы сәхнәлә уйнап йырлағым килә", - тигәйне миңә Әминә. Ләкин яҙмышы башҡасараҡ яҙылған булып сыҡты шул әхирәтемдең. Күп тә үтмәй, әсәһе үлеп китте. Ә бер көндө үҙе лә юҡҡа сыҡты.

Ул саҡта беҙҙә ҡыҙҙарҙы ҡаратып түгел, ә урлап алып ҡайталар ине. Күптәр үҙ ризалығы менән "урланды", әлбиттә. Ләкин ҡайһыларын бер-ике күреп ҡалып ҡына, ризалығын да һорап тормай, ысын мәғәнәһендә урланылар. Башлыса сит ауыл егеттәре шулай ҡыланды. Теләп сыҡҡан ҡыҙҙарҙы үҙ йортона алып ҡайтып, риза булмағанын берәй аулаҡ йортҡа йабып, никах уҡытып "ризалаталар" ине. Ул заман урланған тигән исеме сыҡҡан ҡыҙға егеттәр башҡаса ҡарамай ине шул.

Әминәне күрше ауылдың бик холоҡһоҙ, уҫал тигән даны сыҡҡан Барый исемле егете урлап алып киткән булған икән. Өйөнә алып ҡайтмай, Маҡар ҡарттың умарталығында аҙна самаһы тотҡан. Мулла алып килеп, шунда никах уҡыттырған. Барыйҙың бер ҡатыны булып, уныһы иренең яһиллығына сыҙамай, һыуға ташланып үлгән, тип тә һөйләгәйнеләр. Бына шул бәндә әхирәтемдең башын ашаны ла инде. Бар хыялдарын селпәрәмә килтерҙе бахырҡайҙың.

Ауылға "Хәлил"дең Әминә исеменә яҙылған хаттары йыш килеп торҙо. Үҙе булмағас, "Һин уның әхирәте инең бит, тапшырырһың", тип хат ташыусы конверттарҙы миңә бирә барҙы. Бер форсатын табып, ул хаттарҙы Әминәгә илтеп уҡыттым. Күҙ йәштәрен түгә-түгә уҡыны ул уларҙы. "Минең инде кеше бисәһе икәнемде лә белмәй, бахырҡай. Ишетһә, йөрәге ярылыр ине. Ярар, үҙем барыһын да аңлатып хат яҙып ебәрермен", - тигәйне әхирәтем шул саҡта.

Беҙҙең атайың менән өйләнешеп йөрөгән мәл ине. Әминәне оҙаҡ ҡына ваҡыт күрергә тура килмәне. Ниндәйҙер йомош менән ауылдарына барғанда әхирәтемдең өйөнә һуғылдым. Әминә яңғыҙы ғына ине. Күҙ-бите күгәреп, бик бөтөрөнгән әхирәтемде күргәс: "Нишләнең ул?" - тип аптырап һорай һалдым. Ул күҙ йәштәренә быуыла-быуыла ошоларҙы һөйләне. Әминә "Хәлил"гә яуап яҙып ебәргәс, күп тә үтмәй, ире ҡулына әхирәтем исеменә яҙылған хат тотоп килеп инә лә: "Ах, фәхишә, минең өҫтән уйнаш ҡылырға маташаһыңмы? - тип ҡатынын ныҡ итеп туҡмап ташлай. Бәҡтиһән, "Хәлил"дең шул көндә килеп, һине иреңдән алып ҡасам барыбер, тип яҙған хаты тәүҙә Барыйҙың ҡулына килеп эләгә. Ул бер-ике иптәш егете менән "Хәлил"дең килгәнен һағалап тора ла, бик ныҡ итеп туҡмап, иҫһеҙ килеш ташлап китә. Хәлил аңына килгәнсе аяҡтары туңып өлгөргән була. Мәләүез балнисына илтеп, һиңар аяғын тубыктан түбән киҫеп ташлайҙар. "Мин тип гәрип ҡалды, хәҙер сәхнәлә Хәлилдә лә, башҡаһын да уйнай алмаҫ инде. Хәшәрәт ир, икебеҙҙең дә мәхәббәтебеҙҙе бысраҡ аяғы менән тапаны, бәхетебеҙҙе тартып алды. Хәҙер килеп миңә көн дә ҡул күтәрә. Уйнаштан ҡалған бала ул, тип эсемә тибеп, ауырымды төшөрттөрҙө, үҙ балаһын үҙе үлтерҙе", - тип үкһей-үкһей иланы Әминә.

Шунан күп тә үтмәй, әхирәтемдең бөтөнләй юғалыуы хаҡында хәбәр ишетелде. Әле һаман уның ҡайҙалығын белгән кеше юҡ. Мин генә "Хәлил"ен эҙләп китеп, шуның менән өйләнешеп, йәшәп ятмаймы икән тип уйлап ҡуям...

* * *

Быларҙы әсәйем һөйләне. Ә уның дауамын миңә яҙырға насип булған икән.

Ишембай менән Ырымбурҙың Красногвардейский районын дуҫлыҡ ептәре бәйләй, йәғни беҙ туғандаш районлар. Элегерәк бер-беребеҙгә делегациялар ебәреп, йыш ҡына аралашып торғанбыҙ. Ләкин һуңғы осорҙа ниңәлер был эш һүнеп ҡалды. Бынан биш-алты йыл элек Ырымбур тарафтарына юлланған делегация составына мине лә индергәйнеләр. Автобусҡа тейәлеп, Ишембайҙан иртүк сыҡҡайныҡ та, ҡараңғы төшөүгә саҡ барып индек туғандаш район үҙәгенә. Беҙҙе бында бик йылы ҡаршыланылар, матур итеп ҡунаҡ иттеләр. Беҙгә Туҡ һәм Соран йылғалары буйында урынлашҡан бер нисә башҡорт ауылына барып, халыҡ менән осрашырға ла тура килде. Һуңғы осра-

***✓ Стивен менән Люсиль өйләнешергә йыйына, әммә Люсиль үҙенә нығыраҡ кәрәк булған кешене осрата. Стивен төшөнкөлөккә бирелә. Әммә бер аҙҙан һуң метафизик аҡылын ҡулланып, Люсилде кире ҡайтарырға ҡарар итә.***

шыу район үҙәгенең мәҙәниәт йортонда бик күп кеше ҡатнашлығында үтте. Беҙ унда милләттәштәребеҙгә ҡурай, башҡорт яҙыусыларының китаптарын бүләк иттек. Әртистәребеҙ концерт номерҙары менән сығыш яһаны. Хужалар ҙа яуапһыҙ ҡалмай, сәхнәгә сығып йырлап-бейене.

Концертты алып барған ҡыҙ:

- Хәҙер үҙебеҙҙең Ғәлиәбануу "Ғәлиәбануу" йырын башҡара, - тип иғлан иткәс, сәхнәгә яуырындарына мамыҡ шәл һалған өлкән йәштәге апай сығып: "Яҡташтарым, был һеҙгә минең бүләгем", - тине лә, йырлап та ебәрҙе. Матур, сағыу тауыш менән йөрәктәргә үтеп инерлек итеп, бик тә һоҡланғыс башҡарҙы ул йырҙы. Бөтә зал иҫе китеп, тын да алмай тыңланы уны. Аҙаҡ гөрләтеп ҡул саптылар, ҡат-ҡат сәхнәгә саҡырҙылар, ләкин йырсы апай ҡабат күренмәне.

- Ах, үҙебеҙҙең килен, һандуғас мени! Ләкин "Ғәлиәбануу"ҙан башҡаһын йырламай шул. Ирен дә һуңғы юлға ошо йыр менән оҙатты. Кәфенгә уралған ҡустыны ҡосаҡлап йырлағанда һушыбыҙ китеп бар халыҡ иланы. Йәш ваҡыттарында үҙҙәре ҡуйып йөрөгән "Ғәлиәбануу" спектаклендәге һымаҡ килеп сыҡты ла ҡуйҙы, - тине эргәмдә ултырған, мин элегерәк танышып алған ағай.

Шунда ҡапыл ҡылт итеп иҫемә әсәйемдең әхирәте хаҡында һөйләгәндәре килеп төштө.

- Йырсы апайҙың исеме Әминә түгелме? - тип ағайҙан һорай һалдым һәм ыңғай яуап алғас, тиҙ генә урынымдан тороп, сәхнә артына ашыҡтым. Апай өҫ кейемдәрен кейеп ишектән сығып килә ине инде.

- Һаумыһығыҙ! Һеҙ, апай, Ашҡаҙар буйынан, Батыр ауылынан түгелме? - тип һорай һалдым мин унан.

Әминә апай ҡапылдан туҡтап ҡалып, аптыраулы ҡараштарын миңә төбәне.

- Эйе, шунан. Ә һин кем булаһың? - тип һораны ул үҙ сиратында. Кемдәрҙең улы икәнемде әйткәс, апай мине ҡосаҡлап уҡ алды һәм шунда уҡ һорау артынан һорау яуҙырырға тотоноп та китте. Саҡ-саҡ яуап биреп өлгөрҙөм үҙенә. Исемдәрен атап һорашмаған, сәләм күндермәгән кешеһе ҡалмағандыр ауылда.

Тынып ҡалған бер арала мин әсәйемдең һөйләүе буйынса уның хаҡында яҡшы хәбәрҙәр булыуымды әйтеп, үҙенең тормошо тураһында һөйләүен һораным.

- "Хәлил"емдең аяҡһыҙ, ғәрип ҡалғанын белгәс, уға аҙ булһа ла таяныс булайым, тип уны эҙләп ҡасып сығып киттем. Ҡырҡ нужа менән саҡ-саҡ эҙләп таптым үҙен. Өйләнештек тә ошо районлағы ауылдарына ҡайтып йәшәй башланыҡ. Ирем клубта эшләне, мин донъя көттөм дә, йыл һайын тип әйтерлек бала таптым, - тине ул. Бер аҙ тын ҡалғас өҫтәп ҡуйҙы. - Бына, "Хәлил"емде генә ике йыл элек ерләнек шул... Әхирәтемә әйт: беҙ барыбер сәхнәлә Хәлил менән Ғәлиәбануу булып уйнаныҡ. Ирем протез эшләтеп алып, йөрөргә өйрәнгәс тә ауылда "Ғәлиәбануу"-ҙы әҙерләп күрһәттек. Һәм ҡайһылай уйнаныҡ! Һоҡланмаған, иламаған кеше ҡалмай торғайны. Был спектакль менән яҡын-тирәләге, хатта күрше районларҙағы барлыҡ башҡорт ауылдарын йөрөп сыҡтыҡ.

Һорап-һорап ауылда ғына ла биш-алты тапҡыр ҡуйҙырҙылар. Күптәр, бигерәк тә йәштәр беҙҙең исемдәрҙе белмәй ҙә, шикелле. Иремде Хәлил, мине Ғәлиәбануу тип кенә йөрөттөләр.

Мин хушлашҡанда унан:

- Ауылды, тыуған яҡтарығыҙҙы һағынмайһығыҙмы ни? Ниңә бер ҙә ҡайтып әйләнмәнегеҙ, ней хат яҙмағанһығыҙ? - тип һораным.

- Һағынмаған ҡайҙа ул! Тик ҡайтыу түгел, бер ауыҙ бешкәс, хат яҙырға ла ҡурҡтым. Теге Барый бик яһил ине бит. Эҙләп табып, әллә ни эшләтеп ҡуйыуы ла бар, тинем. Элегерәк, үлә-китә ҡалһам, ауылыма, әсәйем янына илтеп күмерһегеҙ, тип балаларға әйтеп ҡуйырға ла уйлаштыра инем. Ләкин "Хәлил"ем мәрхүм булғас, унан теге донъяла ла айырыла алмаҫымды аңланым. Ғәлиәбануу булып йәшәп, үлгәс тә янына Ғәлиәбануу булып ятасаҡмын, - тине ул бер аҙ моңһоуыраҡ та, ғорур ҙа тауыш менән...

**Мөҙәрис БАГАЕВ.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



**Гәзитебеҙҙең 18-се һанында (30 апрель - 6 май) "Ахырызаман түгел, ә мөхәббәт заманы килә..." тигән баш аҫтында космоэнергетик Рауфан Мортазин менән монолог донъя күргәс, редакцияға ҡыуанып та, әрләп тә, борсолоп та, хафаланып та, илап та шылтыратыусылар күбәйҙе. Әлбиттә, һәр кемдең үҙ ҡарашы, үҙ проблемаһы, үҙ фекере. Бәғзеләр космоэнергеттың китабын табып биреүҙе лә үтенде. Нисек кенә булмаһын, халыҡ яңы фекергә, яңы ҡарашҡа, тормошон яҡшы яҡҡа үҙгәртеүгә битараф түгел. Шуға ла беҙ ошо һандан Рауфан Мортазиндың "Мөғжизәләр заманы. Космоэнергетика һәм һаулыҡ" тип аталған китабын ҡыҫҡартып тәҡдим итәбеҙ.**

## Бөгөнгө көн мөғжизәләре

Бөгөн ышаныслы итеп, мөғжизәләр ваҡыты, мөғжизәле күренештәр һәм һауығыуҙар ваҡыты етте, тиергә мөмкин. Хәҙер ҡасандыр үҙ заманында Ғайса бәйғәмбәр ҡулланған энергиялар менән һәр кем ҡуллана ала. Был Ерҙең һәм барлыҡ Ҡояш системаһының юғары энергиялар зонаһына - мөхәббәт зонаһына күсеүенә бәйле! (Фараздар буйынса, Ер был зонаға 2012 йылдың һуңында тулыһынса инәсәк).

Уҙған быуаттың 80-се йылдарында матбуғат баҫмаларында баҫылған, Ерҙең тирбәлеше (вибрация) көсәйәсәк, тигән мәғлүмәткә аҙ ғына кеше ышанды. Ерҙең күләме, Ҡояшҡа тиклемге арауығы артмай, нисек уның тирбәлеүе артырға тейеш? Ғәмәлдә, Ерҙең тирбәлеүе даими һәм бик тиҙ үҫә, был, үҙ сиратында, ыңғай үҙгәрештәргә алып килә. Хәҙерге ваҡытта бик һәләтле балалар (индиго) ғына түгел, ә супер һәләткә һәм мөмкинлеккә эйә кристаллик тирбәлеүле балалар тыуа. Улар ҡарап тороуға ғәҙәти һымаҡ, әммә уларҙың тән биологияһы һәм ҡан төркөмө икенсе. Уларға 5-се ҡан төркөмө ҡуялар. Кешеләрҙең эволюцияһы яңы, дөрөҫөрәге, элекке - магнит биологияһы йүнәлешендә бара. Атап үтелгән үҙгәрештәр рухиәттең артыуына, һәр кешелә тиерлек яңы һәләттәрҙең һәм мөмкинлектәрҙең асылыуына йоғонто яһай һәм быны танырға кәрәк! Бар нәмә әкиәти рәүештә үҙгәреш кисерә, юғары тирбәлеш эраһы - мөхәббәт эраһы килә!

Илаһтың юғары энергияһы һауыҡтырыуҙың яңы методикаһында ла ҡулланыла. Ул космоэнергетика тип атала. Ул уҙған быуаттың 90-сы йылдарында, Ерҙең тирбәлеше арта башлағанда, үҫеш ала. Һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә теләһә ниндәй ауырыуҙарҙан да мөғжизәле дауалау мөмкинлеге һәм юғары һөҙөмтәлелеге менән киң танылыу таба.

Нимә һуң ул космоэнергетика? "Аллаһ булдырған барлыҡ ауырыуҙарҙан ул булдырған дауа бар", - тигән аҡыллы һүҙҙәрҙе иҫләйһегеҙме? Тап бына ул космоэнергетика - күҙгә күренмәҫ йыһан энергияһы, Илаһ энергияһы була ла инде. Был каналдар менән меңәр йыл йәшәгән атланттар һәм лемурийҙар ҡулланған. Уларҙы ла космоэнергеттар тип атарға була.

Был каналдар барлыҡ тере йән эйәләре өсөн ғәмәлдә һәм уларҙың маҡсаты булып ауыртыуҙан һәм яфаларҙан тулыһынса азат булыу, физик тәндең, кисерештәрҙең, уйҙарҙың һәм яҙмыштың тулы гармонияһы тора.

Шул уҡ ваҡытта бөгөн һауыҡтырыу ғына түгел, булмаған ағзаларҙы яңынан барлыҡҡа килтереү мөмкин. Бындай миҫалдар ҙа аҙ түгел. Бының өсөн ни бары Аллаһы Тәғәләнең беҙҙе үҙенә оҡшатып яралтҡанына ышанырға, йәғни үҙ-үҙеңә ышанырға ғына кәрәк. Ирле-ҡатынлы ғалим Тихоплавтарҙың китаптары бик популяр. Татьяна Тихоплав хирургик юл менән алынған үт ҡыуығын ҡабаттан тергеҙә (Аллаһы Тәғәлә өсөн мөмкин булмаған нәмә юҡ).

Билдәле бағымсы Б. В. Болотовҡа ике аяғын тунҙырған ирҙе килтерәләр. Уның бармаҡтары боҙ кеүек өҙөлөп төшә һәм һуңынан яңынан үҫә. Икенсе бер ирҙең бала сағында уҡ һытылған күҙе урынына яңыһын тергеҙә. Анатолий Вострецов бысаҡ яраһынан һуң 56 йыл бер генә бөйөр менән йәшәй. 2006 йылдың июненән 2007 йылдың февраленә тиклем ул үҙенең бөйөрөн ҡабаттан булдыра. Был факт табиб һығымтаһы менән дә раҫлана.

Светлана Малойҙың бер аяҡлы булып тыуған улы 1 йәш тә 4 ай сағында үҙенең ике аяҡтарында атлап китә. Төшкән тештәрҙе лә ҡабат уңышлы үҫтерергә була.

Бөгөнгө көндөң мөғжизәле ваҡыты һәм энергияһы, барыһы өсөн дә мөмкин булған сифатлы мөмкинлектәре тураһында күп кеше белә һәм ҡыҙыҡһына. Күптәрҙә, беҙгә Аллаһ ҡушҡанса, шат, бәхетле йәшәү, ижад итеү, булдырыу, төҙөү, мәңге йәш һәм сәләмәт булыу теләге тыуа.

Ауыр энергия, ҡурҡыу, ауырыуҙар ваҡыты үткәндәрҙә ҡала. Ҡояш системаһының мөхәббәт зонаһына, юғары тирбәлеү зонаһына хәрәкәтен туҡтатыу мөмкин түгел.

Һәр көн кешеләр үҙҙәренең илаһи мөмкинлектәрен тәрәнерәк аңлай, мөхәббәт энергияһына күсә, мөғжизәгә ышана һәм мөғжизәләр тыуҙыра. Космоэнергетика - киләсәк медицинаһы. Космоэнергет түгел, Аллаһы Тәғәлә үҙе дауалай. Шуға ла һөҙөмтәләр ғәжәпләндererлек. 2009 йылдың декабрендә Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының космоэнергетиканы һөҙөмтәле дауалау эшмәкәрлегенең бер йүнәлеше итеп танылыуы ла юҡҡа түгел. Шулай итеп, космоэнергетика бөтөн донъяла танылыу яуланы. Әлеге көндә Классик космоэнергетиканың халыҡ-ара федерацияһы теркәлгән һәм эшләй.

**Рауфан МОРТАЗИН,**
**космоэнергет.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Нисек икенсе кеше менән яҡынайырға?

Бөтөн кешелекте яратыуҙан алда кешеләрҙе яратырға өйрәнергә кәрәк. Кешеләрҙе яратыуҙан алда аныҡ кешене яратырға өйрәнергә кәрәк. Аныҡ кешене яратыуҙан алда, уны яҡшы аңлау өсөн уның менән яҡынайырға кәрәк.

Бында "яҡынайыу" һүҙе енси мөнәсәбәтте түгел, ә киңерәк, дөйөм кешелек мәғәнәһендә бирелгән. Кешене белеү, уға яҡынайыу өсөн һеҙ уның ыңғай яҡтарын һәм етешһеҙлектәрен, ҡиммәттәрен һәм инаныуҙарын, нимә оҡшағанын, нимә оҡшамағанын белергә тейешһегеҙ.

Быны ситтән тороп эшләп булмай. Әммә кеше менән нисек яҡынайырға? Әгәр үҙегеҙҙе һалҡын, дошмандарса һәм хис-тойғоһоҙ итеп күрһәтһәгеҙ, әлбиттә, ситкә этәрәсәкһегеҙ. Әммә барыһы ла юғалмаған әле. Беҙҙең көндәрҙә лә ярҙамы ҙур булған боронғо алымдар йәшәй. Беҙ уларҙы мөғжизә тип түгел, ә үҙенде үҙгәртеү ҡоралы тип ҡабул итәбеҙ. Бары тик шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: улар ярҙам итә. Бәлки, уны берберҙәр ҙа уйлап тапмағандыр, әммә боронғо халыҡтар уны ҡулланған.

Стивен менән Люсиль өйләнешергә йыйына, әммә Люсиль үҙенә нығыраҡ кәрәк булған кешене осрата. Стивен үҙен кәмһетелгән итеп тоя һәм төшөнкөлөккә бирелә. Әммә бер аҙҙан һуң метафизик аҡылын ҡулланып, Люсилде кире ҡайтарырға ҡарар итә.

Люсиль Стивенда һыбай йөрөү костюмын онотоп ҡалдырған була. Стивен креслоға ултырып, ошо кейемде тубығына һала, өс тапҡыр тәрән итеп тын ала һәм кейемде Люсилдең үҙе тип күҙ алдына килтерә. Ул әйберҙе, әйтерһең дә, Люсиль уның мөхәббәтен тойған кеүек күҙ алдына килтереп, иркәләй. Уйынан ғына: "Икәү бергә беҙгә бик яҡшы буласаҡ", - тип ҡабатлай. Әммә күҙен асып ысынбарлыҡҡа ҡайтҡас та кейемде ташлап ҡуймай, уны һәр саҡ үҙе менән машинаһында йөрөтә, йоҡлағанда эргәһенә алып ята. Бер нисә айҙан Люсиль шылтыратып, үҙен самолеттан ҡаршы алыуын һорай. Ике аҙнанан һуң улар өйләнешә.

Был тарихта бөтөн күрһәтмәләр ҙә бар. Әгәр улар менән файҙаланғығыҙ килһә, ысынлап та һеҙ һайлаған кеше һәр саҡ эргәгеҙҙә булыуын теләйһегеҙме икәнен асыҡлағыҙ, сөнки был ысул бик көслө.

Кеше менән яҡынайыуҙың икенсе ысулы ла бар - ул көсөргәнештән арынып, ябай визуалләштереү менән бәйле. Уйығыҙҙа ғына ул кешене алдығыҙҙа баҫып тора тип күҙ алдына килтерегеҙ. Уның һул ҡолағына матур һүҙҙәр, уның менән дуҫ булырға йәки мөхәббәт мөнәсәбәтендә булырға теләүегеҙҙе әйтегеҙ.

**Тән теле менән нисек башҡаларҙы ылыҡтырырға?**

Һәр ҡайһыбыҙ башҡаларҙы ылыҡтырыуҙың ҡеүәтле ҡоралға эйә икәнен беләһегеҙме? Был ҡорал - өндәшмәү. Кәрәкле урында һәм урынлы өндәшмәү үҙ-үҙеңә ышанысты күрһәтә һәм тән теле менән берлектә тирә-яҡтағыларға көслө тәьҫир итеүе мөмкин.

Яҡынайыуҙа, ғәҙәттә, күҙҙәр ҙур роль уйнай. Психологтар, кеше ниндәйҙер яҡшы нәмә күрһә, уның күҙ ҡабағы киңәйә һәм, киреһенсә, насар нәмә булһа, ҡыҫыла, тип билдәләй.

**Роберт СТОУН.**



## 18 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 11.50**

11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Последняя встреча", 1-я серия. Сериал
22.30 "В сетях одиночества"
23.30 "Ночные новости"
23.30 "Борджиа", 7-я серия. Сериал
00.30, 03.05 "Нефть"
03.00 Новости
03.30 "Спасите Грейс"
04.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 11.50**

11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 97-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 125-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 202-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Правила маскарада", 9-10 серии
22.50 "Тайны следствия". "Чужой крест", 1-я серия
23.50 "Городок"
00.45 "Вести+"
01.05 "Профилактика"
02.15 "Кризис среднего возраста". Драма
03.55 "Большая любовь-4"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские дети"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Лихие 90-е"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". "Клинический случай", "Под Новый год". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2".
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Москва. Три вокзала", "Визит дамы", "Концы в воду". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Короткое замыкание". Сериал
00.30 "В зоне особого риска"
01.05 "До суда"
02.05 "Один день. Новая версия"
02.40 "Проклятый рай". Сериал
05.25 "Особо опасен!"

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

**14.00 "Новости недели"**
**14.30 "Муз-базар"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Автограф". Н. Мусин**
**16.45 "Любовь Земли моей". Концерт**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.20 "Учим башкирский язык"**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 Хоккей**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "На самом деле"**
**23.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**23.15 "Замандаштар"**
**23.30 Художественный фильм**

## 19 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Последняя встреча", 2-я серия
22.30 "Свидетели"
23.30 "Безумцы", 12-я и 13-я серии. Сериал
01.20, 03.05 "Поворот судьбы"
03.00 Новости
03.30 "Спасите Грейс"
04.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 98-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 126-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 203-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Правила маскарада",11-12 серии
22.50 "Тайны следствия". "Чужой крест", 2-я серия
23.50 "Вести+"
00.10 "Числюсь по России. Памяти Саввы Ямщикова"
01.00 "Профилактика"
02.10 "Горячая десятка"
03.20 "Честный детектив"
03.50 "Большая любовь-4"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские дети"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Лихие 90-е"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". "Одноклассники", "Шальные деньги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2".
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Москва. Три вокзала". "Кораблик". "Друзья до смерти". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Короткое замыкание"
00.35 "Битва за Север. Беломорканал". Документальный проект Кирилла Набутова
01.30 "Кулинарный поединок"
02.30 "Один день. Новая версия"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться" (на русск. яз.)**
**10.45, 18.20 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Фархат - принц Персии"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30, 20.30 "Орнамент"**
**12.45, 19.15 "Надо знать!"**
**13.00 "Легенда древних гор"**
**14.15 "Башкорт йыры"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 "Жемчужины Янган-Тау". Концерт**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**19.30 "Действующие лица"**
**20.00 "Весело живем!"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 Документальный фильм**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.15 Художественный фильм**

## 20 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Последняя встреча", 3-я серия. Мелодрама
22.30 "Людмила Чурсина. Я - ничья"
23.30 "Белый воротничок", 14-я серия. Сериал
00.20 "Калифрения"
00.55 "Сорокалетний девственник"
03.00 Новости
03.05 "Сорокалетний девственник". Продолжение
03.15 "Патруль времени: Берлинское решение"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 99-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 127-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 204-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Правила маскарада",13-14 серии
22.50 "Тайны следствия". "Практикантка", 1-я серия
23.50 "Вести+"
00.10 "Тайна смерти Дзержинского"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Криминальный талант"
03.35 "Большая любовь-4"

### НТВ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 12.00**

12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". "Выстрел", "Выкуп". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2".
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Москва. Три вокзала", "Улыбайся только своим". "Каталы". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных". "Шальная пуля"
00.35 "Битва за Север. Челюскин"
01.30 "Квартирный вопрос"
02.30 "Один день. Новая версия"
03.00 "Проклятый рай". Сериал
05.40 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Алиса в стране чудес". Мультфильм**
**10.45, 18.20 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Кинзя абыз"**
**14.00 "Байык"**
**14.40 "Семь чудес Башкортостана"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и др."**
**16.15 Мультфильм**
**16.45 "Волшебный курай"**
**17.15 "Тэмле" (на башк. яз.)**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 Хоккей**
**20.45 "Деловой Башкортостан"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.15 Художественный фильм**

## 21 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "ЖКХ"
18.00 Вечерние новости
18.15 "След". Сериал
18.55 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Последняя встреча", 4-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 Концерт Андрея Макаревича
00.35 "Последний король Шотландии"
02.50, 03.05 "Папина дочка"
03.00 Новости
04.30 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 100-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 128-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 205-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Правила маскарада", 15-я и 16-я, закл. серии
22.50 "Тайны следствия". "Практикантка"
23.50 "Вести+"
00.10 "Красное и белое. Вся правда об интербригадах"
01.00 "Профилактика"
02.15 "Криминальный талант"
04.10 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские дети"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Супруги". "Любовь с первого взгляда", "Письмо со свалки". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Москва. Три вокзала". "Королева прииска "счастливый". "Судьба-индейка". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Дело Крапивиных"
00.35 "Битва за Север. 1937"
01.35 "Дачный ответ"
02.40 "Один день. Новая версия"
03.10 "Проклятый рай"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Принц и нищий"**
**10.45, 18.20 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Желтоухий", 1-я серия**
**14.15 "Башкорттар"**
**14.45 "Любимые мелодии"**
**15.00 Новости (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Гора новостей" и другие**
**16.15 Поет Резеда Аминева. Концерт**
**17.15 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Надо знать!"**
**19.15 "Действующие лица"**
**19.45 "Деловой Башкортостан"**
**20.00 "Весело живем"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Орнамент"**
**20.45 "Пора разобраться"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Пятый угол". Диспут-клуб**
**23.45 Художественный фильм**

## 22 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Федеральный судья"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "ДОстояние РЕспублики. Лучшее"
23.45 "Овсянки". Драма
02.20 "Угадай, кто придет к обеду?" Мелодрама
04.25 "Спасите Грейс"
05.15 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Мой серебряный шар"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 101-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 129-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 206-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Юрмала"
22.55 "Двое под дождем". Мелодрама
00.50 "Абсолютная власть". Криминальная драма
03.20 "Защитные цвета". Социальная драма

### НТВ

06.00 "НТВ утром"
08.30 "Кремлевские дети"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". "Семейное дело", "Эксклюзив". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2".
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Москва. Три вокзала". "Рисованное убийство", "День святого Воробьева". Сериал
21.30 "Час Волкова". Сериал
23.20 "Песня для вашего столика"
00.35 "Чета Пиночетов"
01.20 "Экспресс". Биографическая драма
03.50 "До суда"
04.50 "Суд присяжных"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на башк. яз.)**
**09.15, 17.45 "Полезные новости"**
**09.30, 22.00 "На самом деле"**
**10.00 "Пора разобраться"**
**10.45, 18.20 "Учим башкирский язык"**
**11.00 "Тамыр представляет…"**
**11.30 "Сказки Андерсена". Мультсериал**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 23.00 "Замандаштар"**
**12.30 "Орнамент"**
**12.45 "Надо знать!"**
**13.00 "Желтоухий", 2-я серия**
**14.30 "Любимые мелодии"**
**15.00, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**15.15 "Тамыр". "Каникулы НЕстрогого режима и др."**
**16.15 "Млечный путь". Марьям Султанова**
**17.15 "Йома"**
**18.00 Новости (на русск. яз.)**
**19.00 Хоккей**
**20.45 "Криминальный спектр"**
**21.00 "Еду я в деревню"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.15 "Муз-базар"**
**23.45 Художественный фильм**

## 23 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Гонка с преследованием"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Александр Кайдановский. Загадки Сталкера"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Наследство", 4 серии. Мелодрама
16.15 "По следам великих русских путешественников. Александр Булатович"
17.20 "Восемь". Концерт
18.50 "Кто хочет стать миллионером" с Дмитрием Дибровым"
19.55 "Я - супермен"
21.00 "Время"
21.15 "На крючке". Боевик
23.20 "КВН"
01.00 "Модная мамочка"
03.15 "Отчаянные меры"
05.05 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.30 "Впервые замужем"
07.30 "Сельское утро"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Кадеты"
10.05 "Дела и люди"
10.25 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.50 "Честный детектив"
12.20 "Дыши со мной". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Дыши со мной". Продолжение
16.30 "Субботний вечер"
18.25 "Белый налив". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.35 "Белый налив". Мелодрама. Продолжение"
22.50 "Хроники измены". Мелодрама
00.55 "Тупой и еще тупее". Комедия
03.05 "Здравствуйте, я ваша тетя!"

### НТВ

06.00 "Попытка к бегству". "Собачья работа". Сериал
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Медицинские тайны"
09.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знак судьбы-2". Сериал
15.05 "Развод по-русски"
16.05 "Следствие вели..."
17.05 "Очная ставка"
18.00 "Угро". "Лучшие друзья девушек". Сериал
19.00 "Сегодня"
19.20 "Угро". "Лучшие друзья девушек"
20.20 "Самые громкие русские сенсации: на сцене с врагом. Небесные тела. На изломе сердца"
23.00 "Ты не поверишь!"
23.45 "Громозека". Драма
01.5 "Диалог с садовником". Драма
04.00 "Суд присяжных"
05.05 "Алтарь Победы. В бой идут одни асы"

### БСТ

**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.30, 22.45 Художественный фильм**
**09.40 "Убей меня, голубчик!" Третий звонок. Г. Насин. Уфимский государственный татарский театр "Нур"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15, 20.30 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Еду я в деревню"**
**13.30 "Йома"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45 "Полезные новости"**
**18.00 Забытые войны**
**19.00 "Деревенька моя"**
**19.30 "Хазина". Ишимбайский район**
**20.00 "Учим башкирский язык"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Следопыт"**
**20.45 "Арслан". Мужской телевизионный клуб**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**00.30 "Свидание с джазом"**

## 24 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35 "Бархатов и его телохранитель"
06.00 Новости
06.10 "Бархатов и его телохранитель"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым
10.30 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Людмила Чурсина. Я - ничья"
13.20 "Уснувший пассажир". Детектив
14.50 "Как стать принцессой"
16.55 "Своя колея"
19.00 "Судебная колонка". "Четыре руки", "Честь мундира". Сериал
21.00 "Время"
21.20 "Большая разница"
22.25 "Yesterday live"
23.20 "Я, робот". Фантастическая драма
01.20 "Маленькая черная книжка"
03.15 "Спасите Грейс"
04.05 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.15 "Как вас теперь называть?"
07.15 "Кадеты"
09.40 "Утренняя почта"
10.20 "Вести-Башкортостан". События недели"
10.40 "Уфимское "Времечко"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Дыши со мной". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Дыши со мной. Продолжение
16.00 "Смеяться разрешается"
18.00 "Дом для двоих". Мелодрама
20.00 "Вести"
20.35 "Моя любовь". Мелодрама
22.45 "Крылья ангела". Мелодрама
00.55 "Тупой и еще тупее тупого: когда Гарри встретил Ллойда". Комедия
02.40 "Небольшой дивиденд отца"
04.25 "Городок. Дайджест"

### НТВ

06.00 "Попытка к бегству". "Собачья работа"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Живут же люди!"
10.55 "Собственная гордость"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Знаки судьбы-2"
15.05 "Развод по-русски"
16.00 "Сегодня"
16.05 "Следствие вели..."
17.05 "И снова здравствуйте!"
18.00 "Угро". "Лучшие друзья девушек"
19.00 "Сегодня"
19.20 "Угро". "Лучшие друзья девушек"
20.20 "Чистосердечное признание"
23.45 "Игра"
00.40 "В зоне особого риска"
01.20 "Взрослая неожиданность". Комедия
03.15 "Суд присяжных"
04.20 "Один день. Новая версия"
04.50 "Алтарь Победы. Горячий снег Сталинграда"

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.30 "Истина, любовь и красота"**
**10.00 "Тамыр" представляет…"**
**11.45, 20.00 "Учим башкирский язык"**
**12.00 Новости (на русск. яз.)**
**12.15 "Следопыт"**
**12.30 "Тэмле"**
**13.00 "Урал батыр". XIII Республиканский конкурс исполнителей кубаира. Спецрепортаж. 1-я часть**
**13.30 "Дорога к храму"**
**14.00 "Певучая молодость моя". Концерт Ф. Бикбулатова**
**15.45 "Семь чудес Башкортостана"**
**16.00 "Надо знать!"**
**16.30 "Орнамент"**
**17.00 "Замандаштар"**
**17.30 "Весело живем"**
**17.45, 21.15 "Полезные новости"**
**18.00 "Семь жемчужин"**
**18.15 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 "Башкорттар"**
**19.30 "Волшебный курай"**
**20.15 "Сэнгелдек"**
**20.30 "Любимое дело"**
**21.00 "Урал Лото"**
**21.30 "Новости недели"**
**22.00 "Байык-2011"**
**22.45 "Вечер.com"**
**23.30 Художественный фильм**

## *КОТЛАЙБЫҘ!*

Ейәнсура районының Сирғол ауылынан һөйөклө ҡатыным, ҡәҙерле әсәйебеҙ
**Бибинур Мөхлис ҡыҙы Үликанованы**
60 йәшлек юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ!
Ҡәҙерлебеҙҙең тормош тәмен тойоп, шатлыҡтарға төрөнөп, яратҡандарын һөҡландырып, көнләшкәндәрҙе көнләштереп, яҡындарын ҡыуандырып, һау-сәләмәт, оҙон-оҙаҡ йәшәүен теләйбеҙ.

*Ҡотло булһын тыуған көнөң,*
*Нурҙар сәсһен һәр саҡ йөҙҙәрең.*
*Ҡайғы-хәсрәт күрмәй, бәхет менән*
*Үтһен ине килер көндәрең.*

**Ҡотлау һәм иң изге теләктәр менән тормош иптәше Миңлезаман, улы Ирек, ҡыҙҙары Гүзәл, Әлфиә, кейәүҙәре Мәжит, Руслан, килене Ләйсән, ейән-ейәнсәрҙәре Шәүрә, Наҙгөл, Иҙел, Данил, Шамил, Данис.**

ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН




# "ИРТӘН ТОРҒАС, ПЛАНЕТАҢДЫ ЙЫЙЫШТЫР!"

**"Түбәнге Новгородта Рәсәй Федерацияһының Дәүләт советы Президиумы ултырышында Д. А. Медведев тирә-яҡ мөхитте һаҡлауҙың бик мөһим һәм көнүҙәк проблемаһын күтәрҙе. Республикабыҙ тулыһынса экологик һөжүмдең барлыҡ күренештәрен кисерә - химик бысраныуҙан алып, ер аҫты ядро шартлауына тиклем. Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Ишембай, Мәләүез, Урал аръяғы, республиканың нефть табыусы төбәктәре тиҫтәләрсә йылдар техноген экологик һөжүмдән ныҡ зыян күрҙе. Бынан тыш, сүп-сар, һауаны автомобиль төтөнө бысратыуы, ағастарҙы ҡырҡыу көндәлек тормошобоҙҙа йәнәш бара. Экологик ҡанундар ысынбарлыҡтан ныҡ артта ҡалған. Норма билдәләү, экологик ҡеүәт, экологик тикшереү һәм контроль уҙған быуаттың 90-сы йылдарындағы законлар буйынса йөрөй. Ә урамда - шәхси милек һәм килем нормалары менән баҙар иҡтисады заманы. Федерация субъекттарының хәл-торошто үҙгәртеү өсөн рычагтары аҙ. Тәбиғәт объекттарын федераль, төбәк һәм урындағыға бүлеү берҙәм тәбиғәтте һаҡлау сәйәсәтен үткәреүгә ҡамасаулай. Ағиҙел һәм Ҡариҙел - федераль объекттар һәм уларҙы федераль контроль органдары тикшерә. Йәки урман фондын алайыҡ. Ул да федераль. Урманға түгелгән сүп- сар өсөн урындағы инспекторҙар яуаплымы, әллә федералдармы? Сүп-сар - урындағы, урман - федералмы? Кем таҙартырға тейеш? Ябай кешегә урмандың кемдеке булыуы - төбәктекеме, федералмы - мөһим түгел, иң мөһиме, унда таҙа булһын. Әммә хоҡуҡи коллизиялар ҡайһы берҙә төбәк һәм муниципалитет органдарына федераль территорияны таҙартыу хоҡуғы бирмәй. Юҡһа, средстволар маҡсатһыҙ файҙаланылған тип иҫәпләнә һәм уның өсөн штраф ҡаралған. Ғөмүмән, бындай аңлашылмаусанлыҡтар бихисап һәм тиҙ арала ҡанундарҙы һәм хоҡуҡи базаны төҙәтергә, субъекттарҙың вәкәләттәрен билдәләргә кәрәк. РФ Президенты, хәҙер экология менән шөғөлләнеү модалы ла, абруйлы ла түгел, тине. Ә уның әһәмиәтле эшмәкәрлек булыуына өлгәшергә кәрәк. Юҡһа, тағы ла насарыраҡ буласаҡ. Әлегә беҙҙе илебеҙҙең икһеҙ-сикһеҙ киңлеге ҡотҡара. Химик ҡалдыҡтарҙы ҡайҙалыр һалырға, ташларға мөмкин. Әммә бындай буш урындар, илдең экологик ныҡлығы күҙгә күренеп кәмегәндән-кәмей. Был хәҙер барыһына ла аңлашыла. Шуға күрә эшләргә кәрәк", - тип мөһим мәсьәлә күтәрҙе Рөстәм Зәки улы. Был хаҡта халыҡ нимә уйлай икән? Әйҙәгеҙ, уларҙың фекеренә ҡолаҡ һалайыҡ.**

**esther_inessa.** 2003-2005 йылдарҙа "Тәбиғәт" журналында эшләгәндә Саксониянан министрҙарҙан, эшҡыуарҙарҙан торған күпме делегация килде, улар беҙҙең ҡыйлыҡтарҙы таҙартыуға, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонына, сүп-сарҙы сорттарға айырыуға инвестиция тәҡдим итте. Презентациялар үткәрҙеләр, аныҡ тәҡдимдәр ебәрҙеләр, ҡабат килделәр, ҡасан эш башлайбыҙ, тип ҡыҙыҡһындылар. Ә беҙҙекеләр һаман, эйе, был бик көнүҙәк, мөһим, хеҙмәттәшлек өсөн рәхмәт, тинеләр ҙә, онотолар, аныҡ бер нәмә эшләнмәне. Ә йөк һаман урынында. Күрәһең, немецтар алға китеш булмаҫын аңланы. Күп һүҙ һөйләһәк, барыһы ла шул килеш ҡаласаҡ.

**natun_2010.** Таҙалыҡҡа бала саҡтан өйрәтергә кәрәк. Тәбиғәткә сыҡҡандан һуң 10 кешенең береһе генә үҙе артынан сүп-сар ҡалдырмай. Башҡа урындарҙа улар тау булып өйөлөп ята, бер кем таҙартмай. Кеше ял итергә яратҡан урындарға полиция хеҙмәткәрҙәрен ҡуйып, штраф системаһын индерергә кәрәк. Башҡаса булмай икән, кеҫәһенә һуғырлыҡ булһын. Президент-отель эргәһендә йәшәйем. Урман эсендә икенсе йыл инде сүплек. Шунда балалар, ауырлы ҡатындар йөрөй. Минеңсә, депутаттар, министрҙар, Президент етәкселегендә өмәләр ойоштороорға кәрәк. Халыҡ күреп, үҙе ярҙамға киләсәк.

**pawel1.** *Проблеманың асылы:* Ҡалаларҙа сүп-сар йылдын-йылы күберәк туплана. Хәҙер инде көнкүреш ҡалдыҡтары өсөн полигондар ҙа етмәй. Предприятиелар экология нормаһын һаҡламай, зарарлы нәмәләрҙе ташлау күләме кәмемәй, киреһенсә, арта. Браконьерҙар балыҡ һәм хайуандар запасын бөтөрә. Металл һыныҡтары йыйыу урланған металл йыйыуға әүерелде. Халыҡ экология тураһында уйламай, һәр урында бысрата.

*Экологияға ярҙам саралары:* Халҡы 50 мең кешенән күберәк булған Рәсәй ҡалаларында сүп-сар эшкәртеү заводтары төҙөргә. Рәсәй проекттарын файҙаланырға. Төрлө ҡеүәттәге заводтар проекты кәрәк. Бөтөн ил буйынса был процесты көйләүсе махсус фонд йәки корпорация булыуы зарур. Телевидениела, матбуғат сараларында, кеше күп йөрөгән урындарҙа сүпләмәүҙе һораған плакаттар рәүешендә социаль реклама, был темаға фильмдар, роликтар кәрәк. Бөтөн йәмәғәт урындарында, парктарҙа, туҡталыштарҙа, магазиндар эргәһендә, гараж һәм баҡса кооперативтарында һ.б. сүп-сар йыйыу контейнерҙары күберәк кәрәк. Тәбиғәткә һөйөүҙе һәм уға һаҡсыл ҡарашты балалар баҡсаларынан, мәктәптән тәрбиәләргә, шулай уҡ сүпләмәҫкә өйрәтергә кәрәк. Ниндәй генә булмаһын - ҡара, төҫлө металл һыныҡтарын аҡса өсөн йыйыу һәм ҡабул итеүҙе тыйыу зарур. Металл һыныҡтарын йыйыу мотлаҡ булһа, уны элекке, СССР тарҡалғанға тиклемге кеүек, был эшкә шәхси кешене яҡын ебәрмәй генә йыйырға кәрәк. Металл һынығы йыйыуҙы дәүләт предприятиелары - металлолом йыйыу пункты тарафынан башҡарырға. Урланған металды ҡабул итмәҫкә. Экология өсөн ҡорамалдарға һалымды ике тапҡырға кәметергә, һалым каникулдары бирергә. Тәбиғәтте бысратыусы предприятиелар өсөн штрафты 5-тән 10 тапҡырға тиклем арттырырға. Ҡабул ителгән саралар етмәгәндә йәки ҡабат бысратыу осраҡтарында штрафтарҙы 50-100 тапҡырға арттырырға. Балыҡ тотоу ауҙарын ирекле һатыуҙы тыйырға. Яза - ҙур штрафтар, ауҙарҙы конфискациялау, йәмәғәт эштәре. Браконьерҙы тотҡанда - һунар ҡоралын конфискацияларға, һунар билетын (әгәр булһа), тартып алырға, балыҡ тотоу ҡоралдарын конфискацияларға, ҙур штраф һалырға кәрәк.

*Финанслау сығанаҡтары:* Дәүләт банкылары, Тотороҡлолоҡ фонды, "Милли именлек" фонды средстволары, РФ Үҙәк банкы резервтары, дәүләт облигациялары сығарыу, экологияға бюджет статьялары, Рәсәйҙең Пенсия фондының ирекле средстволары.

*Йомғаҡлау (маҡсаттар):* Һәр ҡалала сүп-сарҙы ҡайтанан эшкәртеү тәбиғәтте һаҡларға, полигондарға сығарылған сүп-сар күләмен кәметергә, яңы эш урындары булдырырға, илдең донъялағы имиджын яҡшыртырға ярҙам итәсәк. Тәбиғәтте бысратыуға ҡаршы социаль реклама был темаға йәмәғәтселектең фекерен йәлеп итеп, кешеләрҙең намыҫын уятасаҡ. Балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә экология темаһын күтәреп, балаларҙы бәләкәй саҡтан уҡ тәбиғәткә һаҡсыл ҡарарға һәм уны сүпләмәҫкә өйрәтәсәкбеҙ. Металл һыныҡтарын ҡабул итеүҙе тыйыу был мәсьәләлә тәртип булдырасаҡ. Металды урлау осраҡтары, уның законһыҙ әйләнеше кәмейәсәк. Предприятиеларға зыянлы ташлауҙарҙы кәметергә генә түгел, уларҙы кәметеү өсөн ҡорамалдар һатып алырға стимул буласаҡ. Балыҡ тотоу ауҙарының ирекле һатылыуы браконьерлыҡҡа өҫтәмә этәргес булып тора. Уларҙы тыйыу балыҡ тотоуҙа браконьерлыҡ нигеҙен ҡаҡшатасаҡ. Браконьерҙарҙың ҡоралын, балыҡ тотоу ауҙарын һәм башҡа ҡорамалдарын конфискациялау, ҙур штрафтар улар менән һөҙөмтәле көрәшеү мөмкинлеге бирәсәк.

**ayratus.** Минеңсә, экологик проблемаларҙы ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа, кешеләр күп йөрөгән урындарҙа сүп һауыттарын һәм биобәҙрәфтәрҙе күберәк ҡуйып, уларҙы план буйынса хеҙмәтләндереүҙән башларға кәрәк. Әйтәйек, шул уҡ бысранған урман фонды - был ниндәйҙер абстракт атама түгел, ә һәр ерҙә тигеҙ бысратылмаған аныҡ урындар. Мәҫәлән, баҡсасылар йәмғиәтенең ҡапҡаһынан сыҡҡан баҡсасылар йәки ауыл осона һирәк йөрөгән автобусҡа сығыусылар - улар беҙҙең тәбиғәтте һаҡлау хәстәре менән йәшәмәгән, сүп-сарын ҡайҙа ташларға белмәгән кешеләр. Кисә таҙа булған урында кемдер тәмәке ҡабын ғына ташлаһа ла, уның артынан һут ҡабы оса... Яңғырауыҡлы дәүләт программаларын тап шундай, халыҡҡа аңлайышлы һәм ябай нәмәләрҙән - яҡындағы ғына булған сүп һауытынан һәм йәмәғәт бәҙрәфтәренән башларға кәрәк, минеңсә.

**ren_musik.** Урмандарҙа янғын булғанда республика халҡы уларҙы һүндерергә әүҙем йөрөмәне: урман федералдарҙыҡы, үҙҙәре һүндерһен, тинеләр. Шулай уҡ юлдар менән дә шул уҡ хәл. Беҙ йөрөйбөҙ - Мәскәүҙән идара итәләр. Нонсес - Рәсәйҙе аҡыл менән аңлап булмай.

**batyrsha1.** Экологияны яҡшыртыу мәсьәләһе экология темаһынан сығып, уны хәл итеү мәсьәләһе инновациялар индереү механизмында ята. Мәҫәлән, пластикка туҡталайыҡ. Хәҙер саф утилләштереү ысулы - икенсел эшкәртеү, әммә бының өсөн ҡеүәт етмәй. Нисек хәл итергә - пластикты алмаштырыусы, тупраҡта биогумусҡа тарҡалыусы материал сығарырға. Хәҙер бындай материалдар алынған, хатта ашарға яраҡлы электрон элементтар бар, әммә уларҙы индереүгә инновациялар механизмы юҡлығы ҡамасаулай. Иң мөһиме, "Һуңынан сүп-сарға әйләнеүсе нәмә сығарма" тигән принцип һаҡланырға тейеш.

Икенсе сәбәп дәүләт власының системаһыҙлығында. Бер үк чиновниктың ике ҡарарын нисек аңларға:

1. Экологик таҙалыҡ өсөн көрәш.
2. Ломоносов шельфында нефть ятҡылығын эшләргә.

Миҫалға Американы алһаҡ, ул нефть һәм газ ятҡылыҡтарын ҡыҫҡарта, шул уҡ ваҡытта энергияның экологик саф сығанаҡтарын эшләй. Минеңсә, дәүләт структураһы ике ултырғыста ултыра икән, беҙ изге ниәттәрҙе һүҙ итеп һөйләүҙән ары китә алмаясаҡбыҙ.

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Халыҡ әйтмешләй, аш бүлмәһендә ике хужабикә булһа - тәртип булмай. Борон, бәлки, тәртип булғандыр, әммә заман башҡа - заң башҡа. Ике хужабикә хәҙер әрепләшә, бер-береһенә һалыша башлай. Шул күҙлектән ҡарағанда, бөгөн ил "кухня"һында бер түгел, өс хужа, әммә кем нимә менән шөғөлләнергә тейешлеге генә һаман билдәһеҙ. Ә тәбиғәттең уларҙың кем хужа икәнен асыҡлағанын көтөргә ваҡыты юҡ, уның үҙ ҡанундары. Һәм кешелектең йәшел ҡалҡанын киләсәк быуындарғы тапшырыу өсөн "хужабикә"ләр түгел, ә ҡаты ҡуллы ысын хужа кәрәк.**

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

## ИНФОРМАЦИОННОЕ СООБЩЕНИЕ

Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала "Акбузат" (далее - Продавец) сообщает о проведении аукциона по продаже государственного имущества - **автомобиля ВАЗ 21150**, находящегося в его оперативном управлении.

Собственник продаваемого имущества - Республика Башкортостан.

Аукцион проводится открытым по составу участников и открытым по форме подачи предложений по цене имущества.

Аукцион состоится **"26" августа 2011 года в 10.00 час.** (по местному времени) по адресу: **Республика Башкортостан, г. Уфа, пр.Октября, 2, в редакции журнала "Акбузат"**

Краткая характеристика имущества - автомобиль ВАЗ 21150, 2005 года выпуска, государственный регистрационный номер С 790 ЕН 02, идентификационный номер ХТА21150064090461, цвет кузова - средний серо-зеленый мет., кузов № 4090461, двигатель № 4257298 (далее - Автомобиль).

Продажа Автомобиля осуществляется на основании разрешения Министерства земельных и имущественных отношений Республики Башкортостан от 08 июля 2011 года № 1858.

Начальная цена продажи - **103000** (сто три тысячи) **рублей**, в т.ч. НДС.

Форма и сроки платежа - в наличной и (или) безналичной форме единовременно в течение 10 дней с момента заключения договора купли-продажи.

Средства платежа - валюта Российской Федерации (рубли).

Обременения: отсутствуют.

Задаток - 10% от начальной цены, что составляет 10300 (десять тысяч триста) рублей.

Шаг аукциона - (1, %) от начальной цены продажи Автомобиля на аукционе, что составляет 1030 рублей.

К участию допускаются юридические и физические лица, своевременно подавшие заявку на участие в аукционе и представившие документы в соответствии с перечнем, объявленном в настоящем информационном сообщении, обеспечившие поступление на счет Продавца, указанный в настоящем информационном сообщении, установленной суммы задатка в установленный срок.

**Прием заявок для участия в аукционе** осуществляется Продавцом по рабочим дням, начиная с момента публикации настоящего информационного сообщения с 09.00 до 17.00 часов по местному времени по адресу: Республика Башкортостан, г. Уфа, пр.Октября, 2,

Редакция журнала "Акбузат".

От претендента для участия в аукционе принимается только одна заявка.

**Окончательный срок приема заявок -** 17.00 часов по местному времени "19" августа 2011 г.

**Документы представляемые для участия в аукционе:**

а) заявка по форме, установленной Продавцом;

б) платежное поручение с отметкой банка об исполнении, подтверждающее внесение задатка;

в) подписанная претендентом опись представленных документов;

г) в случае подачи заявки представителем претендента предъявляется надлежащим образом оформленная доверенность.

Физические лица предъявляют документ, удостоверяющий личность.

Юридические лица дополнительно представляют:

- нотариально заверенные копии учредительных документов;
- письменное решение соответствующего органа управления о приобретении Автомобиля, если это необходимо в соответствии с учредительными документами претендента.

До подачи заявки претенденту необходимо перечислить задаток на расчетный счет казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала "Акбузат", ИНН 0275007120, р/с 40602810600000000036 в филиале ОАО "УралСиб", к/с 30101810600000000770, БИК 048073770 на основании заключенного с ним договора о задатке.

Задаток должен поступить на расчетный счет Продавца не позднее "22" августа 2011 года.

Дата рассмотрения заявок - "23" августа 2011 г.

Победителем аукциона признается покупатель, предложивший в ходе торгов наибольшую цену. Аукцион, в котором принял участие только один участник, признается несостоявшимся.

Уведомление о признании участника аукциона победителем выдается победителю или его полномочному представителю под расписку либо высылается ему по почте (заказным письмом) в течение 5 дней с даты подведения итогов аукциона.

В течение пяти дней с даты подведения итогов аукциона с победителем аукциона заключается договор купли-продажи имущества.

Оплата производится на расчетный счет Продавца. Задаток, внесенный покупателем на счет Продавца, засчитывается в счет оплаты приобретаемого имущества.

Право собственности на объект переходит к покупателю в порядке, установленном действующим законодательством. Расходы на оформление права собственности относятся на покупателя.

После завершения торгов участникам, не ставшим победителями, денежный задаток возвращается в течение 5 дней с даты подведения итогов аукциона.

**Информация о порядке предварительного ознакомления с объектом продажи и пакетами документов представляется по контактному телефону: (3472) 292-77-66.**

✓ *Көн һайын кис ул иртән юлға сығырға тип үҙ-үҙенә һүҙ бирә, ә иртән сәйәхәтте кисектереү өсөн меңәрләгән һылтау таба. Уңышһыҙлыҡтан ҡурҡыу башҡа уңышһыҙлыҡ, бәләләрҙе күҙ алдына баҫтыра, үҙ-үҙенә ышанысты юҡҡа сығара.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БЫНДАҒЫ ҺӘР БАЛА...

## рух иленә юл ала

**"Тормош һабаҡтары" дәреслеге авторы Мәрйәм Бураҡаева программаһы буйынса эшләп килгән "Йәйләү" лагеры республика балаларына йәйге ялын бик үҙенсәлекле һәм күңелле итеп үткәрергә мөмкинлек бирә. Һәләтле балаларға белем биреү һәм һауыҡтырыу йүнәлешендә эшләүсе профилле ял итеү үҙәге быйыл Стәрлебаш районында урынлашҡан "Орленок" балалар лагеры базаһында ойошторолдо.**



Быйыл ун икенсе тапҡыр асылған был лагерҙың төп йүнәлеше балаларҙы һауыҡтырыуға, өҫтәмә белем биреүгә йүнәлтелһә лә, бында эшләүсе вожатыйҙарҙың, тәрбиәселәрҙең төп бурыстарының береһе - йәш быуындың рухи сәләмәтлеген яҡшыртыу. Быларҙың барыһын да тормошҡа ашырыу өсөн йәйләүҙә башҡорт теле һәм моңо мөхите булдырылған, мәктәптә башҡорт мәҙәниәте буйынса алған теоретик белемдәрен ғәмәлдә файҙаланырлыҡ шарттар тыуҙырылған. "Йәйләү"ҙең етәксеһе Әлфиә Мәүлийәрова билдәләп китеүенсә, был программала һәр сара ентекләп уйланылған, өс аҙнаға иҫәпләнгән ял бик мауыҡтырғыс эш төрҙәренән төҙөлгән. Бында балалар ырыуҙарға бүленеп йәшәй, үҙенең ырыуы тарихы, арҙаҡлы кешеләре аша дөйөм башҡорт тарихын, мәҙәниәтен, йолаларын өйрәнә. Балалар фекер алышыуҙарҙа, бәхәстәрҙә лә ҡатнаша, сәйәхәттәргә йөрөй, арҙаҡлы шәхестәр менән аралаша, милли уйындар уйнай.

Ял итеүҙең бындай формаһы балаларҙың үҙҙәренә лә бик оҡшай. "Кеше һәр ваҡыт үҫешергә тейеш, - ти башҡорт теле буйынса олимпиадалар еңеүсеһе, бейеүсе, спортсы, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа әүҙем ҡатнашыусы Өфө ҡыҙы Әлфиә Боҫҡонова. - Ә "Йәйләү"ҙә мин үҙемде тағы ла төрлө яҡлап байытам, мәғлүмәт туплайым, шуның өсөн бында килдем дә". Әйткәндәй, бында ял итеүсе 126 баланың һәр береһе Әлфиә кеүек уҡыуҙа ла алдынғы, йәмәғәт эшендә лә әүҙем ҡатнаша. Санкт-Петербургтан килгән Харис Иҙрисов, мәҫәлән, Башҡортостандан был ҡалаға уҡырға килгән студент йәштәргә төрлө яҡтан ярҙам итеүсе "Аманат" башҡорт йәштәре ойошмаһы эшендә лә ҡатнашып өлгөрә, "Ирәндек" фольклор ансамблендә бейей, матур итеп йырлай һәм, иң һөйөнөслөһө, башҡорт телендә таҙа итеп һөйләшә. Ғөмүмән, республиканан ситтә йәшәүсе башҡорт балалары бында туған телендә яҡшы итеп һөйләшергә өйрәнеп тә ҡайта. Лагерҙың өлкән вожатыйы Гүзәл Наҙарғолова әйтеүенсә, "Йәйләү"ҙең тағы бер маҡсаттарының береһе - һәр бер баланы мотлаҡ бейергә, йырларға һәм сәхнәлә сығыш яһарға өйрәтеү. Бының өсөн электән килгән йола буйынса, һәр ырыу үҙенең концертын ҡуя, сөнки дөйөм концерттар ваҡытында уларҙың барыһы ла сығыш яһап өлгөрмәй. Быйыл "Дан минуты" үткәреү һәләттәрҙе тағы ла күберәк асыҡларға мөмкинлек биргән. "Йәйләү"ҙең балалар менән эшләүсе вожатыйҙары араһында егеттәрҙең күп булыуы ла ыңғай күренеш. Ҡурайҙа, гитарала уйнаған, бейегән, көрәшсе булған ағайҙарын эштәрен яратып башҡарған өсөн балалар үҙҙәре лә ярата.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аҙ ғына ваҡыт эсендә баланың уйҙарын, холҡон ҡырҡа үҙгәртеп булмаһа ла, ошо мәл эсендә үткәрелгән бөтөн саралар ҙа бер маҡсатҡа йүнәлтелгәнлектән, уларҙың һәр береһенең яҙмышында ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр мотлаҡ буласағына "Йәйләү" ял үҙәген ойоштороусылар ҙа, унда балалар менән эшләүселәр ҙә күптән инанған инде. "Башҡортостаныбыҙ ҙур, унда һәләтле башҡорт балалары күп. Әммә "Йәйләү" кеүек уникаль ял итеү үҙәге бер генә заезд ҡабул итә һәм унда күп бала ял итеп өлгөрмәй. Мин һәр башҡорт балаһының "Йәйләү"ҙә ял итеп, үҙ-ара танышып, аралашып, рухланып ҡайтыуын теләйем", - тигәйне беҙҙең менән аралашҡанда Республика башҡорт лицей-интернаты уҡыусыһы Тимур Баянов та. Балаларҙың был изге теләген ололар яҡшы аңлай һәм ошо көндәрҙә БР Хөкүмәте ошондай уҡ ҡышҡы лагерь ойоштороуға рөхсәт биргән, тигән яҡшы хәбәр менән дә ҡыуандырып ҡайтарҙылар беҙҙе "Йәйләү"ҙән. Тимәк, бында ял итеп, үҙ туған халҡының тарихына, асылына һөйөү, ғорурлыҡ тойғолары кисереп, рухланып ҡайтыусылар киләсәктә тағы ла күберәк буласаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН!

# ЙӘЙ МӘШӘҠӘТТӘРЕ

**Йәйҙең күңелле мәшәҡәттәрен үҙ эсенә алған мәл әле. Емеш-еләктең мул уңышын файҙаланып, уңған хужабикәләр төрлө ҡайнатма, һут, джем ҡайната, ҡыштың һалҡын көндәрендә эҫе йәй көндәрен иҫкә төшөрөрҙәй башҡа төрлө тәмлекәстәр әҙерләй, яңы ғына йыйып алынған емеш-еләктән бәлештәр бешерә. Гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына бер-нисә ябай һәм шул уҡ ваҡытта бик тәмле рецепт теҙмәһе тәҡдим итәбеҙ. Ашығыҙ тәмле булһын!**

### Сейәнән морс (һут)

250 грамм сейә, 5 ҡалаҡ шәкәр ҡомо, 1 литр һыу. Сейәне йыуып киптергәс, ипләп кенә һөйәгенән айырабыҙ. Сейәне мискәгә һалып, ҡалаҡ менән еңелсә генә йомшартабыҙ ҙа, 2 ҡалаҡ ҡайнап һыуынған һыу ҡойоп болғатабыҙ. Еләктәрҙе иләккә һалып, һыуын һығып алғас, барлыҡҡа килгән һутты һыуытҡысҡа ҡуябыҙ. Һыуынан айырылған еләктәрҙе бейек табала 3 стакан эҫе һыу ҡойоп ҡайнатабыҙ, ҡайнап сыҡҡас, тағы ла 8 минут утта тотабыҙ. Уттан алғас, 25-30 минутҡа һыуынырға ҡуябыҙ. Һыуынған еләктәрҙе тағы ла һығып алабыҙ һәм шәкәр өҫтәп, ул иҙелеп бөткәнсе болғайбыҙ. Бүлмә температураһында һыуытабыҙ. Бер аҙ һыуынғас, һыуытҡыстағы һутты ла өҫтәп, кире һыуытҡысҡа ҡуябыҙ.

Ошо уҡ технология менән ҡара ҡарағат, ҡара көртмәле, ҡыҙыл көртмәле һәм мүк еләгенән дә һуттар эшләргә мөмкин. Әгәр ҙә инде һутҡа 1 ҡалаҡ шыйыҡайтылған крахмал да ҡушһаң, иҫ киткес тәмле кеүеҫ килеп сығасаҡ.

### Маринадтағы тәмле сливалар

1 кг ҙур булмаған слива, 1,5 стакан шәкәр ҡомо, 1 стакан ҡурай еләге һеркәһе, 4 таяҡса корица, 1 ҡалаҡ ҡәнәфер, 1 ҡалаҡ бөртөклө ҡара борос, 1 әфлисун һуты һәм ҡабығы, 1 ҡалаҡ тоҙ кәрәк буласаҡ.

2 литрлы банкаға 2,5 стакан һыу ҡойоп, тоҙ, шәкәр һалына. Шәкәре иҙелгәнсе болғай-болғай ҡайнатаһың. Һеркә, әфлисун һутын, ҡабығын һәм тәмләткестәрҙе ҡушып, тағы ла 15 минут утта тотаһың. Сливаларҙы ҡайнап торған эҫе һыуҙа 2-3 минут бешекләп алырға йәки теш таҙартҡыс таяҡса менән бер-нисә урындан тишкеләп сығырға. Сливаларҙы стерилләнгән банкаларға һалырға һәм өҫтөн ҡаплағансы сироп ҡойорға. Тултырылған банкаларҙы ҡапҡастар менән ябып, 10-15 минут стерилләйһең. Унан һуң банкыларҙы һауа сыҡмаҫлыҡ итеп ҡапҡастар менән нығытып ҡуйыу кәрәк. Тәмле сливалар 10-12 көндән әҙер буласаҡ.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУЛЫҢ ПАҠ БУЛҺА...

## йөҙөң аҡ булыр

Яҡшы ҡатын яман ирҙе ир итер, яман ир яҡшы ҡатынды ер итер

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер диңгеҙсе диңгеҙ буйлап алыҫ сәйәхәткә сыға, әммә штормға эләгә һәм ҡыйралған кәмә ярсыҡтары менән тулы ярға йөҙөп сыға. Сәйәхәтен дауам итергә теләп, диңгеҙсе ярсыҡтарҙы йыйып, кәмәһен яңынан төҙөй. Әммә әлеге һәләкәт уның күңелендә тәрән эҙ ҡалдырған була, шуға ла ул хәүефһеҙ ярҙы ташлап, диңгеҙгә сығырға батырсылыҡ итә алмай. Көн һайын кис ул иртән юлға сығырға тип үҙ-үҙенә һүҙ бирә, ә иртән сәйәхәтте кисектереү өсөн меңәрләгән һылтау таба. Уңышһыҙлыҡтан ҡурҡыу башҡа уңышһыҙлыҡ, бәләләрҙе күҙ алдына баҫтыра, үҙ-үҙенә ышанысты юҡҡа сығара. Бына шулай икеләнеүҙәр менән буш ярҙа байтаҡ ваҡыт йәшәй диңгеҙсе, ә нурҙарҙа ҡойонған диңгеҙ уны көн дә үҙенә саҡыра. Ярға килеп бәрелгән тулҡындар уға бәхет тураһында йырлай, иҫкән ел ирек, тәүәккәл булғандарҙың ҡаһарманлығы тураһында шыбырлай.**

**Берҙән-бер көндө диңгеҙсе яр буйына ятып йоҡлап китә һәм төш күрә. Төрлө шторм һәм цунамиҙар инә төшөнә, бер үк ваҡытта шул ауырлыҡтарҙы еңеүҙән килгән шатлыҡ тойғоһон да кисерә. Төшөндә шулай уҡ ниндәйҙер яҡтыртҡыс йән осоп килеүен, ҡанаттары менән ҡағылып:"Алла һине ярата.Ул һиңә үҙенең фәрештәләрен ебәрҙе. Уларҙың һәр береһе һинең өсөн ҡиммәт булған бүләк килтерер..." - тигәнен дә ишеткәндәй була. Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс, диңгеҙсе уяна һәм тирә-яғына күҙ ташлай. Диңгеҙ байып барған ҡояш нурҙары аҫтында ҡойона. Донъя матурлыҡҡа һәм гармонияға төрөлгән. Диңгеҙҙең тиҙ үҙгәреп торған холҡо тураһында уйлана-уйлана, кеше тағы йоҡлап китә. Төшөндә уның янына бер төркөм кешеләр яҡынлашыуын күрә. Уларҙың һәр береһенең ҡулында ниндәйҙер бүләк. Баяғы яҡтыртҡыс йән бер секунд эсендә генә күренеп ҡала һәм "Был кешеләр һинең дуҫтарың. Уларҙың бүләген ҡабул ит!" ти ҙә юғала. Бер кеше уға "Ваҡыт ҡиммәт" тигән һүҙҙәр яҙылған алтын сәғәт һона. Икенсе кеше донъя картаһы бүләк итә, унда "Үткәндәр" тигән һүҙҙәр менән билдәләп, уның һәләкәт кисергән урыны һәм ваҡыты билдәләнгән була. Өсөнсө кеше уға компас һона һәм: "Сәйәхәт тамамланманы әле. Ул һин ҡурҡҡанда ла дауам итә. Һин тере булғанда сәйәхәт һәр саҡ дауам итәсәк", - ти.**

**Кеше уянып китә һәм шатланып ҡысҡырып ебәрә:"Ваҡыт ҡиммәт! Башҡаса мин уны үҙемдең бәхетһеҙ яҙмышым тураһында уйланып үткәрмәйәсәкмен. Мин үткәндәге хаталарымды онотасаҡмын һәм барыһын да яңынан башлаясаҡмын!" Шунда тулҡындар ҡыуанысլы йыр һүҙып ебәрә:"Юлға! Юлға! Юлға!".**

1158221891100б

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 2722